ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

10-16 декабрь (аҡъюлай) 2022

№49 (1039)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклe

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тарихи ҡомартҡылар...**

бер урынға туплана



4-5

**Ҡот һәм бәрәкәт...**

ошо биҙәүестәрҙә



6-7

**Фильмдар образдар тыуҙыра,**

башҡортса фекерләргә лә ярҙам итә



8-9

**Һарыҡ йөнө...**

дауа ла, йылы кейем, йылы ҡаралды ла



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Иғтибар! "Киске Өфө" гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 5 декабрҙән 15 декабргә тиклемге ун көнлөктә ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 642 һум 38 тингә яҙылырға саҡырабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙҙең ғаиләлә туған телдең хәлдәре нисек?

***Гөлсимә ИШТАНОВА, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы журналисы:*** Балалар үҙ телен белеп үҫһен, үҙ телендә һөйләшһен, уны ғүмер буйы ихтирам итһен, яратһын өсөн ата-әсә уларҙы нисек тәрбиәләргә тейеш? Иң тәүҙә туған телен атай-әсәй үҙе ихтирам итергә, үҙе һөйләшергә тейеш. Юғары белемле булмаһалар ҙа, юғары мәҙәниле, ҡулдарынан гәзит-журнал төшмәгән атайым менән әсәйем тәрбиәһен алып үҫтем. Атайым тел нескәлектәренә иғтибарлы булды, әсәйем иһә - торғаны менән ҡанатлы һүҙ, мәҡәл-әйтемдәр һандығы. Шуға ла улар беҙҙе үҙҙәренең өлгөһөндә тәрбиәләгәндер: бөтәбеҙ ҙә әсәбеҙ теле хазиналарынан илһам алып, уға хеҙмәт итеп йәшәйбеҙ, шөкөр.

Балаларҙы әрләп түгел, өлгө биреп тәрбиәлә, тиҙәр. Ғаиләбеҙҙә башҡорт теле - дәүләт теле. Өс улымдың да теле туған телебеҙҙә асылды. Артабан иһә ҡыйынлыҡтар башланды. Балалар баҡсаһына барыу менән малайҙарым русса һөйләштергеләп ҡайта башланы. Башҡорт төркөмөнә йөрөп, башҡорт телендә һөйләшкән тәрбиәсе ҡарамағында булһалар ҙа, тиҙ генә рус һүҙҙәрен дә отоп алдылар былар. Өй тупһаһын аша атлау менән башҡортса һөйләшәбеҙ, тигән талапты ҡаты ҡуйырға тура килде. Әммә балалар барыбер телебеҙҙең бөтөн нескәлектәрен белеп етмәй. Был айырыуса башҡорт теленән өйгә эш әҙерләгәндә һиҙелә. Ҡайһы ваҡыт шундай ауыр күнегеүҙәр, шундай ауыр текстар уҡырға тура килә, йығылып китерлек. Хикәйәләрҙә осраған ҡайһы бер һүҙҙәрҙе саҡ аңлатып бирәм. Бындай текстарҙы беҙ уҡытыу башҡорт телендә алып барылған мәктәптә 9-сы кластарҙа уҡый торғайныҡ, шикелле. Унығында ла уҡытыусыбыҙ ҡыҫҡаса һөйләп аңлата, текстарҙы тулыһынса уҡыуҙы талап итмәй торғайны. Хәйер, хәҙер беҙ урта кластарҙа үткән темаларҙы башланғыс синыфтарҙа уҡ аңлата башлайҙар, шуға ла бөтә дәреслектәргә ҡарата ла талаптар бер үк дәрәжәләлер. Текстарҙы аңламай, күнегеүҙәрҙе минһеҙ эшләй алмай ултырһалар, гел әйтәм: "Башҡорт теле иң рәхәт тел, нисек ишетәһең, шулай яҙаһың". "Аһа, рәхәт... Ә улайһа, нишләп эйәлек заты ла бар, эйәлек килеш тә бар?" "Бәй, - тим, - рус теленән дә аптырап ултыра торғайнығыҙ бит: нинә "имя существительное", "подлежащее" һәм "именительный падеж" бөтәһе лә бер үк һорауға яуап бирә, тип"... Уйланалар, ирендәрен ҡыбырлатып, эстән әйтеп ҡарайҙар, яҙып та ҡарайҙар һәм шунын менән килешкәндәй булалар.

Шулай ҙа тап мәктәптә башҡорт телен өйрәнеү беҙгә ауырыраҡ бирелә. Шуға башҡа фәндәрҙән ярҙам итмәһәм дә, башҡорт теленән дәрес әҙерләгән саҡтарында балаларымдың яндарында ултырам. Балалар иғтибарлы ул туған телгә, һөйләшергә тырышалар, тик уларҙы ваҡытында дәртләндереп ебәрергә генә кәрәк. Яңыраҡ бәләкәсебеҙ, дуҫым менән башҡортса ғына һөйләшергә булдыҡ, тип һөйөндөрҙө.

"Уй, мин башҡортса һөйләшә белмәйем", тип ҡурҡып торғандарҙы эшемдә лә йыш күрергә тура килә. Әҙерәк йүнәлеш биреп ебәрһәң, әсә телен иҫкә төшөрөп, кинәнеп һөйләшеп ала ла китәләр, рәхмәт яуғырҙар. Һуңынан үҙҙәре лә аптырай. Шуға күрә балаларға ғына түгел, бер-беребеҙгә лә ҡәтғи булмайыҡ, тигән теләктәмен.

## ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# БАШҠОРТ ҠАЛАҺЫ...

## 1375 йылғы донъя картаһында



**Өфөгә Башҡорт ҡалаһы күрһәтелгән боронғо донъя картаһының күсермәһе килтерелде. 1375 йылғы Каталон атласы - Монгол империяһының барлыҡ ҡалалары һәм хандары күрһәтелгән берҙән-бер Европа картаһы. Башҡортостан өсөн мөһим артефакт II Мәжитов уҡыуҙары күргәҙмәһендә урын алды. Атласты конференцияла ҡатнашыусы, Рәсәйҙең билдәле тарихсыһы, Сыңғыҙхандың донъялағы иң ҙур музейы экспозицияһы авторы Александр Юрченко килтерҙе.**

Тикшеренеүсе билдәләүенсә, был өс метрлы төҫлө карта төп нөсхәнең күсермәһе. Каталон атласы үҙе Париждың Милли китапханаһында һаҡлана. Донъя картаһы һарыҡ тиреһенән эшләнгән алты пергамент өлөштән тора. Атлас король Педро Арагонскийҙың шәхси хеҙмәткәре - "донъя карталары һәм компастар оҫтаһы", картограф Авраам Крескес тарафынан 1375 йылда төҙөлгән.

Интернетта картаның ҡулдан төшөрөлгән күсермәләре бирелгән һәм уларҙың төп нөсхә менән уртаҡлығы бик аҙ. Тап ошо сәбәп был документты фәнни йәһәттән өйрәнеүгә кәртә булып тора ла инде. Икенсе сәбәп - символдар һәм билдәләрҙе уҡыу, аңлау өсөн кодтарҙың юғалыуы. Картала 27 хаким, йөҙҙәрсә ҡала, сауҙа юлдары һүрәтләнә. Карта эшләргә заказ биреүсе һәм Испаниянан алып Ҡытайға тиклем ҡалаларҙың сәйәси йәһәттән ниндәй өлкәгә ҡарауы тураһында аныҡ мәғлүмәттәрҙе белеүсенең кем икәнлеге сер булып ҡала. Сиркәү эшмәкәрҙәре лә, королдәр ҙә донъяға бындай киң ҡарашта булмай. Тикшеренеүсенең юлында торған өсөнсө кәртә: документтың киң масштаблы булыуын аңлаған тарихсы картала айырым символдар менән билдәләнгән төп үҙәктәрҙә шәхсән булырға тейеш.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

12+

✓ *Әлбиттә, уларҙың үҙ йолаһы шулайҙыр, ә беҙҙең йолабыҙ икенсе: исем эргәһендә ағай, авызый, апай, ҡустым, энем, мырҙам, һеңлем, һылыуым, ҡарындашым, тағы әллә күпме туғанлыҡ терминдары теҙелеп китә.*



## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТУҒАН ТЕЛЕМ...

***Зөбәржәт СУФИЯНОВА, ветеран-уҡытыусы, Белорет районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:*** Башҡортобоҙҙоң матур-матур туғанлыҡ терминдары һөйләшебеҙҙән бөтөнләй төшөп ҡалып бөтөп бара бит. Һеҙҙе шул борсомаймы?

Бына кисә генә етәксе булып эшләгән бер ханым коллективындағыларға дәғүә белдерә: "Үҙ-ара килен, ҡоҙаса, ҡоҙағый, апһын тип өндәшеүҙе туҡтатығыҙ, был - "невоспитанность"! Һәр кемдең исеме-атаһының исеме бар, шулай өндәшегеҙ бер-берегеҙгә", - ти. Мин һүҙгә ҡыҫылып, башҡорттағы был туғанлыҡ терминдарының яҡынлыҡ, хөрмәт, матур мөнәсәбәт билдәһе булыуын аңлатып маташҡан булдым. Өндәшмәй тыңланы тыңлауға, төшөнһә, бик яҡшы булыр ине лә бит...

Иремдең ағаһы ғаиләһе менән ғүмер буйы ҡалала ғына йәшәп, урыҫлашып бөткәйнеләр. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ул миңә "киленкәйем" тип кенә өндәшә ине. Һәм мин дә уға ихтирам менән "ҡайнағам", ә ҡатынына яратып ҡына "ҡайынеңгә", тип, ул миңә "килендәш" тип өндәшә инек. Эәй, шул ваҡыттар һағындыра, туғанлыҡ хистәре көслө саҡтар ине бит. Һәр байрамды, тыуған көндәрҙе, ялдар, отпускыларҙы шау-гөр килеп бергә үткәрә инек. Кем алдараҡ ҡотлай, хәл белешә, тип ярыша торғайныҡ хатта.

Шундай аралашыуҙар ҡалдымы икән хәҙер? "Туғаным" тип өҙөлөп тороусылар бар ул, әммә һирәк. Урыҫтарға оҡшап барабыҙ. Исеме-атаһының исеме менән өндәшәбеҙ, туғанлыҡ терминдары менән һөйләшеүҙе тәрбиәһеҙлек тип уйлайбыҙ. Урыҫта бит үҙенән ун, илле йәшкә өлкәнгә лә исеме менән генә өндәшәләр ҡайһы берәүҙәр. Бер саҡ үҙемдән 30 йәшкә өлкән танышым Мария Николаевнаға "тетя Мария" тип өндәшкәйнем, Мария ғына тип әйтергә ҡушып, ризаһыҙлыҡ белдерҙе. Әлбиттә, уларҙың үҙ йолаһы шулайҙыр, ә беҙҙең йолабыҙ икенсе: исем эргәһендә ағай, авызый, апай, ҡустым, энем, мырҙам, һеңлем, һылыуым, ҡарындашым, тағы әллә күпме туғанлыҡ терминдары теҙелеп китә. Үҙеңдән бер йәшкә өлкәненә лә исеме менән генә өндәшеү - оло тәрбиәһеҙлек һанала.

Мәктәптә уҡытҡан саҡта дәрестә ауылдан килгән берәй бала "Апай, апай" тип ҡул күтәрһә, эй оҡшай торғайны. Был бала рус класында, рус гимназияһында уҡыһа ла, минең башҡорт икәнде белеп, танып, "апай" тип мөрәжәғәт итә бит әле, тип шатлана инем.

1980 йылдарҙа беҙ, ҡалаларҙа уҡытҡан уҡытыусылар, башҡортлоҡто онота яҙғайныҡ бит инде ул. Яңылыш ҡына бер-беребеҙгә башҡортса өндәшһәк, бер-беребеҙгә апай-ағай тип мөрәжәғәт итһәк тә, эргә-тирәләгеләр ризаһыҙлыҡ белдерә ине. 90-сы йылдарҙа республикаға суверенитет яулап, мәктәптәрҙә туған телдәрҙе уҡытыу буйынса матур үҙгәрештәр башланғас, ҡалабыҙҙағы уҡытыусыларҙың яртыһынан күбеһе башҡорт булыуын, башҡортса һөйләшеүен белеп, аптырағаным хәтеремдә...

Әйткәндәй, туған телебеҙҙә һөйләшергә ҡурҡҡан ул заман шул тиклем үҙгәрткәйне, бахырландырғайны милләттәштәрҙе. Хатта республика үҙаллылығы өсөн ҡултамғалар йыйғанда ул ҡағыҙға яртыһы башҡорт милләтле уҡытыусыларҙан торған коллективта бер генә кеше ҡул ҡуйғайны. Бына шундайыраҡ һынауҙар аша үткән туған телебеҙҙе бөтөрөргә, ярлыландырырға юл ҡуймайыҡ, йәмәғәт, тип, күңел һыҙланыуҙарымды еткермәксе булдым был һүҙемдә.

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Һеҙҙең ғаиләлә туған телдең хәлдәре нисек?

***Хөрмәтулла ҮТӘШЕВ, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, С.Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты:*** Әсә телебеҙҙе һаҡлау, уҡытыу тураһында күпме генә бәхәс һәм фекер алышыуҙар алып бармайыҡ, әгәр бала үҙ телендә һөйләшергә ғаиләһендә өйрәнмәһә, балалар баҡсаһы ла, мәктәп тә был йәһәттән әллә ни ҙур уңышҡа өлгәшә алмаясаҡ. Әсә теленә һөйөү балаға әсә һөтө, әсә наҙы, ата һөйөүе менән бирелергә тейеш. Шуға күрә бөтөн нәмә ғаилә башлыҡтарына бәйле: улар үҙ йортонда, ғаиләһе мөхитендә туған телендә һөйләшәме, бәпестәренә бишек йыры йырлаймы, кескәйҙәрен яратып-һөйөп, маҡтай торған иркә һүҙҙәр менән наҙлаймы, ҡайһы саҡ, кәрәк икән, шелтәләп, башҡортса "ҡыҙҙырып" аламы, бергәләшеп башҡортса китаптар уҡыйҙармы?

Оҙон-оҙаҡ һөйләгәнсе, һеҙҙең һорауға яуап итеп, үҙ ғаиләмдә туған телебеҙ хәле менән таныштырып китеү хәйерлерәктер, тием. Тик тәүҙән үк шуны әйтмәксемен: әгәр кемдер туған тел тәрбиәһенә ауыр, ҡатмарлы мәсьәлә итеп ҡарай икән, яңылыша. Үҙең булып, асылыңа тоғро ҡалып йәшәү ҙә етә. Эшеңдә рус телендә аралашырға тура килә икән, өйөңдә үҙ телеңдә һөйләш. Балаларың да шулай ғәҙәтләнер. Өс улым бар: Азамат, Айтуған, Арыҫлан. Бәхеткә, балаларыбыҙ өйҙә лә, минең эштә лә башҡорт мөхитендә үҫтеләр, бәләкәйҙән театр сәхнәһендә спектаклдәрҙә ҡатнашып, әсә теленә мәжбүрләп түгел, тәбиғи рәүештә йәлеп ителделәр. Телмәрҙәрен үҫтереүгә, башҡортса фекер йөрөтөү зирәклегенә уларға туған мөхитебеҙ булышлыҡ итте. Әйткәндәй, бөтәһенең дә башҡорт мәктәбендә - Ф.Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһында белем алыуы ла уларҙың илһөйәрлек, телһөйәрлек рухтарын нығытыуға ҡеүәт өҫтәне. Өсәүһе лә туған тел, әҙәбиәт буйынса саралар башлап йөрөүселәр булдылар, конкурстарҙа, олимпиадаларҙа ҡатнашалар, район, ҡала конкурстары финалында ла йыш сығыш яһайҙар ине.

Ике өлкән улым да ғаиләле хәҙер, төпсөгөбөҙгә кисә генә 21 йәш тулды. Шул уңайҙан уны бала саҡта төшөрөп алған видеолар ҡарап ултырҙыҡ. Ике йәше лә тулмаҫтан, теле асылды: әсәһе уға ҡыҫҡа ғына шиғырҙар ятлатып, әкиәттәр һөйләтеп, тиҙәйткестәр әйттерә, шуларҙы ҙурайғас ҡарарбыҙ тип, видеоға яҙҙыра килдек: 3 йәштән, биш, ете йәштән... Хәҙер иһә Айтуған менән Азаматтың ҡыҙҙары: Камилла, Гөлнара, Индираны ла шундай уҡ ғаилә йолабыҙ буйынса тәрбиәләргә тырышабыҙ. Арыҫланыбыҙҙың тыуған көнөндә тап ана шул хаҡта һөйләшеп алдыҡ та инде. Яңы йылды, ғәҙәттә, бөтөн ғаилә менән бергә үткәрәбеҙ һәм мотлаҡ башҡорт халыҡ әкиәте буйынса мини-спектакль әҙерләйбеҙ: музыкаль оҙатыу, костюмдар әҙерләү - барыһы ла ысын театрҙағы һымаҡ. Бөтәбеҙ ҙә ҡатнашабыҙ. Белеме буйынса хор дирижеры булараҡ, спектаклде ҡатыным музыкаль яҡтан биҙәй, телмәр үҫтереү, әҫәрҙән өҙөктәр ятлатыу менең өҫтә. Шулай итеп, Яңы йылда гөр киләбеҙ. Былтыр "Бүре менән төлкө" әкиәтен ҡуйғайныҡ, был юлы иһә, ҡуян йылын ҡаршылап, "Ҡуян менән терпе" әкиәтен әҙерләй башланыҡ. Ейәнсәрҙәр зирәк: пьесанан өҙөктәрҙе шундуҡ отоп алып, оҙаҡ һөйләп йөрөйҙәр аҙаҡ. Тыуғандан, бәләкәйҙән күңелгә һеңгән бер ҡасан да онотолмай. Был минең ғаиләмдең йәшәү рәүеше.

## АҠМУЛЛА ҺҮҘЕ

# НӘСИХӘТТӘР

*(өҙөк)*

Иң әүүәл кәрәк нәмә - иман, тигән,
Ахирәт эштәренә инан, тигән.
"Хоҙай, кисер!" - тигән менән эш бөтмәйҙер,
"Иман шарты"н өйрәнмәһә - Иван, тигән.

Икенсе ҡиммәт нәмә - күңел, тигән,
Күңеле боҙоҡ әҙәмдән төңөл, тигән.
Боҙоҡҡа ер өҫтөнән аҫты артыҡ,
Булмаһа күңел таҙа - күмел, тигән.

Өсөнсө ҡиммәт нәмә - аҡыл, тигән,
Аҡылһыҙҙа тәүфиҡ яғы таҡыр, тигән.
Аҙ эшкә асыуланып, динен боҙор,
Иманын көфөрлөккә һатыр, тигән.

Дүртенсе ҡиммәт нәмә - шөкөр, тигән,
Ниғмәткә шөкөрһөҙлөк - көфөр, тигән.
Ятҡан ерҙән: "Хоҙай, кисер", - тигән - хурлыҡ,
Сәбәп эҙләп, төҙ юл менән йүгер, тигән.

Бишенсе ҡиммәт нәмә - әҙәп, тигән,
Әҙәп тигән - мөхәббәткә сәбәп, тигән.
Көфөрлөк әҙәплелә тормағандай,
Әҙәпһеҙҙә иман тороу ғәжәп, тигән.

Алтынсы ҡиммәт нәмә - сабыр, тигән,
Сабыр кеше моратын табыр, тигән.
Һәр эштә сабырһыҙҙың төбө - хурлыҡ,
Сабырһыҙлыҡ башҡа бәлә һалыр, тигән.



Етенсе ҡиммәт нәмә - ихлас, тигән,
Ихласһыҙҙың эше ҡабул булмаҫ, тигән.
Аҡыллылар ошо һүҙҙе белһә кәрәк:
Иман, аҡыл, әҙәп, ихлас - юлдаш, тигән.

* * *

Ашҡан бер ғалим сыҡһа, яманлайбыҙ,
Мәжлесте ғәйбәт менән тамамлайбыҙ.
Эшебеҙ - йә мыҫҡыллау, йәки хурлау,
Үҙебеҙҙе һәр ғәйептән аманлайбыҙ.

Яҡшыны һүккән менән аты китмәҫ,
Яман һүҙҙең күңелдән даты китмәҫ.
Саф алтынды нәжескә буяу менән,
Нәжес китәр, алтындың заты китмәҫ.

Ҡыйыш уҡ атҡан менән туры китмәҫ,
Күңелдән яман һүҙҙең ҡуры китмәҫ.
Ҡоторған эт һауа ҡарап өргән менән,
Асманда торған айҙың нуры китмәҫ.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 8 декабрҙә үҙенең телеграм-каналында Миңлеғәли Шайморатов исемендәге батальон яугирҙарын фронт һыҙығынан ҡыҫҡа ваҡытлы ялға сығарыуҙарын хәбәр итте. "Әле Луганск Халыҡ Республикаһының Красный Луч ҡалаһына командировкаға килгән табиптар ҡабул итә. Бер нисә көндән уларға республиканан күсмә стоматология комплексы ҡушыла", - тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы.

✓Рәсәй Хөкүмәте 2023 йылға эшһеҙлек буйынса пособие күләмен билдәләне. Уның максималь күләме элекке кимәлдә ҡала - 12 792 һум. Пособиеның минималь күләме 1,5 мең һум кимәлендә һаҡлана. Башҡортостанда 2022 йылда эшһеҙлек буйынса пособиеның минималь күләме (төбәк компонентын иҫәпкә алып) 1725 һум тәшкил итә. Максималь лимит - 14710 һум.

✓Рәсәй Президенты 2023 йылда йәшәү минимумын 14 375 һум күләмендә билдәләгән законға ҡул ҡуйҙы. 2022 йылға федераль МРОТ 13 890 һум тәшкил итте. 2021 йылдың 1 ғинуарынан хеҙмәткә түләүҙең минималь күләме, һәр төбәк буйынса дифференциация коэффициентын иҫәпкә алып, Рәсәй Федерацияһы буйынса уҙған йылға медиан эш хаҡы дәүмәленән 42 процент күләмендә иҫәпләнә.

✓Киҫкен респиратор вирус инфекцияһы һәм грипп менән сирләү осраҡтарының артыуына бәйле поликлиникаларҙың эш ваҡыты оҙайтыла. Хәҙер эш көндәрендә медицина учреждениеларында ауырыуҙарҙы киске сәғәт 9-ға тиклем ҡабул итәләр. Шулай итеп, табиптар бер сәғәткә оҙағыраҡ эшләй. Республикала йәшәүселәр шәмбе иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 8-гә тиклем табиптарға мөрәжәғәт итә ала. Йәкшәмбе көндө дежур белгестәр эшкә сыға, улар саҡырыу буйынса өйҙәргә бара.

✓Республикала яңы йыл саралары һәм иртәлектәр ОРВИ, грипп буйынса эпидемияға ҡаршы сикләүһеҙ уҙғарыла. Закондар һәм санитар ҡағиҙәләр киҫкен респиратор инфекциялар менән сирләү осраҡтары артҡан осорҙа күмәк кеше ҡатнашлығындағы саралар үткәреүҙе тыймай, тине Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе Анна Казак "Башинформ" агентлығында үткән матбуғат конференцияһында.

✔ *Декабрҙә фаразланған сираттан тыш пенсия урынына ... коммуналь хеҙмәттәргә сираттан тыш тариф арттырыу хаҡындағы ҡарарға ҡул ҡуйылды. Был коммуналь хеҙмәттәргә быйыл ғына икенсе тапҡыр хаҡ арттырыу!*



БЫНАҒАЙЫШ!

# "БҮЛӘК" ӨСӨН ДӘ... үҙебеҙ түләйбеҙ!



**Әле яңыраҡ ҡына социаль селтәрҙәрҙә "ун өсөнсө пенсия" хаҡында хәбәр таралғайны. Сираттағы алдаҡ булдымы был, әллә социаль йүнәлештә эшләүсе бер нисә депутаттың эшкә ашмаҫ хыялымы - ҡапыл пәйҙә булған кеүек, ҡапыл юҡҡа ла сыҡты.**

Ошо хаҡта ҡыҙыҡһынып, әҙме-күпме ышаныслыраҡ интернет порталдарын ҡарай башлағас, был хәбәрҙең, ҡағыҙә булараҡ, тәҡдим-проекттары көн алдын уҡ уңышһыҙлыҡҡа дусар ителеүсе ЛДПР менән "Ғәҙел Рәсәй - Хәҡиҡәт хаҡына" партияларының башланғысы икәне асыҡланды һәм шуның менән 13-сө пенсия хаҡындағы "утопик хыял"ға ҙур нөктә ҡуйылыуы аңлашылды. Шулай ҙа был хәбәрҙең тикмәгә таратылмауы уның менән бәйле күңелдә тыуған хәүефте көсәйтә генә бирҙе: беҙҙә бит йыл ахыры, ғәҙәттә, халыҡҡа "Яңы йыл сюрприздары һәм бүләктәре" эшләй торған осор. Тимәк, әлеге татлы фейк төтөнө артынан әсе хәҡиҡәт пәйҙә буласаҡ!

Һәм шулай килеп сыҡты ла: декабрҙә фаразланған сираттан тыш пенсия урынына ... коммуналь хеҙмәттәргә сираттан тыш тариф арттырыу хаҡындағы ҡарарға ҡул ҡуйылды. Иғтибар итегеҙ, был коммуналь хеҙмәттәргә быйыл ғына икенсе тапҡыр хаҡ арттырыу! "Икенсе тулҡын" күп ғаиләләрҙең бәкәленә һуғасаҡ, сөнки һуңғы мәғлүмәттәр буйынса илдә халыҡтың килем күләме кәмеүгә табан бара. Шуға ҡарамаҫтан, Яңы йыл бүләгенә "тишек" кеҫәбеҙҙән беҙ үҙебеҙ сығарып түләйәсәкбеҙ: " торлаҡ-коммуналь хужалығы эшен өҙлөкһөҙ дауам итеүгә һәм уның инфраструктураһын үҫтереүгә" хөкүмәт беҙҙән аҡса талап итә. Эйе, был өлкәлә хаҡ арттырыуҙы беҙгә гел генә "йылылыҡ трассаларын йүнәтеү, һыу үткәргес торбаларҙы ямау һәм алмаштырыу" өсөн кәрәк, тип һылтаулап килләр, ләкин был "ямауҙар"ҙың осо-ҡырына сығылыҡ түгелдер, күрәһең. Хәҙер бындай яуап хатта нигеҙһеҙ рәүештә хаҡтар артыуына юл ҡуймаҫҡа бурыслы Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәттән дә (ФАС) ғәҙәти аңлатмаһына әйләнде.

Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ тарифтарына сираттан тыш индексацияның сиккә кимәле 9 процент тип билдәләнә һәм был һан ҡайһы бер эксперттар, шул иҫәптән Монополияға ҡаршы хеҙмәт өсөн дә йәбешер һаламға әүерелде: йәнәһе лә, 9 процент бөгөнгө инфляция кимәленән түбәнерәк, шулай булғас, тауышланырға ла урын юҡ. Юғары иҡтисад мәктәбенең иҡтисад институты директоры Илья Долматов фаразлауынса, йыл һөҙөмтәләре буйынса инфляция кимәле 12,4 процент булыр тип көтөлә. "Был, тимәк, Рәсәй Хөкүмәтенен "инфляция минус" принцибын һаҡлауы һәм беренсе сиратта ҡулланыусылар мәнфәғәтен яҡлауы хаҡында һөйләй", - тип һығымта яһай эксперт. Ә бына ҡулланыусы мәнфәғәтен яҡлауҙы икенсе юҫыҡтараҡ, халыҡ мәнфәғәте - ул беренсе сиратта ҡулланыусының глобаль хаҡтар артыуына ҡаршы торорҙай түләү һәләтен тәьмин итеү, ә быныӊ өсөн эш хаҡы һәм пенсиялар күләмен арттырыу, илдәге коммуналь селтәрҙәрҙе яңыртыуға ҡаҙна аҡсаһын тотоноу, тип аңлай инек беҙ. Ләкин... Дөрөҫ, быйыл сентябрь башында үҙенең Telegram-каналында вице-премьер Марат Хөснуллин төбәктәргә тап ошо маҡсаттарҙан 8 млрд буленеүе хаҡында яҙып сыҡҡайны ла ул, тик был айырым коммуналь хеҙмәттәр предприятиеларына төбәлгән адреслы ярҙам сараһы булып сыҡты.

Былай ҙа ауыр, хәүефле мәлдә тарифтарға хаҡ арттырыу кеүек популяр булмаған ҡарарҙы аҡлауы ҡыйын, әлбиттә. Хәтергә төшөрәйек, ошо йылдың йәйендә генә бит әле, 1 июлдән электр энергияһына -5,1, һыу менән тәьмин итеүгә - 4.4, һыу үткәреүгә - 3.4, йылылыҡ өсөн - 3,7, газға 3 процентҡа хаҡ арттырылғайны инде, хәҙер килеп, тағы ла 9 процентҡа ҡиммәтләнә. Ә башҡа күрһәткестәр үҙгәрешһеҙ ҡаласаҡ... тип уйлаһағыҙ, яңылышырһығыҙ, нөктә ҡуймай торайыҡ, сөнки беҙҙең тағы бер һәм берәгәйле аҡса һуғыс тороп ҡала яҙған бит! Яңы йыл "бүләктәре" мул булмаҫсы, күңелегеҙҙе киң тотоғоҙ: властар капиталь ремонт өсөн хаҡтарҙы 18-20 процентҡа арттырыу ниәте менән яна. Күрәһең, болғансыҡ һыуҙа балыҡ тотоп ҡалырға теләүселәр бихисап. Шундайҙарҙан "БР төбәк операторы" менән Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы капремонт хаҡын арттырыу тураһында ҡарар проекты әҙерләп тә ҡуйған, ти. Төбәк операторы етәксеһе Павел Сафонов Дәүләт Йыйылышының профиль комитеты ултырышында аңлатыуынса, торлаҡтың кв.метрынан 7-9 һум - ул бүстәк, шуға ла был һанды 17-19 һумғаса арттырыу кәрәк, тип ҡырталаша икән. Депутаттар ни тиһен инде, улар һәр ваҡыттағыса икеләнеберәк ҡалған һәм төбәк Хөкүмәте ягына баш һелккән: унда ни тиерҙәр?

Уйлап ҡараһаң, утҡа, һыуға ярты эш хаҡын түләйбеҙ ҙә ул, тик бына һыуҙан тамаҡ туймай бит әле. Үлмәҫ өсөн халыҡҡа ашарға ла аҡса кәрәклеген властар иҫтәренә төшөрөрмө? Ошо квартал башынан ғына ла икмәккә - 21,5, һөт ризыҡтарына - 22,7, ярма төрҙәренә - 19,2, иткә - 17,1, макарон төрҙәренә - 16,5, шәкәргә 31,7 процентҡа хаҡтар артҡан, тип яҙа ғәзиттәр Башстат мәғлүмәттәренә һылтанып. Эшләмәүсе пенсионерҙарҙы сираттағы индексация көтә, ә бына эшләүселәрҙең эш хаҡтары ни хаҡ? Ҡайһы бер эксперттар әйтмешләй, бөгөнгө тоторокһоҙлоҡ шарттарында тотороҡло эш хаҡтары һәм уның ыңғайға йүнәлеше хаҡында фекер йөрөтөүе - ҡатмарлы мәсьәлә. Шуға ҡарамаҫтан, киләһе йылдың ғинуарынан чиновниктарға, көс һағы һәм бюджет хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡын арттырыу ҡарала, тигән хәбәрҙәрҙең фейк булмауына бик тә ышанғы килә. Шуныһын да иҫтә тотайыҡ: ысын булһа, киләһе йыл коммуналь түләүҙәргә хаҡ артмаясаҡ, тип вәғәҙәләй икән властар. Ысын һүҙ булырмы, әллә тағы алданырбыҙмы?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## ? Һеҙҙең ғаиләлә туған телдең хәлдәре нисек?

***Рәмил МАНСУРОВ, Стәрлетамаҡ ҡалаһы "Ашҡаҙар" гәзитенең баш мөхәррире:*** Телде һаҡлау-яҡлау йәһәтенән, һис шикһеҙ, уның киләсәген ҡайғыртыу зарур. Был тәңгәлдә, әлбиттә, йәш быуынды милли мөхит шарттарында тәрбиәләү ҙур әһәмиәткә эйә. Шул уҡ ваҡытта туған телдә яҡшы үҙләштереү өҫтөнлөктәрен аңлатыу ҙа мотлаҡ балаға, сөнки донъяны танып-белеү һәм дөйөм рухи ҡиммәттәргә юл тап туған тел аша һалына. Был бигерәк тә бөгөн, рухи-әхлаҡи ҡиммәттәрҙе һаҡлау һәм шул юҫыҡта йәш быуынға илһөйәрлек тәрбиәһе биреү йүнәлештәре билдәләнгән ваҡытта мөһим. Ә бит илһөйәрлек - шул уҡ ваҡытта телһөйәрлек тә ул. Шағир Риф ағай Мифтахов яҙғанса, "Юҡҡамы ни кеше туған телен, Тыуған иле менән тиңләгән".

Башҡорт булып тыуғанһың икән, милләтебеҙ алдында бурыслыһың, тип аңлайым мин: балаларыңды башҡорт итеп тәрбиәлә! Юғиһә, кем һин? Тәрбиә эше енел булмаған кеүек, баланы милли рухта тәрбиәләүҙең, бигерәк тә ҡала шарттарында, ҡайһы бер үҙенсәлектәре бар, әлбиттә. Иң тәүҙә был баланы уратып алған мөхиткә бәйле: мәктәп, урам, мәғлүмәт киңлектәре... Ләкин бала өсөн иң йылы, унайлы, иң ҡәҙерлеһе - ғаилә мөхите. Милли тәрбиә, ватансыллыҡ, әсә теленә һөйөү тойғолары, нигеҙҙә, фәҡәт ошо мөхиттә, ғаиләлә генә тулыһынса ғәмәлгә ашырыла ала. Быны мин үҙебеҙҙең ғаилә миҫалына таянып та раҫлай алам. Ҡатыным менән өс бала үҫтерәбеҙ: Айбулат улыбыҙ менән Раушания ҡыҙыбыҙ мәктәптә уҡып йөрөйҙәр, төпсөгөбөҙ Айтуған бәләкәй әле. Күреүегеҙсә, бәләкәстәребеҙгә матур башҡорт исемдәре ҡуштыҡ, Ж.Кейекбаев исемендәге ҡала Башҡорт гимназияһына уҡырға бирҙек. Ә унан алда тәрбиә эшмәкәрлегендә милли рухты үҫтереүгә күп көс һалыусы "Толпар" балалар баҡсаһына йөрөнөләр.

Баланы тәрбиәләү шулай ҙа әсә ҡарынынан уҡ башлана, тиҙәр. Әйткәндәй, ҡатыным йөклө сағында башҡорт халыҡ йырҙарын тыңлап, шул ыңғай үҙе лә йырлап-көйләп йөрөргә ғәҙәтләнде, йөрәге аҫтындағы сабыйыбыҙ менән гел башҡортса һөйләште. Был матур йола аҙаҡ, уларҙы йоҡлатҡанда ла дауам итте. Әллә шуның тәьҫире булдымы: балаларыбыҙ гимназияла тырышып уҡыу менән бер рәттән, бейеү ансамблендә лә ихлас шөғөлләнә, музыка дәрестәренә лә өлгөрә. Ғаиләлә иһә фәҡәт башҡортса һөйләшәбеҙ. Балаларҙы башҡортса һөйләшергә өйрәтеүҙең бик һөҙөмтәле бер мәктәбе - өләсәйҙәр тәрбиәһе икәнен лә үҙ миҫалыбыҙҙа инандым. Каникулдарҙа булһынмы, улар үҙҙәре ҡунаҡҡа киләме, өләсәйҙәр менән аралашыу - балалар өсөн ҙур бәхет. Улар тасуирлаған әкиәттәрҙе, ҡойған йомаҡтарҙы, ятлатҡан шиғыр юлдарын һөйләп, йыр-көйҙәрен отоп алып, беҙгә ҡайтарып һөйләһенме, оҙаҡ ваҡыттар ҡабат-ҡабат бер-беренә бәйән итһендәрме - баланың телмәр үҫеше шулай камиллаша, донъяны танып-белеү офоҡтары киңәйә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 5 декабрҙә Александр Клебановты Башҡортостандың транспорт һәм юл хужалығы министры вазифаһына тәғәйенләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Быға тиклем Александр Клебанов министр урынбаҫары ине.

✔ Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығында Башҡортостандың ауыл ипотекаһы буйынса бирелгән кредиттар һаны буйынса беренсе урында тороуын билдәләнеләр. Йыл башынан банктар ошо программа буйынса дөйөм суммаһы яҡынса 2,1 миллиард һумлыҡ 790-дан ашыу льготалы кредит биргән. 2020 йылда программа эшләй башлағандан алып республикала йәшәүселәр программаның төп банк-операторынан ауыл ипотекаһы буйынса 9,2 миллиард һумлыҡ кредит алған.

✔ Башҡортостандың ЮХХДИ етәксеһе Владимир Севастьянов билдәләүенсә, ял көндәрендә республика юлдарында дәүләт автоинспекцияһы үҙәк аппараты хеҙмәткәрҙәренең өҫтәмә экипаждары эшләй. Федераль һәм төбәк автомобиль юлдарында экипаждарҙы көсәйтеү тураһында ҡарарҙы фажиғәләрҙе анализлағандан һуң ҡабул иткәндәр. Республиканың ҡала һәм районларында юл-патруль хеҙмәте экипаждарынан тыш, полицияның башҡа хеҙмәттәре лә йәлеп ителә.

✔ Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Булат Йомаҙилов үҙ теләге менән махсус хәрби операцияла ҡатнашырға хәл иткән. 7 декабрҙә ул яҡташтары менән бергә хәрби әҙерлек үтеү урындарына юлланды. "Бөйөк Ватан һуғышында атайым үҙе теләп фронтҡа киткән. Мин дә бөгөн ситтә тороп ҡала алмайым. Был минең конституцион бурысым. Мин - запастағы офицер, өлкән лейтенант һәм алғы һыҙыҡта булырға тейешмен", - тине Булат Йомаҙилов.

✔ Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә ҡала һәм район хакимиәттәре башлыҡтарына мәктәптәрҙә түкланыуҙы ойоштороуҙы тикшерергә ҡушыуын хәтергә төшөрҙө. Радий Хәбиров Роспотребнадзор идаралығын да ошо эшкә ҡушылыуын һораны. Үҙенең хакимиәтенә ул был процесты контролдә тоторға һәм бер-ике аҙна эсендә тикшереүҙе тамамларға ҡушты.

✓ *Үткән аҙнала "Инцидент менеджмент" системаһына һаулыҡ һаҡлау темаһына бик күп ялыуҙар килгән. "Табиптар етешмәй, белгестәрҙең сирләгән осраҡтары бар. Шуға уларға ваҡытлыса яҙылып булмай", - тине Черенков.*



ҠЫҪҠАСА

# ҺАЛҠЫН БУЛҺА...

**Башҡортостандың мәғариф министры Айбулат Хажин үҙенең ТГ-каналында коллегаларына, уҡыусыларға һәм уларҙың ата-әсәләренә мөрәжәғәт итте.** "Синоптиктар фаразы буйынса, республикала алдағы көндәрҙә һыуыҡ була. Уҡыусыларҙың, айырыуса башланғыс класта уҡығандарҙың ата-әсәләренә һауа температураһына иғтибар итергә кәрәк. 23 градус һалҡында - ауылда, 25 градуста ҡалала башланғыс класс уҡыусылары дәрес ҡалдыра ала. Һауа температураһы 25 градустан түбәнәйһә - ауылда, 27 градус һыуыҡта ҡалала 5-9 класс уҡыусылары өсөн дәрестәр булмай. Ауыл мәктәптәренең өлкән класс уҡыусыларына - 30, ҡаланыҡыларға иһә 32 градус һыуыҡта мәктәпкә бармаҫҡа мөмкин. Министр әйтеүенсә, кабинеттарҙа һауа температураһы санитар нормалар буйынса 18 градустан түбән булмаҫҡа тейеш.

✓ **Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәрендә балалар тауарҙарының сифаты, хәүефһеҙлеге һәм Яңы йыл бүләктәрен һайлау мәсьәләләре буйынса ҡыҙыу бәйләнеш асыла.** 5-16 декабрҙә Роспотребнадзор белгестәренән балалар тауарҙары, шул иҫәптән кейем-һалым, аяҡ кейеме, уйынсыҡтар, балалар ризыҕы, китап продукцияһының сифатына һәм хәүефһеҙлегенә ҡағылышлы һорауҙарға яуаптар, карнавал костюмдарын һәм татлы яңы йыл бүләктәрен һайлау буйынса кәңәштәр алырға мөмкин. Граждандарға тематик консультациялар Роспотребнадзорҙың Берҙәм консультация үҙәге (8 800 555 49 43), Рәсәй Федерацияһы төбәктәре буйынса Роспотребнадзор идаралығының ҡыҙыу бәйләнеш телефондары, шулай уҡ Гигиена һәм эпидемиология үҙәктәре ҡарамағындағы ҡулланыусылар өсөн консультация үҙәктәрендә (пункттарында) үткәрелә.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар, шулай уҡ уларҙың ғаилә ағзалары өсөн йорттарға газ үткәргән ойошмаларҙың сығымдарын өлөшләтә компенсациялауға сертификаттар менән тәьмин итеү тураһында указға ҡул ҡуйҙы.** Шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына һәм хәрби хәрәкәттәр инвалидтарына, Рәсәй Федерацияһының Башҡортостан Республикаһы буйынса милли гвардияһы яугирҙарына, йән башына уртаса килеме йәшәү минимумынан кәмерәк булған һәм һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар тәрбиәләгән ғаиләләргә, ошо уҡ категорияға ҡараған инвалидтарға һәм күп балалы ғаиләләргә газ үткәреү өсөн сығымдарын бер өлөшө кире ҡайтарыла.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Өфө предприятиеһында тегелгән мәктәп формаһын күрһәтте.** "Был мәктәп формаһын Өфөнөң "Оптри" фабрикаһында тегәләр. Форманы Силәбе һәм Һарытау өлкәләрендә, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта һәм башҡа төбәктәрҙә һата башланылар. Нисек кенә сәйер булмаһын, Башҡортостан етештереүселәренә һатыу географияһын киңәйтергә санкциялар ярҙам итте. Баҙарҙа сит ил брендтары юҡ, Өфө фабрикаһы улар өсөн лайыҡлы алмаш булып тора", - тип хәбәр итте республика етәксеһе. Әлеге көндә предприятие тәүлегенә меңдән алып өс меңгә тиклем төрлө әйберҙәр тегә - пандемияға тиклемгегә осорҙан дүрттән бер өлөшкә күберәк. Фабриканың директоры - Зөлфирә Ғәзизова, уның шәхси предприятиеһы - "Башҡортостан аҙыҡ-түлеге" проекты дипломанты.

КӨНАУАЗ

# ТАРИХИ ҠОМАРТҠЫЛАР...

## бер урынға туплана



**Өфөлә Башҡортостандың күренекле ғалимы, БР Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы Нияз Мәжитов иҫтәлегенә арналған "Урта быуат Евразияһының күсмә цивилизациялары" халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияһы булып үтте.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2022 йылдың 9 июлендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Шүлгән-Таш" тарихи-мәҙәни комплексын асыу тантанаһында Евразия күсмә цивилизациялар музейы концепцияһын тәҡдим итте. Яңы объект бер нисә төп тарихи ҡомартҡыны берләштерә. Улар араһында Турахан һәм Хөсәйенбәк кәшәнәләре лә бар. Башҡортостан Башлығы бойороғона ярашлы, Евразия күсмә цивилизациялар музейын булдырыу буйынса эшсе төркөм ойошторолა. 30 августа Шишмә районында Радий Хәбиров тәүге күсмә кәңәшмә үткәрҙе. 18 октябрҙә эшсе төркөм ултырышында Башҡортостан Башлығы Евразия күсмә цивилизациялар музейы төрлө тармаҡ проекттарының үҫешү нөктәһенә әйләнеүен билдәләне.

"Был күләмле объект республика мәнфәғәтенә яуап бирергә һәм бик күп ҡунаҡтарҙы - туристарҙы, ғалимдарҙы, рәссамдарҙы һәм мәҙәниәт эшмәкәрҙәрен, спортсыларҙы һәм ғаиләләрҙе, халыҡты йәлеп итергә тейеш, - тине Радий Хәбиров. - Уны тормошҡа ашырыу өсөн көнүҙәк мәсьәләләрҙе хәл итеү мөһим. Объекттар урынлаштырылған карта-схема әҙерләргә кәрәк". Башҡортостан Башлығы шулай уҡ биләмәнең транспорт менән тәьмин ителешен асыҡларға, шулай уҡ юл буйындағы хеҙмәтте үҫтереү өсөн шарттар әҙерләргә ҡушты.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТАҒЫ БЕР ЯРҘАМ



**Башҡортостан Башлығы мобилизацияланғандарға, уларҙың ҡатындарына, балиғ булмаған балаларына, шулай уҡ колледждарҙа һәм юғары уҡыу йорттарында көндөҙгө бүлектә уҡып йөрөгән балаларына (23 йәшкә тиклем) бер тапҡыр биреләә торған 20 мең һум тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Был хаҡта Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә белдерҙе.**

"Бына бер нисә ай инде мобилизацияланған егеттәребеҙ сит ерҙә. Улар Яңы йыл байрамдарын ғаиләһенән алыҫта билдәләргә мәжбүр. Бының өсөн бюджетҡа аҡса һалдыҡ. Беҙҙең Яңы йылға бүләк илебеҙҙе яҡлаусыларға ярҙам булыр һәм уларҙың ғаиләләрен ҡыуандырыр тип ышанам. Аҡса күсереүҙең һуңғы көнө - 26 декабрь", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Мобилизацияланғандарға бер тапҡыр биреләә торған түләү уларҙың аҡсалата тәьминәт алыу өсөн асылған банк иҫәптәренә күсерелә. Ғаиләләргә аҡса мөмкин тиклем ябайлаштырылған тәртиптә биреләә: уларға социаль яҡлау органдары йәки күп функцияһы үҙәктәр, йә иһә республика дәүләт хеҙмәттәре порталы аша ғариза бирергә кәрәк.

# ТАБИПҠА ЭЛӘГЕП БУЛМАЙМЫ?



**Башҡортостанда йәшәүселәр табиптарға яҙыла алмай. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығының социаль коммуникациялар идаралығы етәксеһе урынбаҫары Дмитрий Черенков белдерҙе.**

Уның һүҙҙәренсә, үткән аҙнала "Инцидент менеджмент" системаһына һаулыҡ һаҡлау темаһына бик күп ялыуҙар килгән. "Табиптар етешмәй, белгестәрҙең сирләгән осраҡтары бар. Шуға уларға ваҡытлыса яҙылып булмай", - тине Черенков. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, бер аҙна элек уҙған оператив кәңәшмәлә лә был мәсьәлә күтәрелгәйне. Ул саҡта Радий Хәбиров үҙенең хакимиәте етәксеһе Максим Забелинға, һаулыҡ һаҡлау министрлығына, Өфө мэрияһына халыҡ менән осрашырға һәм уларҙың ялыуҙарын тыңларға ҡушты. Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин Башҡортостан Башлығының ҡушыуы буйынса уҙған йоманан комиссияларҙың районларға сыға башлауҙары тураһында отчет бирҙе. Уның һүҙҙәренсә, ҡайһы бер медицина учреждениеларында мәсьәләне кадрҙарҙы алмаштырыу ярҙамында ғына хәл итергә мөмкин.

# КҮҘӘТӘЛӘР



**Өфөнөң ҡайһы бер районларында 2023 йылда видеокүҙәтеү камераларын аша кешеләрҙе таныу өсөн биометрик система индереү күҙаллана.**

Был турала 1 декабрҙә Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығында үткән матбуғат конференцияһында Һаҡлыҡ банкының республика бүлексәһе идараһы Азамат Сәлихов хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, ғәмәлдәге видеокүҙәтеү камераларын файҙаланыу күҙаллана. "Әлегә һынау тураһында һүҙ алып барабыҙ. Яһалма интеллект нигеҙендә ул эҙләү буйынса мәғлүмәттәр базаһында булған кешеләрҙе табасаҡ. Эске эштәр министрлығы Хөкүмәте. Билдәләнеүенсә, төбәктәр араһындағы сиктең оҙонлоғо үҙгәрмәгән - 498 саҡрым тәшкил иткән. "Сиктәрҙең аныҡ координаталарын билдәләү территориаль һәм ер бәхәстәрен кәметергә мөмкинлек бирергә һәм ер ресурстары менән һөҙөмтәлерәк идара итергә булышлыҡ итергә тейеш", - тине Росреестрҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе Петр Клец. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостандың 29 муниципалитеты Татарстан менән сиктәш.

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓4 декабрҙә баш ҡала "Хоҡуҡтың гуманитар миссияһы - хәҙерге ваҡытҡа йүнәлеш" VIII Бөтә Рәсәй юридик форумын ҡабул итте. Ул Юрист көнөнә һәм Башҡортостанда Рәсәйҙең Юристар ассоциацияһы филиалының 15 йыллығына арнала. Шулай уҡ форум сиктәрендә Цюрупа урамында билдәле Өфө хоҡуҡсыһы, суд эшмәкәре Петр Россинскийға бюст асылды. Сара "Йыл юрисы" юридик премияһын тапшырыу менән тамамланды.

✓7 декабрҙә баш ҡаланың тимер юл вокзалына Ҡыш бабай поезы килде. Состав урындағы ваҡыт менән көндөҙ 2 тула 5 минутта килеп, кисен 9-сы 5 минутта китте. Поезд пассажирҙары - Бөйөк Устюгтан Бөтә Рәсәй Ҡыш Бабайы, Костроманан Ҡарһылыу һәм уларҙың әкиәти командаһы. Ҡыш Бабай поезына инеү кассала һатылған шәхси билеттары буйынса тормошҡа ашырыла. Состав Бөйөк Устюгтан 22 октябрҙә юлға сыҡҡан һәм юлда 85 көн булып, сәйәхәтен Владивостокта тамамлай.

✓Өфөлә тәүлек дауамында урам-юл селтәрен таҙартыуға 500 берәмек коммуналь техника һәм 550 юл эшсеһе йәлеп ителә. Бигерәк тә юлдарҙы, тротуарҙарҙы, шулай уҡ йәмәғәт транспорты туҡталышын таҙартыуға ҙур иғтибар биреләә. Көн һайын юлдар боҙлауыҡҡа ҡаршы эшкәртелә, 5600 тонна реагент ҡулланылған да инде. Парковка урындарын һәм башҡа участкаларҙы таҙартыуҙы оптималләштереү өсөн таҡ һәм йоп һанлы көндәрҙә "Туҡтау тыйылған" тигән юл билдәһе урынлаштырыла.

✓Башҡортостан менән Татарстан араһындағы административ сик Берҙәм күсемһеҙ милек дәүләт реестрына индерелде, тип хәбәр итә республика Хөкүмәте. Билдәләнеүенсә, төбәктәр араһындағы сиктең оҙонлоғо үҙгәрмәгән - 498 саҡрым тәшкил иткән. "Сиктәрҙең аныҡ координаталарын билдәләү территориаль һәм ер бәхәстәрен кәметергә мөмкинлек бирергә һәм ер ресурстары менән һөҙөмтәлерәк идара итергә булышлыҡ итергә тейеш", - тине Росреестрҙың Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе Петр Клец. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостандың 29 муниципалитеты Татарстан менән сиктәш.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *"Шүлгәнташ мәмерйәһен кешелек цивилизацияһы барлыҡҡа килеү үҙәге тип иҫәпләйбеҙ. Тап шуның өсөн дә был мәмерйә менән башҡорттарҙың "Аҡбуҙат", "Урал батыр" һәм башҡа боронғо легендалары бәйләнгән."*



Өфөлә әле үткән халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция - Евразия күсмә цивилизациялар музейын булдырыу буйынса фәнни эштең бер этабы.

Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев үҙ сығышында республиканың Рәсәй археологияһы үҙәктәренең береһе булараҡ, үҙ позицияһын йылдан-йыл нығытыуын билдәләне. Төбәктә билдәле археологик мәктәп, уның фәнни традициялары һәм ҙур ҡаҙаныштары бар. Республика тарих фәндәре докторы, профессор Раил Кузеев төҙөгән Археология һәм этнография музейы менән ғорурлана. Унда боронғо коллекциялар, шул иҫәптән легендар "сармат алтыны" һаҡлана.

- Профессор Нияз Мәжитов оҙаҡ йыллар Өфө-2 боронғо ҡаласыҡты фәнни тикшереүҙәрҙең башланғысында торҙо. Унда табылған әйберҙәр, ғалимдар фекеренсә, беҙҙең эраның IV-XIV быуаттарына ҡарай. Йыл ярымдан 450 йыллыҡ юбилейын билдәләйәсәк бөгөнгө Өфөнөң тарихи өлөшө ошо боронғо ҡасаба өҫтөндә урынлашҡан. Киләсәк быуын баш ҡалабыҙ тарихын белһен өсөн бында асыҡ һауала музей булдырасаҡбыҙ. Өфө-2 ҡаласығы тораҡ пункты - ғәжәйеп ҡомартҡы! Мәжитов әйтеүенсә, беҙҙең эраның I мең йыллыҡ аҙағында Көньяҡ Уралда мәҙәни, сауҙа һәм һөнәрселек үҙәктәре булған ҡалалар, шулай уҡ хәҙерге Өфө урынында Имәнҡала - Башҡорт ҡалаһы булған. Был Көнсығыш Европаның иртә Урта быуаттарҙан һуңғы осорға тиклемге иң бөйөк ҡомартҡыһы, унда Алтын Урҙа ҡомартҡылары бар, - тип билдәләне Урал Таһир улы һәм дауам итте:

- Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бөгөн тарихи фән йыш ҡына сәйәси уйындар хаҡына боҙола, әммә үткәндәр илдәр менән халыҡтар араһында ҡапма-ҡаршылыҡ ҡоралына әйләнергә тейеш түгел. Беҙ Евразия территорияһында йәшәгән ата-бабаларыбыҙҙың быуаттар буйы йәшәгән йолалары буйынса тәрбиәләнгәнбеҙ. Уртаҡ тамырҙарыбыҙ, уртаҡ мираҫыбыҙ бар. Беҙҙең телдәр, мәҙәниәт, тормош ҡиммәттәре, йолалар һәм ғөрөф-ғәҙәттәр бик яҡын. Рәсәй Президенты Владимир Владимирович Путиндың Рәсәй халыҡтарының традицион рухи һәм әхлаҡи ҡиммәттәрен һаҡлау һәм нығытыу буйынса дәүләт сәйәсәте нигеҙҙәрен раҫлаған указы бик ваҡытлы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алырға теләйем...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Быйыл йәй Бөрйән районында, Башҡортостандың иң матур урындарының береһендә асылған "Шүлгән-Таш" тарихи-мәҙәни музей комплексын асҡанда республика Башлығы Радий Хәбиров: "Шүлгәнташ мәмерйәһе бик үҙенсәлекле. Уны кешелек цивилизацияһы барлыҡҡа килеү үҙәге тип иҫәпләйбеҙ. Тап шуның өсөн дә был мәмерйә менән башҡорттарҙың "Аҡбуҙат", "Урал батыр" һәм башҡа боронғо легендалары бәйләнгән.**

**1959 йылда бындағы картиналар галереяһын Александр Владимирович Рюмин асҡан. Ул быны осраҡлы эшләмәй, сөнки бында кешелек цивилизацияһы үҙәге барлығын яҡшы белгән. Беҙҙең музей тарихи-мәҙәни генә түгел, фәнни үҙәк тә булыуына ышанабыҙ. Бында Рәсәй һәм сит илдәрҙең ғилми-мәғариф учреждениелары делегациялары киләсәк", - тигәйне. Бөгөн, ысынлап та, "Шүлгән-Таш" комплексы бөтә донъя тарихсыларын, палеонтологтарын йәлеп итеү урынына, йәштәребеҙ өсөн фәнни-мәғрифәт үҙәгенә әйләнеп бара. Өфөлә үткән әлеге халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция ҡунаҡтары ла быны һыҙыҡ өҫтөнә алып үтте.**

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

лығы менән үҙ-ара эш итеүҙең билдәле бер схемаһы бар, шуның буйынса мәғлүмәттәр хоҡуҡ һаҡлаусыларға тапшырыласаҡ", - тине Азамат Сәлихов. Яңы система кешенең йәҙән генә түгел, атлап йөрөшөн дә асыҡлаясаҡ. Был енәйәтселәр битлек кейгән осраҡтарҙа ярҙам итергә тейеш.

## БАЛА ҠАРАУСЫ...



**Башҡортостанда "социаль бала ҡараусы" хеҙмәте эшләй башланы. Ул өйҙә 3 йәшкә тиклемге баланы йәки һаулығы сикләнгән 18 йәшкәсә баланы өйҙә ҡарауға ҡайтып ҡала.**

"Социаль бала ҡараусы" аҙнаһына 2 тапҡыр килергә мөмкин, һәр сеанс ваҡыты 3 сәғәт 15 минут тәшкил итә. Был хеҙмәт бигерәк тә балаларын яңғыҙ тәрбиәләгән әсәләр өсөн ҡулай буласаҡ, тип билдәләнә һәм уларға баланы бер нисә сәғәткә генә ҡалдырып дауаханаға йәки башҡа урынға барып килергә, ниндәйҙер документтар теүәлләп йөрөгәндә һәм башҡа ошондай мөһим эштәрҙә атҡарып сығырға булышлыҡ итәсәк. Хеҙмәт хаҡында тулыраҡ мәғлүмәтте "Ғаилә" үҙәктәренән 8-800-347-5000 телефоны аша йәки Башҡортостан халыҡты социаль хеҙмәтләндереү үҙәгенең рәсми сайтында белергә була.

## АЛДАНМАҒЫҘ!



**Рәсәйҙә яңы төр иктисади мутлашыу енәйәте тарала.**

Рәсәйҙең Үҙәк банкы белдереүенсә, мутлашыусылар телефондан шылтыратып, үҙҙәрен полиция хеҙмәткәре итеп танытып, кешенең шәхси мәғлүмәттәре ситтәргә таралыу ҡурҡынысы барлығын белдерә һәм тикшереү алып барыуға һылтанып, банк картаһы тураһында мәғлүмәт һорай. Кешене ышандырыу өсөн улар хатта телефонға йәки шәхси почтаға оператив-эҙләү саралары алып барылыуы тураһындағы ялған документтар ебәрергә лә мөмкин. "Банк һәм полиция хеҙмәткәрҙәре бер ҡасан да карталағы мәғлүмәтте һорамай, айырыуса уның өс һандан торған коды тураһында бер кемгә лә мәғлүмәт бирмәгеҙ. Шулай уҡ был ойошмалар бер ваҡытта ла шәхси почтаға йәки башҡа төрлө мессенджерҙарға үҙҙәренең таныҡлығын һәм башҡа төрлө документтарҙы ебәрмәй", - тип белдерә Рәсәй Үҙәк банкы белгестәре.

## БАЙРАМ БЕҘҘӘ!



**"Мега. Өфө" сауҙа үҙәге майҙансығында 14 декабрҙә 18.00 сәғәттән 21.00 сәғәткә тиклем Башҡорт теле көнөнә бағышланған концерт була. Сауҙа-күңел асыу үҙәге бер нисә сәғәткә ҙур башҡорт әлифбаһына әүерелә, популяр артистар һәм музыканттар ҡатнаша.**

Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы хәбәр итеүенсә, программала Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы артистары Азамат Тимеров, Римма Амангилдина, Сәйҙә Ильясова, Әлиә Искужина, Артур Шәрипов, Дамир Таипов, "Тамыр" студияһы, Гөлшат Ғирфанова, Айтуған Айытколов, Ришат Рәхимов, "ФЭСТА" төркөмө һәм башҡалар ҡатнаша. Өс сәғәтлек концерт программаһында бүләктәр уйнатыу һәм интерактивтар, "Алтын башҡорт яугирҙары" менән фотосессия, Башҡортостандың халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестрының, "Зәйнетдин" этно-проектының, "Бишбармаҡ" оркестрының һәм башҡаларҙың сығышы ҡаралған.

*ҠЫҪҠАСА*

# ЯҢЫ ЙЫЛДЫ ҠАРШЫЛАП...

**Яңы йылға әҙерлек сиктәрендә баш ҡаланы байрамса биҙәү һәм боҙ ҡаласыҡтары эшләү буйынса эштәр дауам итә.** Быйыл ике урында - Ленин майҙанында һәм Салауат Юлаев исемендәге майҙанда шыршы һәм 16 урында район боҙ ҡаласыҡтары, йорт ихаталарында 123 майҙансыҡ эшләү планлаштырыла. Бынан тыш, Өфөлә 90 хоккей ҡумтаһы һәм 30 һырғалаҡ эшләнәсәк. Яңы йыл боҙ ҡаласыҡтарына килеүселәрҙең нигеҙҙә мәктәпкәсә йәштәге балалар һәм башланғыс синыфы уҡыусылары булыуын иҫтә тотоп, элементтарҙың йәрәхәтләү хәүефенә иғтибар бирелә, тауҙан шыуыу ҡағиҙәләре урынлаштырыла. Шулай уҡ рөхсәт ителмәгән урындарҙа тау шыуыуҙы тыйыу буйынса ла саралар күрелә.

✔ **Өфөлә иң ҙур һырғалаҡ Ағиҙел йылғаһы яры буйында буласаҡ. Уның оҙонлоғо 800 метр. Һырғалаҡты асыу 25 декабргә планлаштырылған.** Шунда уҡ сисенеп-кейенеү өсөн ике йылы бүлмә эшләйәсәк, конькиҙарҙы прокатка биреү ойоштоform.

✔ **Юғары уҡыу йорттары һәм һөнәрселек училищелары студенттарына Өфө мэры стипендияларын тапшырылды.** Һөнәри училищеларҙа һәм юғары уҡыу йорттарында уҡып йөрөгән етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар аҡсалата гранттар һәм ҡиммәтле бүләктәр алды. Исемле стипендия уҡыу йылы дауамында ай һайын түләнә, тип хәбәр итә Өфө мэрияһының матбуғат хеҙмәте. Стипендия 2014 йылдан уҡыу, ғилми-тикшеренеү, ижади, физкультура-спорт һәм йәмәғәт эшмәкәрлегендәге ҡаҙаныштар өсөн тапшырыла. Быйыл комиссия 25 дәғүәсенең документтарын ҡараны. Өсәүһе стипендиялар алды, 22 балаға конкурста дәғүә итеүселәр сертификаттары һәм иҫтәлекле бүләктәр тапшырылды.

✔ **Өфө ҡала хакимиәтендә Калинин районындағы ҡар иретеү пунктына ҡар ҡабул итеү һәм уны эшкәртеүҙең яңы тарифы раҫланды.** 2022-2023 миҙгелдә бер кубометр ҡар иретеү 191.20 һумға барып баҫа. Был пункт яуым-төшөм күләмен эшкәртеп өлгөрмәгәнлектән, Сәғит Ағиш урамында тағы бер пункт төҙөү планлаштырыла. Әлеге ваҡытта Калинин районындағы ҡар иретеү пунктының ҡеүәте тәүлегенә 1500 кубометр, әммә көслө яуым-төшөм ваҡытында ҡеүәтен 2500 кубометрға тиклем арттырыу мөмкинлеге бар. Өфө ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, һуңғы тәүлектәрҙә генә ҡала урамдарынан 10 мең кубометрҙан ашыу ҡар сығарылған.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Яран гөлө

❖ Ҡыҙыл яран гөлөнөң бер ус тирәһе япрағын ҡырлы стакандың өҫтән бер өлөшө тулырлыҡ итеп һалып, мөлдөрәмә тултырғансы эҫе һыу ҡойорға һәм сепрәк менән ябып йылы урында 1 сәғәт тотмаҡ. Шунан ике ҡат марля аша һөҙөргә лә, бер стакан төнәтмәне өскә бүлеп, ашарҙан алда эсергә. Ул таштарҙы ваҡларға һәм организмдан сығарырға ярҙам итә.

### Йөтәл

❖ Балаларҙы дауалағанда торманы дүрткелләп ҡырҡып кәстрүлгә һалырға, шәкәр һиберге һәм 2 сәғәт тирәһе духовкала бешерергә. Килеп сыҡҡан шыйыҡсаны һөҙөп алырға һәм көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан һәм йоҡларҙан алда 2-шәр балғалаҡ эсерергә.

❖ Ярты килограмм таҙартылған һәм ваҡлап туралған һуғанға 50 грамм бал һәм 400 грамм шәкәр ҡомо ҡушып, 1 литр һыу өҫтәргә һәм талғын утта 3 сәғәт ҡайнатырға. Ҡаты йөтәлләгән осраҡта көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ашарға.

❖ Эмалле кәстрүлгә 1 стакан һөт ҡойорға һәм 1 ҡалаҡ шалфей һалырға. Кәстрүлде тәрилкә (металл булмаһын) менән ҡаплап ҡайнатырға, һөҙөргә. Шунан тағы бер тапҡыр ҡайнатып алырға. Был дауаны йоҡлар алдынан ҡайнар килеш эсергә кәрәк.

### Грипп

❖ Грипп менән ауырыусылар менән күрешкәндә йәки ауырыҡһынып торған кеүек булһағыҙ, ҡурай еләге (малина) һабаҡтарынан сәй яҡшы ярҙам итә. Ярты литр банкаға өйәмәкәй 1 ҡалаҡ ҡурай еләге һабағы һалып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм ауыҙын ҡапҡас менән ныҡлап ябырға. Банканы йылыға төрөп 30 минут тоторға. Шунан төнәтмәне икенсе быяла һауытҡа һөҙөп алырға, 1 баш лимон һутын һығып ҡушырға һәм иҙелгән ике бүлкә һарымһаҡ өҫтәргә. Диабет булмаған осраҡта дауаны 1 балғалаҡ бал менән тәмләндерергә мөмкин. Был төнәтмәне төнгөләккә, йоҡларға ятырҙан алда эсергә кәрәк. Кәмендә өс көн шулай дауаланыу файҙалы. Ҡурай еләге һабаҡтарын көҙгөнән алып өлгөрмәгәҫ, әле лә һуң түгел.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

## Яға

Күренекле этнограф С.Н. Шитова билдәләүенсә, Учалы районының төньяғы, Силәбе һәм Ҡурған өлкәләре өсөн хас булған яғаға түбәндәге үҙенсәлектәр хас: формаһы трапецияға яҡын, мәрйен селтәр, уртала тәңкәләр тегелгән 5-7 бау, тәңкәләр өҫтөнлөк итә [22, с. 105]. Быларҙың барыһы ла авторҙың китабында бирелгән фотола асыҡ күренә.



Учалы районында йәшәүсе башҡорттарҙа ҡатын-ҡыҙҙарҙың түшкә тағып йөрөгән биҙәүесен "яға" тип атап йөрөтөү ҡабул ителгән. Музей фондтары һәм шәхси коллекцияларҙан күренеүенсә, Учалы ерендә яғаның бер нисә төрө таралған. Районды төньяғында урынлашҡан ауылдарға формаһы һәм төҙөлөшө йәһәтенән бер-береһенә оҡшаған бер типтағы үҙенсәлекле яғалар хас. Сәфәр ауылынан алынған биҙәүес шуның бер матур өлгөһө булып тора.



Әйтергә кәрәк, был яға махсус тикшереү үткән һәм уның һөҙөмтәләре буйынса шуларҙы әйтергә мөмкин: оҙонлоғо - 38,5 см; өҫкө киңлеге - 18 см; аҫҡы киңлеге - 29 см; ауырлығы - 1199,5 г., яғала барлығы 312 тимер элемент бар. Шуларҙың илле өсө - көмөш аҡсалар. Иң боронғо тәңкә 1860 йылға ҡарай. Польша, Австрия, Румыния аҡсалары бар. Был биҙәүестә тояҡтар юҡ икәнлеге күренә.

Шул ауылдағы икенсе бер яға иһә, тояҡлы итеп эшләнгән. Быныһы буйынса ла махсус тикшереү үткәрелгән. Уның тураһында шулар билдәле: оҙонлоғо - 44 см; өҫкө киңлеге - 20 см; аҫҡы киңлеге - 29 см; ауырлығы билдәләнмәгән. Яғала барлығы 278 элемент бар. Шуларҙың йөҙҙә илле етеһе көмөш аҡсалар. Иң боронғоho - 1849 йылғы 5 тинлек көмөш. Ҡытай, Польша, Румыния аҡсалары бар. Аҫҡы ике мөйөшөнә мәрүәт һиҙәптәр тегелгән. Бер ауылдың ике яғаһын сағыштырып ҡарағанда, улар араһында оҡшаш та, айырмалы ла яҡтар бар икәнлеге күҙгә салына. Икенсеһе көмөш тәңкәләр һаны йәһәтенән һиҙелерлек айырылып тора.



**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# БАШҠОРТ ҠАЛАҺЫ...

## 1375 йылғы донъя картаһында

**(Башы 1-се биттә).**

Республика өсөн был атластың әһәмиәте нимәлә? Александр Юрченко әйтеүенсә, ул - Башҡортостан тарихы өсөн уникаль документ.

**- Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғалары ҡушылған ерҙә ҡала торған. Картограф Авраам Крескес башҡорттарҙың илен түгел, ә тап Pascherti (Башҡорт) ҡалаһын күрһәткән. Карталағы башҡа ҡалалар ҙа шундай уҡ билдә менән билдәләнгән. Сағыштырыу өсөн: өлкәләр башҡа шрифт һәм икенсе төҫ менән бирелгән. Алтын Урҙа ҡалалары тураһындағы мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгө шик тыуҙырмай, сөнки карта Италияның Урҙалағы һәм тотош ҡитғалағы аныҡ хәл-торош менән ҡыҙыҡһынған финанс һәм сәйәси элита вәкилдәре өсөн эшләнгән. Ҡырымдағы Каффа Генуя сауҙа факторияһынан Ҡытайға ҡоро ер сауҙа юлы башлана. Ул байлыҡҡа юл була, - тип билдәләй тарихсы һәм Ҡытай менән сауҙа әйләнешенең барыбер иген, ҡиммәтле тире һәм күн килгән Алтын Урҙа менән сауҙа әйләнешенән ҡайтыш булыуын билдәләй. Бында тап донъя баҙарына Болғар-Югра тире сауҙа юлы тураһында һүҙ бара. Был юлдың бер пункты тап Башҡорт ҡалаһы була ла инде.**



Атласта "көнсығыш ҡала" билдәһе менән күрһәтелгән Pascherti аныҡ объект булған. Уның тураһында мәғлүмәттәрҙе картограф йәшерен коммерция архивтары мәғлүмәттәренә эйә атласты эшләүгә заказ биреүселәрҙән алған. Беренсел сығанаҡ булып Юграға тире һатыусы сауҙагәрҙәрҙең телдән һөйләгән хәбәрҙәре тора. Уларҙың мәғлүмәте ҡайтанан тикшерелеп, картографик формала бирелә. Сауҙа маршрутын ентекләп тикшереү көнсығыш сауҙагәрҙәренең һөйләгәненән күпкә өҫтөнөрәк икәнлеген күрһәтә. XIV быуатта ҡиммәтле тире, шулай уҡ көмөш һәм ҡиммәтле металдарҙан эшләнгән сит ил һауыттары менән һатыу итеү урта быуат рус сығанаҡтарында ышаныслы теркәлгән. Был йәһәттән Башҡорт ҡалаһын тиреләрҙе көмөшкә алмаштырыу зонаһы итеп ҡарарға мөмкин. Алтын Урҙала Генуя һәм Венеция вәкилдәренең сауҙа факториялары Ҡырымда һәм Донда була, - ти тарихсы.

Һүрәт итеп төшөрөлгән һәм насар сифатлы, пропорциялары боҙолған донъя картаһы 2018 йылда I Мәжитов уҡыуҙарында күрһәтелә. Шул уҡ атлас "Древняя Уфа: город, затерянный во времени" фильмына ла эләгә. Александр Юрченко әйтеүенсә, тарихи предметты төп нөсхәне ҡабатлаған вариантта күрергә кәрәк.

**- Мин махсус рәүештә ике көн Өфөлә ҡалып, лекция уҡыясаҡмын, карта буйынса семинар үткәрәсәкмен. Әммә тарих менән ҡыҙыҡһынған Башҡортостан студенттарының күҙҙәре янамы? Әлбиттә, юҡ. Бер кем дә күрмәгән предметҡа ҡыҙыҡһыныу нисек тыуһын? Карта буйынса сәйәхәт итеү өсөн навигатор кәрәк. Монголияла Сыңғыҙхандың музейында эшләп, йәш тикшеренеүселәрҙең яңы идеялар өсөн асыҡ булыуын күрҙем. Семинарҙарҙа беҙ, яҙма сығанаҡтарҙы йәлеп итеп, ошо картаның серҙәре буйынса фекер алышабыҙ. Ауыр тарихи сығанаҡтар менән эш итеү өсөн ҡыҙыҡһыныу тап шулай тыуа. Был бик яҡшы. Өфөләге конференцияла мин өс тапҡыр булдым. Шундай фекер ҡалды: был картаны өйрәнеүҙең мөһимлеген таныған ғилми мөхит юҡ. Карта коллектив аңда урын алмаған, - ти тарихсы, сөнки ул Нияз Мәжитов иҫтәлегенә арналған беренсе конференциянан һуң ошо документ буйынса эш башланыр тип уйлаған.**

Александр Юрченко һүҙҙәренсә, Башҡортостан тарихсыларының иғтибарын талап иткән башҡа сығанаҡтар ҙа бар. Мәҫәлән, урта быуат карталары мотивтары буйынса эшләнгән XIV быуат испан трактаты. Уның авторы Каталон картаһын төҙөүсенең замандашы. Трактатта флагы, гербы булған 50 ил тураһында мәғлүмәт бар. Хеҙмәт иҫке испан телендә яҙылған.

- Башҡорт ҡалаһы донъя сауҙа коммуникацияһы системаһына ингән. Ҡаланың атамаһы, Алтын Урҙа гербы төшөрөлгән флагы бар. Карталағы был билдә тикшеренеүсегә тотош бер донъяға инеү мөмкинлеге бирә. Картограф ҡулында атласта күрһәтелгән барлыҡ ҡалалар тураһында сәйәси һәм коммерция мәғлүмәте тупланған досье була. Испан трактатында Башҡорт ҡалаһы һәм Юграға сауҙа юлы тураһында өҫтәмә мәғлүмәт булыуы ла ихтимал. Тикшерергә кәрәк. Яҙма сығанаҡтарҙың ҡытлығын иҫәпкә алғанда, был Башҡортостан тарихы өсөн уникаль әйбер, - ти тикшеренеүсе һәм донъя картаһын мотлаҡ килтерәсәген, шулай уҡ оригинал файлдарын нисек алырға өйрәтәсәген белдерә. Был осраҡта унан факсмиле эшләп, ошо картаға нигеҙләнеп, Европа күсмә цивилизациялар музейы сиктәрендә композиция эшләргә мөмкин буласаҡ, ти ул.

**Айгөл ШӘРӘФЕТДИНОВА.**

*ЯҢЫ РУБРИКА: "МИНЕҢ ҠОМАРТҠЫМ"*

# ҠОТ ҺӘМ БӘРӘКӘТ...

## ошо биҙәүестәрҙә

**Өләсәйем һикһәнде уҙғас, ныҡышып, һоро "бөлөштән" кәзәкей тектерҙе. Аптыраным, олоғайғас нимәгә инде уға кәзәкей, тинем. Кәзәкейен кейеп йөрөй алманы, мәрхүмә булды. Хәҙер генә аңланым, уға күңел йылыһы, боронғолар васыятын үтәү, мираҫтарын тергеҙеү кәрәк булған икән.**



Бынан бер нисә йыл элек, әсәйем менән атайым һау саҡтарында, ҡайтып инһәм, икәүләшеп сулпыларҙы сүкеп, йәтешләп яңыртып ултыралар. Уларҙың ятҡан кәсебе һәм көн үткәргес шөғөлө миңә сәйер тойола торғайны. Күптәрҙең, әсәйемдең әйбере, тип ҡәҙерләп, илай яҙып хәтирәләр һөйләгәндәрен дә ишетергә тура килде. Ҡомартҡы әйберҙәрҙә йәшәү көсө, йәме тупланып һаҡланғанын хәҙер генә аңланым. Улар нурға мансылып, күңел дауаһы өләшкән ғәжәйеп ҡот, шатлыҡ һәм ҡыуаныстар бөркөп, ғаилә һәм донъя бәрәкәтен үҫтергән илаһи көс икән. Зат-ырыуҙы ҡурсалаған, ырыҫ арттырған, үҙебеҙҙе мөхәббәтле иткән йомарт-ҡомарт сикһеҙ байлыҡ икәнлегенә лә төшөндөм. Ҡомартҡыны мотлаҡ һаҡларға кәрәк, ти торғайны ололар. Бәрәкәт бөтә, ҡот китә, тип тыҡығандары ла иҫемдә.

Әсәйем үҙ заманында башына, үҙе әйтмешләй, ҡаҡ түбәгә батмус ултыртып бейеп, дан яуланы. Башҡорттар көн дә тотонған, аш-һыу бүлмәһенән сығышмаған алюминий батмустар һәр өйҙә тиерлек булды. Әсәйемдең батмусы ҙур ине, аҫты менән алты пар сынаяҡ теҙеп, башына йәтешләп ултырта ла, ипле генә, талғын елпеү хәрәкәттәр башҡарып, сиртеп, ҡулдары менән батмусын тотмай бейергә төшөр

✓ ***"Бер биҙәүесте лә һатма. Һуғыш йылдарында халыҡ ас ултырһа ла, иҙән аҫтында шау мәрйенле, көмөш тәңкәле селтәрен һаҡланы. Кемдең һыйыры бар, шулар астан үлмәне. Кемдең селтәре бар, рухы һынманы".***



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы



Шулай ҙа дах йә иһә дай атамаһының йылға исеменән дә килеп сығыуы бар, был осраҡта Даих боронғораҡ атама булып тора. Ошоноң менән бәйле Көньяҡ Уралда Ыҡ һүҙе менән аталып йөрөтөлгән йылғаларҙың киң таралыуын (Ыҡ, Оло Ыҡ һәм башҡалар) һыҙыҡ өҫтөнә алмайынса булмай. Нисек кенә булмаһын, иртә тимер быуатынан бирле Көньяҡ Уралда Даих гидронимының булғанлығы һәм күп һанлы дах-массагет ҡәбиләләр союзы йәшәгәнлегенең тап килеүе асыҡлана.

Лингвистар билдәләүенсә, беҙҙең замандарға "сак" этнонимынан яралған Сак һәм Һаҡмар (Сакмара) йылғалары атамалары сак-дах-массагет дәүеренән килеп еткән тел ҡомартҡылары булып тора. Урал-Волга буйы төбәгендә "сак" һүҙе ингән топонимдар күп осрай (Свердлов өлкәһендәге Сак-Йылға гидронимы; Пермь крайындағы Һаҡмар (Сакмара) ауылы; Әстерхан өлкәһендәге Саксин ҡалаһы).

Б.э. тиклем VII-V быуаттарға ҡараған яҙма сығанаҡтарҙа Урал тауҙары районында, сак-массагет ҡәбиләләренең төп массаһы йәшәгән ерҙәрҙән (Арал буйы) төньяҡтараҡ көн иткән иирк, исседон, аримасп һәм аргиппей ҡәбиләләре иҫкә алына. Ошо ҡәбиләләрҙең ҡайһы тарафта йәшәгәнлегенең теүәл асыҡлауға арналған әҙәбиәт бик күп, әммә хәҙерге заман тикшеренеүселәренең күпселеге уларҙың Урал тауҙары районында урынлашыуын хаҡ тип иҫәпләй. Үрҙә һанап кителгән халыҡтар тураһында иң ентекле мәғлүмәттәрҙе б.э. тиклем V быуатта йәшәгән тарихсы Геродот йыйнаған. Ул ошо ҡәүемдәрҙең мәҙәни яҡынлығын һыҙыҡ өҫтөнә ала, уларҙың барыһының да скиф ҡәбиләләре иҫәбенә инеүен билдәләй. Ошо мәғлүмәт Птолемей картаһында Урал (Риммий) тауҙары өлкәһенең Скифия тип аталыуының осраҡлы булмағанын күрһәтә. Ошоноң менән бәйле Страбондың (б.э. тиклем II быуат) "Скифтарҙың күбеһе, Каспий диңгеҙенән башлап, дайҙар тип атала. Һуңғыларынан көнсығыштараҡ йәшәгән ҡәбиләләр массагет һәм сак атамаларын йөрөтә", - тип белдереүе ҡыҙыҡлы.

Геродот иирк ҡәбиләләрен һыбайлылар, тип нарыҡлай. Исседондарҙың йолалары хаҡында яҙылғандарҙа уларҙың малсылыҡ менән бәйле йәшәү рәүеше асыҡ сағылыш тапҡанын күрәбеҙ. "Әгәр берәйһененең атаһы үлеп китә икән, - тип яҙа боронғо тарихсы, - барса туғандары малдарын килтерә, уларҙы һуя һәм итен киҫәктәргә бүлә. Шунан һуң үҙҙәре килгән кешенең үлгән атаһының кәүҙәһен дә өләшләп киҫәләр. Шунан һуң барса итте бергә ҡушалар һәм мәжлес ҡоралар. Мәйеттең баш һөйәгенең тиреһен һыҙырып алалар, уны эс яҡтан таҙарталар, шунан һуң алтынлатып буяйҙар һәм изге кумир итеп һаҡлайҙар". Көньяҡ Урал ҡәбиләләрендә баш һөйәге культының энеолит дәүеренән бирле үк үҫешкән булыуын иҫәпкә алһаҡ, теркәп ҡалдырылған исседон йолаһында бер ниндәй ҙә оригиналь йөкмәтке булмауын күрәбеҙ.

Геродоттың замандашы Гиппократ исседондарҙың йәшәү рәүеше хаҡында ентекләберәк яҙа. Унынса, исседондарҙың ҡайһылары дүрт йә иһә алты тәгәрмәсле, ямғыр, ҡар һәм ел үткәрмәй торған кейеҙ менән ябылған көймәле арбаларҙа йәшәй. Уларҙа ҡатын-ҡыҙҙар тора, ә ирҙәр аттарҙа һыбай йөрөй. Улар артынан һарыҡ, кәзә, һыйыр көтөүҙәре, ат өйөрҙәре бара.

Иирктар һәм исседондарға яҡын ғына булған ерҙәрҙә аримасптар - "күп һанлылар һәм ғәйрәтле яугирҙар, ҙур йылҡы, һарыҡ һәм үгеҙ көтөүҙәренә эйә булыусылар" (Аристей) йәшәй, арыраҡ "таҙ башлы аргиппейҙар" көн итә. Геродот күрһәткәнсә, атап үтелгән ҡәүемдәрҙең телдәре бер-береһенән бер ни тиклем айырыла, скифтарҙың үҙҙәренең (күрәһең, Ҡара диңгеҙ буйы скифтары) күҙ унында тотола. - Н.М., Ә.С. **иҫк.**) аргиппейҙар менән ете телдә ете тылмас ярҙамында аңлашыуын ошоға дәлил итеп килтерергә була.

Аргиппейҙар иленең координаттарын "аргиппейҙар йәшәгән урын бейек тауҙар итәгендә, уларҙың өйҙәре - кейеҙ менән ҡапланған ағастар", йәғни тирмәләр икәнен белдергән мәғлүмәт аша аныҡ билдәләп була. Улар бер ағастың ноҡот борсағына оҡшаған емешен ашайҙар, унын эсендә төшө бар. Өлгөрөп етешкән емеште туҡыма аша һығалар, унан асхи тип аталған ҡара һут ағып сыға. Ошо һутты ялайҙар һәм һөткә ҡушып эсәләр.

Исседондар, аримасптар һәм аргиппейҙар иле, күрәһең, алтынға бай булған, быға Геродоттың бында грифондар булыуы хаҡында иҫкә алыуы дәлил. Икенсе бер сығанаҡта һыңар күҙле аримаспарҙың грифтар - боронғо риүәйәттәрҙә һөйләнелгәнсә, ер аҫты шахталарынан алтын соҡоп сығарыусы ҡанатлы йыртҡыстар менән мәгдән сығанаҡтары өсөн даими һуғыш алып барыуы хаҡында бәйән ителә. Көньяҡ Урал буйынса боронғо яҙма сығанаҡтарҙы тәфсирләүсе хәҙерге заман комментаторҙары был осраҡта алтынға һәм баҡырға бай булған Урал арьяғы райондары тураһында ғына һүҙ алып барырға мөмкин булыуын раҫлай. Ошоға бәйләп, Геродоттың тағы ла бер мәғлүмәтен - бер яҡтан, аргиппейҙар һәм уларҙың иң яҡын күршеләре, икенсе яҡтан, Ҡара диңгеҙ буйы скифтары араһында даими сауҙа алып барылыуы, каруан юлы булыуы тураһындағы яҙмалары бик әһәмиәтле. Был юл бронза быуатында сит яҡтарға баҡыр алып сығыу нигеҙендә барлыҡҡа килә; ул, күренеүенсә, иртә тимер быуатында баҡырға һәм алтынға бай мәгдән сығанаҡтарын киң үҙләштереү айҡанлы ныҒый бара.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

---

ине, тинеләр шаһиттар. Мин бәләкәй булғанға концертта сығыштарын күрмәнем, әммә олоғайғас бейетеп, камераға төшөрөп алдым. Бейеү бөткәнсе тын алмай ҡарап торҙоҡ, тын алһаҡ, башынан батмусы менән сынаяҡтары килеп төшөр кеүек тойола торғайны, ти торған булған тамашаһы. Етмешенсе йылдар башында һабантуйҙа әсәйем Сөләймәнова Фатима Хәлфетдин ҡыҙын Өфөнән килеп, телевидениеға төшөрөп алалар. Ауылдаштары архивта һаҡланған кинотаҫмаларҙан күреп, һөйөнсөләй торғайны.

Өләсәйемдең бейеүе башҡараҡ булған, ул башына һыу тултырылған стакандар ултыртып бейегән. Һыуы бер ҙә генә сайпылмауына кеше хайран ҡалып ҡарап торған. "Советская Башкирия" гәзитендә фотоға төшөрөп баҫтырып сығаралар өләсәйемдең бейеүен.

Ҡомартҡы итеп минә ҡалдырған шау мәрйенле селтәрен дүрт-биш тапҡыр яңыртып эшләне әсәйем. Ҡабатлап йүнәтеп, һүтелгән урындарын тегеп торҙо. Ошо мәрйендәрҙе һыйпаһам, күңелем йүнәлеп китә, ти торғайны. Ҡыуанғанғамы, тирә-яҡ яктырып киткәндәй тойола, тип һөйләгәндәре иҫемдә. Бейеүсе булғанғалыр, ғүмер буйы башҡорт күлдәге тектерҙе. Камзул тектереп, тәңкәләр баҫып, күңелен шуға һалды. Хәҙер мин әсәйемдең күлдәктәрен, башҡорт кейемдәрен кейеп, улым менән фотосессия үткәрәм. Ҡайһы бер күлдәктәрен кейеп тә өлгөрмәне, шул килеш һаҡлайым. Ете аҡыклы беләҙеген үтә лә нык оҡшатам, минең беләктәргә киң, тағып йөрөрлөк түгел, юғалтырмын тип ҡурҡам. Әммә йыш ҡына тотоп, ҡараштырып алам. Йәнгә йәм һирпкәндәй тойола. Ни тиһәң дә, әсәйем таҡҡан, атайым ныҒытып сүкеп биргән биҙәүестәр бит. Селтәрҙең һәр мәрйенендә әсәйемдең күҙ нуры һаҡланғандай тойола. Тәсбих Хәлфетдин олатайымдыҡы, "Көрьән" китабы ла ҡәҙерле ҡомартҡы. Әсәйемдән ҙур һумлыҡ тәңкә мираҫ булып ҡалды, бер яғына алтын ялатылған. Түшемдә оҙаҡ тағып йөрөй торғайным - йөҡара икән, ололар әйтеүенсә, көмөшө ҡәмей. Әлегә таҡмайым, ул 1732 йылғы. Селтәрҙәр башҡортҡа бигерәк ҡәҙерле икәнлегенә хайран ҡалып шаһит булдым. Кемдер илай яҙып һөйләй, кемдер оҙаҡ ҡына уйланып йөрөгәс, күрһәтергә ризалаша. Һәр кем ҡот һәм бәрәкәт икәнлеген аңлай.

Ҡомартҡы биҙәүестәр миңә бынау тажзәхмәт карантины ваҡытында ныҡ ярҙам итте, тиһәм дә, хата булмаҫ. Улар менән яҡынлаштым, ҡомартҡы һандыҡтан оҙаҡ һаҡланып ятҡан әйберҙәрҙе сығарып ҡарап алыу ысынында күңелгә дауа булды. Әсәйемдең һүҙҙәре әле лә күңелемә батып ингән: "Намыҫың булһа, бер биҙәүесте лә һатма һәм юғалтма. Һуғыш йылдарында халыҡ ас ултырһа ла, иҙән аҫтында шау мәрйенле, көмөш тәңкәле селтәрен һаҡланы. Кемдең һыйыры бар, шулар астан үлмәне. Кемдең селтәре бар, рухы һынманы", - ти торғайны. Сәнғәткә оло һөйөү булғанға ла Әхмәт Лотфуллин апа менән дуҫ булдылар, Вадим Сафин һәм Мирхәйҙәров олатайҙар менән аралашып йәшәне. Күренекле шәхестәр әсәйемдең фекеренә гел ҡолаҡ һалды. Һәр ҡомартҡы биҙәүес йорт нигеҙенә бәрәкәт һәм ҡот биреп торғанына һис тә шик юҡ....

Бер бөртөк ысын диңгеҙҙән алынған ҡортбаш та ҡәҙерле ҡомартҡы, уны мин гелән көшөләгемдә йөрөтәм. Яңыраҡ ҡортбаш борон аҡса урынына йөрөгән икән тип уҡығайным, әйтәм, күҙ теймәһен, көшөләгемдә аҡса бөтмәй.

**Мәҙинә ФАЗЫЛОВА.**
**Әбйәлил районы.**

**Редакциянан: Ә һеҙҙең ғаиләлә, зат-ырыуығыҙҙа ниндәй ҡомартҡылар һаҡлана, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ? Әйҙәгеҙ, шул турала яҙып ебәрегеҙ беҙгә.**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

58-се гв. атлы полкының отделение командиры, өлкән сержант Морат Ғәләм улы Ҡужаҡов та Днепрҙың уң ярында плацдарм алыу өсөн барған алыштарҙа батырлыҡ өлгөһөн күрһәтә. Ул Көйөргәҙе районының Иҫке Мораптал ауылында тыуып үҫә. Йылға аша сығыу менән уның отделениеһы ике сәғәт буйына дошман һөжүменә ҡаршы тора. Тиңһеҙ алышта яугирҙарҙың күбеһе һәләк була. Тора-бара Морат менән уның бер генә яугиры иҫән ҡала. Һис туҡтамайынса ут яуҙырып килгән дошман һалдаттары уларҙы уратып ала. Шул мәлдә батыр яугир, немецтар өҫтөнә гранаталарын ташлап, ҡамауҙы йырып сыға, әммә яу яланын ташлап китмәйенсә, дошманды тотҡарлап тороуын дауам итә. Ул Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. Морат Ҡужаҡов һуғыштан инмен-аман ҡайта, тыуған ягында колхоз рәйесе, бригадир булып эшләй.

Советтар иленең ошондай уҡ юғары исеме 60-сы гв. атлы полкының 2-се эскадроны командиры, өлкән лейтенант Мөлки Байрамовҡа (Төркмән ССР-ы, Мары ҡалаһы) бирелә. Ул командалыҡ иткән эскадрон 1943 йылдың 19 сентябренән 2 октябренә тиклем дошман менән алышта оло фиҙаҡәрлек күрһәтә. Ошо эскадрон Чернигов өсөн барған алыштарҙа, Березна, Лопатино, "1 Май" совхоздары районында өлгөлө подразделение булараҡ танылыу таба.

М. Байрамовтың эскадроны 27 сентябрҙә Днепрҙың уң ярында дошмандың 70-ләп һалдатын сафтан сығара, полктың башҡа эскадрондарының йылға аша юғалтыуһыҙ сығыуын тәьмин итә.

62-се гв. атлы полкының 45 миллиметрлы пушкалар взводы командиры, өлкән сержант Әхмәров Ғәбит Абдулла улы (Федоровка районының Иҫке Сытырман ауылынан) ла Клочково, Ивашковка, "1 Май" совхозы райондарында дошмандың 4 танкын, 2 үҙйөрөшлө "фердинанд" орудиеһын, бронемашинаһын, бер нисә пулемет расчетын юҡ иткәне, беҙҙең частарҙың Днепрға табан үнышлы һөжүмenә булышлыҡ иткәне өсөн ошо юғары исемгә лайыҡ була. Ул һуғыштан иҫән ҡайта, тыуған районында колхоз рәйесе, ауыл Советы рәйесе булып эшләй.

60-сы гв. атлы полкының отделение командиры, өлкән сержант Сәлмән Ғәлиәхмәт улы Биктимеров (Көйөргәҙе районының 2-се Кинйәбыҙ ауылынан) яуҙаштары менән 27 сентябрь таңында Днепр аша сыға, уң ярҙа дошман позицияларын баҫып ала, ҡул һуғышында бик күп немец һалдаттарын ҡырып һала, үҙ эскадронына йылға аша тиҙ арала сығып өлгөрөү өсөн шарттар тыуҙыра. Яр буйындағы алышта Биктимеров бер үҙе генә лә 15 фашист һалдатын сафтан сығара. Үҙ-үҙен аямай һуғышҡан яугирға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Ул 1944 йылдың апрелендә ауыр яралана. Демобилизацияланғандан һуң тыуған яҡтарына ҡайта, колхозда эшләй.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***"Еңмеш" фильмы беҙҙең ижади төркөмдөң байтағы өсөн трамплин булды, шул иҫәптән "Башҡортостан" киностудияһы өсөн дә. Донъяла күптәр ошондай киностудия барлығын тәү тапҡыр ишеткәндер.***

# ФИЛЬМДАР башҡортса фекерләргә лә

**Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, республиканың Шәйехзада Бабич исемендәге йәштәр дәүләт премияһы лауреаты, "Аскарфильм" студияһы директоры, режиссёр, продюсер, сценарист Айнур Асҡаровтың фильмдары хәҙер төрлө кимәлдәге фестивалдәрҙә ҡатнаша һәм призлы урындар яулай. Ул башҡорт тамашасыларын яңы асыштары менән ҡыуандырасаҡ әле. Айнур АСҠАРОВ менән бөгөнгө әңгәмәбеҙ шуға ишаралай.**



**Айнур, хыялдар тормошҡа аша, тиҙәр. Кино сәнғәте бала саҡ хыялымы, әллә яҙмыш ҡушыуымы?**

- Мин сәнғәткә ғашиҡ ғаиләлә үҫтем. Атайым дуҫтары менән "Рух" вокал төркөмөндә эшләне. Уларҙың концерттары, сығыштары - бөтәһе лә күңелемә ныҡ һеңгән, шуға үҙемде бәләкәйҙән сәнғәттән айырып ҡараманым. Мәктәпте тамамлағанда "Ҡайҙа барырға?" тигән һорау торманы. Сибай сәнғәт колледжының актер бүлегенә уҡырға индем. Колледжда уҡыу миңә еңел бирелде, алда әйткәнемсә, сәнғәт мөхитендә үҫеүем ныҡ ярҙам итте. Был уҡыу йортон ҡыҙыл дипломға тамамланым. Шунан иһә, юғары белем алырға теләп, Санкт-Петербург дәүләт кино һәм телевидение университетына уҡырға индем. Ҡыҙыл дипломым ошо уҡыу йортона инергә ярҙам итте, сөнки ул ниндәйҙер дәрәжәгә, баһаға өлгәшеү тигәнде аңлата ине бит.

**Ә кино сәнғәтенә нисек ылығып киттең, ул һиңә нимәһе менән оҡшаны?**

- Ул донъяла булған бөтә нәмәне үҙенә йыйып алған сәнғәт. Кемдәр генә эшләмәй унда: сценаристар, операторҙар, ҡораусылар, йөрөтмәндәр, ашнаҡсылар, ҡыҫҡаһы, төрлө-төрлө һөнәр эйәләре. Былтыр фильмды еңел генә төшөргәйнек, быйыл да шулай булыр, тип уйларға ярамай. Гел генә көтөлмәгәнлектәргә һәм асыштарға тарыйһың: заман технологиялары үҫешә, хеҙмәтеңде халыҡҡа сығарыу юлдары ла яңыра. Элек кинотеатрҙар менән эшләй торғайныҡ, хәҙер киноны интернет аша атҡарырға тура килә. Элек ҡыҫҡа метражлы фильмдар һатылмай ине, хәҙер, киреһенсә, уларға ихтыяж үҫте, ә тулы метражлы фильмдарҙы һатыуы ауырлашты. Шулай уҡ сериалдарға ихтыяж барлыҡҡа килде. Тимәк, көн һайын яңы кешеләр, яңы осрашыуҙар... Бына шундай асыштары менән был өлкә миңә ҡыҙыҡ та. Сөнки мин егерме-утыҙ йыл буйы тик бер урында ғына эшләп ултыра торған кеше түгелмен. Шуға үҙем һайлаған һөнәремде бик яратам.

**Сибай дәүләт колледжы иң төплө белем биргән уҡыу йорто, тигәйнең. "Төплө белем алдым", тигәнде асыҡлап китәйек әле.**

- Мәҫәлән, роль өҫтөндә эшләү. Һәр бер актер текст өҫтөндә эшләүе, соҡоноу-эҙләнеүҙәре менән бергә үҙ роленең режиссеры ла булып тора. Актерлыҡ оҫталығын камиллаштырыр өсөн ҡай берәүҙәр ҡайҙа ғына бармай ҙа, ниндәй генә ҡыйбатлы курстар үтмәй. Ләкин ҡайҙа ғына барып өйрәнмә - бөтә ерҙә лә шул уҡ технология. Быны яҡшы белеп әйтәм, сөнки заманында үҙем дә шулай йөрөп ҡараным. Сибайҙа актерлыҡ оҫталығына 2003-2008 йылдарҙа уҡыным һәм йылдар үтеү менән инандым: бөтә ерҙә лә шул уҡ талап, шул уҡ белем - бер ниндәй үҙгәреш юҡ. Уҡытыусыларым Вәкил Барый улы Йосопов, Земфира Айрат ҡыҙы Алтыншина, Римма Лоҡман ҡыҙы Йәрмөхәмәтоваларға бик ҙур рәхмәт. Улар барыһына ла өйрәтте.

Һәм, әлбиттә, Сибай колледжында өйрәнгән иң яҡшы нәмә - күҙәтеү, һәр саҡ эҙләнеүҙә булыу. Актер кеше күҙәтеүсән булырға, төрлө кешеләрҙең хәрәкәтен, ҡыланышын, холҡон, ҡиәфәтен күҙҙән үткәреп барырға тейеш. Бындай эҙләнеүҙәр минең өсөн ҡыҙыҡ, һәм ҡайҙа ғына барһам да кемгәлер тексәйеп ҡарайым да ултырам. Был ҡайҙан килгән, нимә эшләй, уға нимә кәрәк, уны нимә борсой, ни өсөн ул моңһоу, йә көлөп йөрөп ята? Бар һорауҙарға ла яуап табып, үҙемә персонаждар тыуҙырам.

**Бында, башҡорт мөхитендә йәшәгән егеткә, Санкт-Петербургҡа уҡырға ингәс, ауыр булманымы? Унда бит барыбер икенсе мөхит.**

- Бер яҡтан, ауыр булды. Мин Хәйбулла районының Маҡан ауылында үҫтем. Сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштергәндә барлыҡҡа килгән ауыл ул. Егерменсе-утыҙынсы йылдарҙа далаға төрлө халыҡ вәкилдәре килгән. Ошо бәләкәй генә ауылда 36 милләт вәкиле йәшәне. Күршеләрҙә кем генә булманы - башҡорт, урыҫ, татар, сыуаш, поляк, немец, һ.б. Беҙ бер ҡасан да бер-беребеҙҙе айырып ҡараманыҡ. Бала саҡтан уҡ ике телдә һөйләштек. Ғаиләлә инде һәр кем үҙ телендә һөйләште. Беҙ ҙә өйҙә башҡортса һөйләшһәк, урамда балалар менән урыҫ телендә аралаштыҡ.

Санкт-Петербургта беренсе айҙары ауырыраҡ булды. Ундағы кешеләр өсөн, әлбиттә, ҡиәфәтем менән мин урыҫ түгелмен. Беҙҙә төрлө милләт татыу йәшәһә лә, унда минең кеүектәрҙе "ҡара халыҡ" тигән һымаҡ ҡабул итәләр ине. Аҙаҡ, ныҡлап танышып киткәс, үҙ итә торғайнылар. Шуға коллективта ҡайҙа ла үҙемә урын таба алдым.

Уҡыуы еңел булды. Икенсе курстан "Башҡортостан" студияһы менән бергә эшләй башланыҡ. 2010 йылда "Еңмеш" фильмын төшөрҙөк. Кинола үҙемдең эште күрһәтә белеү, юғары сифат - минең өсөн иңиң төп урында торҙо.

**Улай булғас, "Еңмеш"тең тыуыу тарихын иҫкә алып китәйек әле.**

- Фильмдың геройы кеүек, үҙем дә шундай мажараларға тарығайным, шуға был идея бала саҡтан килә, тип әйтә алам. 1992-1993 йылдарҙа, иҡтисади көрсөк осоронда, ауылда берәүҙең дә аҡсаһы юҡ һәм магазинда ла әйберҙе талонға ғына бирәләр ине. Клубтарҙа кино күрһәтәләр ине, әлбиттә. Рейс автобусына һалып, кинотаҫмалар ебәрәләр, һәм беҙ кис клубҡа кино ҡарарға йыйылабыҙ. Аҡса булмағас, кемдер йомортҡа, кемдер буш шешә тотоп килә, был беҙҙең өсөн ғәҙәти хәл ине. Шуларҙы Санкт-Петербургтағы дуҫтарыма һөйләгәйнем, улар ауыҙҙарын асып тыңланылар, шуға ла теге хәлдәрҙе сюжет итеп төшөрөргә булдым.

Дүртенсе курс студенты Леонид Корин менән тиҙ генә сценарий ултырып яҙҙыҡ та, йәй Хәйбуллаға ҡайтып, бер ай буйы төшөрҙөк. 2010 йылда ҡырҡ градусҡа тиклем эҫе булды. Етмәһә, республикала власть алышынған ваҡыт. Тыуған яҡта нәфис фильм тәү тапҡыр төшөрөлә, маҡсатты бик аңлап бөтмәйҙәр, шуға ҡатмарлыҡтар ҙа тыуғыланы. Ә шулай ҙа фильмды аҙағына тиклем төшөрөп бөттөк. Бөгөн инде шуны әйтә алам: төрлө призларға, бүләктәргә иң күп лайыҡ булған "Еңмеш" фильмы беҙҙең ижади төркөмдөң байтағы өсөн трамплин булды, шул иҫәптән "Башҡортостан" киностудияһы өсөн дә. Донъяла күптәр ошондай киностудия барлығын тәү тапҡыр ишеткәндер. Әлбиттә, "Еңмеш"кә тиклем йәнһүрәттәр, "Быяла юлсы" фильмы бар ине, һәм ун йылға яҡын бер нәмә лә төшөрөлмәгәйне. "Еңмеш" фильмы Башҡортостан кинематографына яңы һулыш бирҙе. Француз кинематографындағы "яңы тулҡын" һымаҡ тоя инек үҙебеҙҙе, йәнәһе, хәҙер беҙ һеҙгә күрһәтәбеҙ! Етмәһә, ул осор цифрлаштырыу дәүеренә тура килде. Элек бит таҫмаға ғына төшөрәләр ине, ә камералар ныҡ ауыр була торғайны. Уны күсереп йөрөтөп булмағанлыҡтан, фильмдар статик планда ғына төшөрөлдө. 2010 йылдарҙан фотоаппарат һымаҡ яңы еңел камералар сыға башланы. Беҙ ҙә киноларҙы фотоаппараттарға төшөрә башланыҡ. Бындай яңылыҡ, үҙ сиратында, яңы ҡараш, яңы мөмкинлектәр тыуҙырҙы. Ә геройҙарыбыҙ башҡорт телендә һөйләшә! Башҡорт теле йәшәй, тигән фекерҙе ныҡ ғыттыҡ беҙ ул фильм менән.

**"Өфөнән һөйөү менән" - йәмәғәтселектә төрлө бәхәстәр ҙә тыуҙырған фильмдарҙың береһе булды...**

- Мин уға тиклем бер нисә ҡыҫҡа метражлы фильм авторы инем. Күп режиссерҙар ҙур фильм төшөрөүҙе бик мөһим тип һанай. Сөнки ҡыҫҡа метражлылар ул саҡта фестивалдәр буйлап ҡына йөрөһә, тулы метражлы фильмдар менән прокатҡа сығырға була. Бары тик тулы метражлы фильмдар аша ғына халыҡҡа үҙең тураһында тулыһынса белгертергә, үҙеңдең уйыңды еткерергә мөмкин ине.

Беренсе курстан уҡ үҙемдең тыуған яғым тураһында фильм төшөрөү тураһында хыяллана инем. 2015 йылда алдымда дебют фильмы эшләү бурысы торҙо. Уйланыҡ-уйланыҡ та, еңел генә ҡаралған, әммә тәрән фекерле комедия төшөрөргә булдыҡ. Эҙләнгән ваҡытта күп сценаристар менән осрашырға тура килде, ләкин уларҙың фекерҙәре бер ҡалыптараҡ ине. Мәскәүҙә эшләгән Айҙар Аҡманов менән күрешеп, идеяны һөйләй башлау менән, ул минең фекерҙе эләктереп тә алды. Көн дә тиерлек осрашып, һөйләшеп торһаҡ та, сценарий оҙаҡ яҙылды. Әллә унлаған вариантын яҙҙыҡ инде... Башҡорт мөхитендә үҫкән Урал әрменән ҡайтҡас, ҡалаға килеп, нисек үҙен аса, үҙен нисек таба? Башҡорт тәрбиәһе ярҙам итәме уға, әллә кәртә лә булып торамы? "Ниндәйҙер һантый малай йүгереп тик йөрөй, башҡортто наҙан итеп күрһәткәнһегеҙ", - тигән һүҙҙәрҙе лә ишетергә тура килде. Ундай кешеләрҙең фильмға һалынған тәрән мәғәнәле фекерҙәрҙе ишетмәүҙәре-күрмәүҙәре үкенесле, әлбиттә.

**Бәхәстәр бар икән, тимәк, ул халыҡты битараф ҡалдырмаған, тигән һүҙ...**

- Эйе, беҙҙең маҡсат та шунда ине, битараф ҡалманылар. Интернетта "Өфөнән һөйөү менән" бар, әле лә ҡарайҙар. Унда Айҙар Аҡмановтың телефон номеры ҡуйылған, фильмдың сығыуына биш йылдан ашыу, ә көн дә тиерлек уға шылтыраталар ҙа: "Уралды мөмкинме?" - тип һорайҙар. Фильм бөгөн дә йәшәй, был беҙҙең өсөн ҡыуаныс.

**Кино геройҙары менән осрашаһығыҙмы? Әллә улар үтеп киткән бер этап ҡынамы?**

- Юҡ, йыш ҡына күрешеп торабыҙ. Фильм өҫтөндә эшләгән саҡта, барыһы ла минең дуҫыма әйләнә. Сөнки артистарҙы һайлап алғанда ҡараштары менән үҙеңә яҡын булғандарҙы һайлайһың бит. Сценарий яҙғанда ла унда үҙеңдең ҡарашыңды һалаһың, актер сценарийҙы үҙ итә икән, тимәк, яҡшы уйнаясаҡ, һәм ул һиңә кеше булараҡ та яҡынаясаҡ.

**Үҙеңде ҡасан режиссер итеп тоя башланың?**

- Элегерәк "Мин кинорежиссер", тип оялып ҡына әйтә торғайным. "Һин ниндәй режиссер? Әле һиңә егерме ике генә йәш", тип әйтеүселәр ҙә бар ине. Бер-ике йыл инде мин үҙемде режисер итеп тоя башланым.

✓ ***Халыҡты рухи тәрбиәләү өсөн башҡортса контент булдырыу, уны ҡыҙыҡлы итеп эшләү кәрәк, уны хатта башҡа милләттәр ҙә ҡарарлыҡ булһын. Тел быға бер ҙә ҡамасау түгел. Кино теле бар донъяға ла аңлайышлы.***



Бында, әлбиттә, Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығының да мөнәсәбәте ярҙам иткәндер. Мин Ш. Бабич исемендәге йәштәр дәүләт премияһы лауреаты, БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре тигән исемгә лайыҡ булдым. Хеҙмәткә баһа бирелгәс, үҙеңә нығыраҡ ышана башлайһың. Әлеге көндә кино төшөргәндә ҡайҙалыр шылтыратһам, йәки барһам, мине беләләр, танныйҙар, ярҙам итергә генә торалар. Был ҡыуаныс һәм эште лә еңеләйтерә. Икенсе яҡтан, иңгә һалынған йөктө лә тояһың, кешеләр бит һинә өмөтләнә, тимәк, ышанысты аҡларға, тағы ла яҡшыраҡ эшләргә кәрәк.

**Мостай Кәрим ижады нимәһе менән үҙенә йәлеп итте?**

- Мостай Кәрим ижады миңә электән оҡшай. Мәктәптә уҡыған саҡта ул минең иң яратҡан авторҙарымдың береһе булды. Үҙен күргәнем булмаһа ла, нисектер, ул гел эргәмдә ине. "Башҡортостан" киностудияһы: "Өс таған" буйынса кино төшөрөргә йөрөйбөҙ, һинең фекер нисек?"- тигәс, шунда уҡ ризалаштым. Айҙар Аҡмановты саҡырҙым, һәм ул повесты кино-

маһы көйләнмәгән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, иртәгә ниндәй кино төшөрөләрен мин белмәйем. Театрҙарҙа, мәҫәлән, репертуар бар, быйылға, икенсе йылға пландары төҙөлгән. Беҙ иһә гранттан грантҡа тиклем генә йәшәйбеҙ. Хәҙер гранттар ҙа ҡыҫҡартыла башланы. Аҡсаны үҙебеҙ эҙләп табырға тырышабыҙ. Эш былай барһа, киләсәктә берәү ҙә башҡортса фильмдар төшөрмәйәсәк. Ҡыҫҡа метражлы фильмдар булыр ул. Ә бына тулы метражлыларын хөкүмәт ярҙамынан тыш төшөрөп булмай. "Йыл ғаиләһе", "Өс таған"ды төшөргән саҡта ниндәйҙер ышаныс бар ине. Элек БР Гражданлыҡ йәмғиәтенә ярҙам итеү фонды булды, тик ул ябылды. Кино өсөн фонд булдырыла, тигән һүҙ ҙә булғайны бер мәл, уныһы ла юҡ. Хәҙер Башҡортостанда, ғөмүмән, киноға гранттар юҡ. Мәскәүҙән Мәҙәниәт министрлығынан аҡса алырға була, әммә унда башҡортса фильмдар өсөн аҡса бүлеүҙәре икеле. Булат Йософов Рәми Ғарипов тураһында фильм төшөрҙө. Был фильм өсөн ул Мәскәүҙән аҡса ала алмаҫ ине. "Шағир көндәлеге" башҡорттар өсөн генә эшләнгән башҡортса һөйләшкән бер-ике генә блогер бар. Хәҙер башҡорт эстрадаһында башҡортса ҡыйыу һөйләшкән йәштәр күҙгә салына салыныуға, ләкин был киң масштабта түгел. Минең дә башҡортса һөйләшкем килә, тик эргә-тирәмдә рәхәтләнеп ултырып башҡортса һөйләшерлек кеше юҡ. Шуға, туған телемде һағынып китһәм, ауылға ҡайтып, рәхәтләнеп һөйләшеп ултырам. Әлдә башҡорт театрҙарыбыҙ бар, телевидение, радиобыҙ бар, тим. Әммә былар ғына етмәй. Балалар өсөн башҡортса контент бик әҙ.

Башҡортостандың милли кино фонды булдырылһа, унда контент күбеһенсә башҡорт телендә булырға тейеш. Яҡут дуҫтар фильмдарын тик яҡут телендә генә төшөрә. Был уларға Мәскәү фестивалдәрендә грант, йәки беренсе урындарҙы яуларға һис тә ҡамасауламай. Фильмдар сит илдәрҙә лә беренсе урындар яулай. Шуға иғтибар иттем: интернеттағы чаттарҙа ла улар тик яҡутса яҙышалар. Улар 700-800 мең генә халыҡ. Тимәк, улар ун-егерме йыл элек тик яҡутса һөйләшеү, яҡутса контент булдырыу сәйәсәтен башлап ебәргәндәр, һәм әле шуның һөрыу, уны ҡыҙыҡлы итеп эшләү кәрәк, уны хатта башҡа милләттәр ҙә ҡарарлыҡ булһын. Тел быға бер ҙә ҡамасау түгел. Кино сәнғәте теле бар кешегә лә, бар донъяға ла аңлайышлы.

**"Ай ҡыҙы" сериалын заманында бик яратып ҡарағайнылар. Шундайыраҡ башҡорт сериалдары бөгөн дә төшөрөлһә, ҡалай яҡшы булыр ине…**

- Сериал төшөрөүҙең үҙенсәлеге бар - ул телевидениеға кәрәк булырға, йәғни ул заказ биреүсе булырға тейеш. Беҙҙең профессионалдарға улар: "Сериал төшөрөгөҙ, беҙ һатып алабыҙ", - тип мөрәжәғәт итһәләр һәм сериалдар араһына үҙҙәре рекламалар һатып алып ҡыҫтырһалар, ысынлап та, ул табышлы ла булыр ине. Әммә әлегә ундай мөрәжәғәттәр юҡ. Әлеге көндә беҙгә "Домашний" телеканалынан килеп, сериалдар төшөрәләр. Уларға ҡоролмаларҙы ҡуртымға бирәбеҙ. Йәй көнө "Саня, газуй!"ҙың икенсе миҙгелен төшөрҙөк. Бында улар арзан ғына хаҡҡа төшөрәләр ҙә, үҙҙәрендә ҡыйбатҡа күрһәтәләр, йәғни араларына реклама ҡуйып, аҡса эшләйҙәр.

һәм тиҙерәк тә, яҡшыраҡ та уйнайҙар. Башҡорт кино сәнғәтен системаға көйләп алырға ине. Һуңғы йылдарҙа шуның буйынса эшләйбеҙ. Үҙебеҙҙең матди базаны туплайбыҙ, сценарийҙар йыйып алабыҙ. Камералар, машиналар булғас, сериалдар төшөргәндә барыһын да үҙ көсөбөҙ менән атҡарабыҙ.

Фильмдарҙа йыйып алған аҡса үҙебеҙҙең мәнфәғәткә түгел, ә ҡоролмалар һатып алыуға китә, сөнки улар етешмәй. "Башҡортостан" киностудияһында ла шул уҡ хәл, ҡоролмалар иҫке. Йыл һайын аҡса вәғәҙә итәләр, тик ул вәғәҙә генә булып ҡала. Һәр йыл илдә ниндәй ҙә булһа берәй хәл сығып ҡына тора бит, тажзәхмәтме, махсус операциямы һ.б. Был осраҡта иң ныҡ ҡаҡшағаны - беҙҙең кинематограф. Әлбиттә, хәҙер нәшриәт, матбуғат шулай уҡ ауыр хәлдә тип беләм.

**Тыңғыһыҙ режиссер Айнур Аҫҡаров бөгөн нимә өҫтөндә эшләй, кино сәнғәтенә бәйле ниндәй эше менән ҡыуандырмаҡсы?**

- Әлеге мәлдә беҙ М. Кәримдең "Ярлыҡау" повесы буйынса

# ОБРАЗДАР ТЫУҘЫРА, ярҙам итә

сценарийға әйләндерҙе. Дамир Йософов, Ғәфүр Тимербулатов - дүртәүләп төшөрҙөк ул киноны. М. Кәримдең телен дә, фекерҙәрен дә һаҡланыҡ, әҫәрҙә һүрәтләнгән заманды ла күрһәтә алдыҡ. Үҫмерҙәр ролдәренә малайҙарҙы беҙ урамдан тигәндәй йыйып алғайныҡ. Башта уларҙы Башҡортостан буйлап эҙләнек. Режиссерҙар Вилүрә Иҫәндәүләтова, Руслан Юлтаев театрҙарҙа, мәктәптәрҙә кастингтар үткәреп, видеоға төшөрөп, ике йөҙҙән ашыу баланы ҡараны. Аҙаҡ шуларҙан 8-9 кешене Өфөгә саҡырҙым да, араларынан һайлап алдым. Ауылда үҫкән башҡорт балалары, асылда, үҙҙәрен уйнанылар. Быныһы Ғабдулла, быныһы, Айҙар, Вәзир, Яҡуп икәнлеге йөҙҙәренә яҙылғайны. Үҙ-ара ла улар М. Кәрим геройҙары һымаҡ аралаша ине. Эш ауыр булды, әммә яратып эшләгәс, ҡыҙыҡ та булды. Фильмды иң төпкөл ауылдарҙың береһе - Толпарҙа төшөрҙөк. Унда юлдар насар ғына, тау төшәһең, тау менәһең... Алыҫ булғанғалыр, күрәһең, бик матур урындар, кеше аяғы йөрөмәгән, тапалмаған. Мәктәптә йәшәнек, кластар дөйөм ятаҡҡа әйләнде. Көндәр ҙә бик һәйбәт торҙо. Ҡыҫҡаһы, 2017 йылдың бөтә йәйе шунда үтте. Ауыл халҡына рәхмәт, ныҡ ярҙам иттеләр.

**Бөгөнгө кино сәнғәтен нисек күҙаллайһың?**

- Күпме һөйләһәк тә, әлеге көндә Башҡортостан кинематографының кино сәнғәте систе-

кино. Бындай фильмдарға, әлбиттә, үҙебеҙҙең Хөкүмәт бағыуҫы булырға тейеш.

Йылдан-йыл башҡортса фильмдар төшөрөү ҡыйынлаша бара. "Өс таған"ды беҙ башҡортса төшөрҙөк, әммә рус теленә тәржемә итеп, күбеһенсә русса күрһәттек. Был фильмдың башҡортсаһы әле һаман да телевидениеға сыҡмаған. Башҡорт контенты кәрәк, тип һөйләйбеҙ, яҙабыҙ, ләкин эш аҡсаға килеп терәлһә, ул ихтыяж да юҡҡа сыға. Шуға күрә киләсәктә башҡорт фильмдары булырмы-юҡмы, һорау асыҡ ҡала.

Беҙ үҙ-ара аралашҡанда ла, ни өсөндөр, башҡортса һөйләшмәйбеҙ. Башҡорт теле көндәлек һөйләшеүҙән ҡайҙалыр китте, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Ошондай интервьюлар өсөн БСТ-ға, радиоға, башҡорт баҫмаларына рәхмәт, уларҙа беҙ башҡортса һөйләшә, телде сарлай алабыҙ. Ҡаҙанға йыш йөрөргә, төрлө фестивалдәрҙә ҡатнашырға тура килә. Гел иғтибар итәм: унда татарҙар үҙ-ара туған телендә һөйләшәләр. Урамдарҙа татарса рекламалар урын алған. Беҙҙә лә башҡортса контент күберәк булырға тейеш. Хәлде нисек үҙгәртергә була һуң? Башҡортса фильмдар, рекламалар кәрәк. Фильмдар образдар тыуҙыра, тамашасы күңеленә үтеп инә, йөрәккә тәьҫир итеп, башҡортса фекерләргә, башҡорт теле, мәҙәниәте, тормошо менән ғорурланырға өйрәтә. "Мин башҡортса һөйләшә алам!" тигән ышаныс бирә.

Ауылдан ҡалаға килгән кеше русса һөйләшкәндә акцентынан оялмаһын ине. Кемдер башҡортса аңламай икән, был уның проблемаһы бит. Интернетта ҙөмтәһе күренә лә инде. Республика йәштәрен Мәскәүгә йә башҡа эре ҡалаларға махсус уҡырға ебәрә. Беҙҙең менән Санкт-Петербургта ла яҡуттар күп уҡыны - 20-30 кеше бар ине. Бөтөнөһө лә Яҡутстанға кире ҡайтты, үҙҙәренең туған телендә кино төшөрәләр. Йылына 20-30 фильм эшләп сығаралар улар. Йәшәгән биләмәләре ҙур, 800 мең халыҡ төрлө урындарҙа таралып йәшәй, әммә уларҙы мәҙәниәт берләштереп тотоп тора. Ул саҡта беҙҙең республиканан да Санкт-Петербургта егермеләгән кеше уҡыны, уларҙы махсус курс менән ебәргәйнеләр, тик әйләнеп ҡайтҡандары бик әҙ булды. Мин ул курсҡа эләкмәнем. Мин республикаға ҡайттым, тегеләр ҡайтманылар, төрлө эштә йөрөйҙәр. Башҡорт киноһы ла, уны төшөрөүселәре лә кәмей, кино сәнғәтенә аҡса бүлеү ҙә наҡыҫлана бара, шуға йөрәк әрней.

**Бер-ике илһөйәр режиссер үҙҙәренең тырышлығы менән башҡорт киноһы сәнғәтенең мөмкинлеген, уның киләсәге барлығын, халҡы алдында уның ихтирамлы бейеклектә торғанын раҫланы. Оҙайлы юл үтелмәһә лә, үҫеш бар тип уйлайым мин.**

- Үҫеш бар, әммә система юҡ. Минең айырым "Аскарфильм" студияһы эшләй, беҙ "Башҡортостан" киностудияһы бинаһында ултырабыҙ. Халыҡтың ихтыяжына ярашлы беҙгә киләсәктә сериалдар, комедиялар төшөрөргә кәрәк. Төшөрмәйбеҙ түгел, хәлдән килгәнсә төшөрәбеҙ. Халыҡты рухи тәрбиәләү өсөн башҡортса контент булды-

Әгәр ҙә берәй шәхси башҡорт каналы булһа, ул саҡта күберәк башҡортса контентты йәлеп итергә тигән ынтылыш булыр ине. Тамашасы күберәк булһа, реклама ла ҡыйбатыраҡҡа һатыла. Ул үҙен аҡлай алырлыҡ канал булыр ине тип уйлайым. Хәйер, Рәсәйҙең үҙендә лә күберәк сит илдәрҙән индерелгән тәржемәләнгән фильмдарҙы ҡарайҙар. Мауыҡтырғыс сюжеттар беҙҙе Голливудтағыса фекерләргә өйрәтә, тип әйтергә була. Был - һуғыш, ул һуғышта мәҙәниәтебеҙ еңелә. Һүҙ юҡ, уларҙың актерҙары шәп уйнай. Шул сифатҡа беҙ ҙә ынтылабыҙ, әммә беҙҙең кинола эшләгән кешеләр бөтәһе лә энтузиастар.

**Һеҙҙең фильмдарҙағы актерҙарға һоҡланам. Улар йәндәрен биреп уйнанылар, сифат юғары булды, тип уйлайым.**

- Барыбер улар профессионал түгелдәр, фильмға индереп ебәреү ҡыйыныраҡ, сөнки уларҙың тәжрибәһе юҡ тиерлек. Күп тигәндә, бер-ике фильмда ғына төшкәндәр. Ә актер йылына ике-өс фильмда уйнарға тейеш.

Йылдың-йылы фильмдар һәм сериалдар күбәйә. Медиастат компанияһы менән бергә эшләйбеҙ. Аллаға шөкөр, 2022 йылда Актерҙар базаһын булдырҙыҡ, унда алты йөҙҙән ашыу кешене тупланыҡ. Улар хәҙер Рәсәй сериалдарында төшә башланы. Әле илленән ашыу башҡорт артисы "Домашний" каналы сериалдарында төшә. Был уларға арыу ғына тәжрибә мәктәбе. Беҙгә лә ярҙам, саҡырһаң, улар һә тигәнсе килеп етәләр

эшләйбеҙ. М. Кәрим фонды мине режиссер булараҡ саҡырҙы. Айҙар Аҡманов - сценарий авторы. 90 минутлыҡ йәйге блокты төшөрөп бөттөк, хәҙер ҡыҫҡа ғына икенсе блок ҡалды. Фильм рус телендә, башҡорт колориты, әлбиттә, буласаҡ. Төп геройҙары Йәнтимер Байназаров, Любомир Зух, Мария-Тереза. "Беҙҙең өйҙөң йәме"н төшөргән директор менән берлектә эшләйбеҙ. Былтыр уны Минск ҡалаһында төшөрҙөк. 2023 йылда экранға сығыр тип өмөтләнәбеҙ. Кешене илатырлыҡ матур сағыу фильм булырға тейеш, унда Рәсәй, башҡорт актерҙары уйнай. Ун ете, ун һигеҙ йәшлек йәш кенә актерҙар. Күтәрелгән тема бик көнүҙәк, актуаллеге көндән-көн үҫә генә.

"Аскарфильм" "Башҡортостан" кино студияһы һәм Кинематографтар союзы менән берлектә эш алып бара. Башҡортостанда кино сәнғәте бар, тип һөйләһәләр ҙә, ысынбарлыҡта, унда көнө-төнө эшләгәндәр ун-ун биш кеше генә булыр - бер нисә сценарий авторы, бер нисә режиссер. Бер театр штаты ҙурлығында ғына булһаҡ та, ҙур бер өлкәне тәшкил итәбеҙ. Кино төшөргән ваҡытта, әлбиттә, күп кеше йыябыҙ, ләкин даими эшләгәндәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Был һанды үҫтерергә ине. Йылдан-йыл кино күберәк төшөрөлһә, был беҙҙең кино сәнғәтенең үҫешенә килтерәсәк. Әле ҡыҫҡа метражлы фильмдар әҙерләйбеҙ, йәш режиссерҙарҙы үҫтерәбеҙ. 2024 йылда үтәсәк Өфө юбилейына матур фильм әҙерләргә тигән ниәтебеҙ бар...

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әңгәмәләште.**

*✓ Совет фильмдарын ҡарап, фашистарға нәфрәт менән тәрбиәләнгән Мирға был немец көйҙәренә бейеү - уның намыҫынан көлөүгә тиң булды. Ул ырғып тороп бейеү майҙанынан сығып китте...*






Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА

# МИНЕҢ ЯРАТҠАН БАШҠОРТОМ

(Повесть)

Шулай ҙа Юрген ҡарттың ярҙам итергә саҡырыуынан, командирҙар рөхсәт итһәс, баш тарта алманы өлкән сержант Зиннәтуллин. Бесән мәлендә үҙенең отделениеһынан эш мәнеһе белгән бер нисә һалдатын алып барып, күбәләшеп бирҙеләр. Хәйер, етеш йәшәгән ҡарттың аттары ла, игенбесән эшләрлек ҡоралдары ла етерлек. Аттарын ҡушарлап егеп, игенде лә үҙе саба, үҙе тырмата, игенен үҙе һуға, елгәрә. Әлбиттә, бер үҙе түгел, сезонлы эшкә кешеләр ялай. Уларҙа өмә менән, бушҡа ғына ярҙам итешеү юҡ икән. Ә һалдаттар, беләктәрендә көстәре ташып торған өрләктәй егеттәр, ауыл эшен, колхоз-совхоздарҙа үткән бесән өмәләрен һағынған йәштәр, емертеп эшләнеләр, туғай һайт-һайтлап ҡысҡырған тауыштан гөрләп торҙо. Эскерт-эскерт бесән өйөлдө, һунырағ буралларға иген ташылды. Күмәк көс менән, дәртле һүҙ, шаярышыу, хатта уйын-көлкө менән барған ауыр эш тиҙ генә осланды. Һалдаттарҙың эшенән ҡәнәғәт Юрген ҡарт менән әбейе ни алып, ни бирергә белмәй хитланды. Ишек алдына теҙеп ҡуйылған оҙон өҫтәл артында туйға тартым һый-хөрмәт күрһәтелде. Ярҙамсы ҡатын-ҡыҙҙар менән хужабикә, Иоланта барыһын да көсләп-көсләп ашатты, үҙҙәренең әйҙә эшләгән шараптары, кеүәстәре менән һыйланы. Командирҙарға ла, һалдаттарҙың үҙҙәренә лә байтаҡ күстәнәс тейәп, ҡарт үҙе ат менән алып барып ҡуйҙы.

Күмәк эш кешене яҡынайта, Коссмандар менән Мирҙың араһы киренән яйланды, элеккесә дуҫтарса мөнәсәбәт тергеҙелде. Армия хеҙмәте үҙ яйы менән алға барҙы, сәйәси әҙерлек, физподготовка, плацтағы күнекмәләр, бер көнлөк йә аҙнаға һуҙылған учениелар һалдаттар өсөн тәбиғи хәл. Уларҙы һәр береһен ҡабатлап һөйләп тороу артыҡ: үҙе күрмәгән кешегә аңлашылмай, үҙ башы аша үткәргәндәр былай ҙа аңлап тора. Ҡарауылда тороу, часть буйынса дежурлыҡ итеү, кухнялағы вазифалар, дневальный булыу - барыһы ла үтте һалдаттар башынан. Ошондай бер төрлө, ике тамсы һыу кеүек оҡшаш көндәр араһында увольнениега сығыу, Иоланта менән осрашыу, йәки уларҙың ғаиләһенә хужалыҡ эштәрендә ярҙам итеү Мир өсөн көндәрҙе ҡыҫҡартыуға ла, тел өйрәнеүгә лә (ул Коссмандар менән дә бер ҡасан да русса һөйләшмәне, нисек тә булһа немец телен шымартыу, нескәлектәрен өйрәнеү ине уның теләге) бик файҙалы булды.

Иоланта-Миләүшә менән улар эштән бушаған арала Шверин ҡалаһына йөрөргә ғәҙәтләнеп алды. Быйыл көҙгә Мирға демобилизацияға, шуға күрә ул йөнә һөймәгән Германияны күберәк күрергә, белергә ашҡынды. Илгә ҡайтҡас: "Ниндәй ул фашистар ояһы?"- тип һорашалар, нимә тип яуаплар? Ике йыл ярым йөшлеге үткән немец ерен тасуирлай ҙа алмай, беҙ казармала яттыҡ, тип әйтә алмай ҙа баһа! Әҙәм көләр үҙенән. Шуға күрә улар икәүләп ике велосипедка атланып, Швериндың арҡырыһын буйға йөрөп сыҡтылар. Матур, төҙөк ҡала, йәшеллек күп, шуғамы, һауаһы таҙа, саф. Бәлки, ҙур завод-фабрикалар булмағанғалыр ҙа, етмәһә, Шверинер-Зе күле буйында һуҙылып урынлашҡан. Күрһәтер гүзәл урындары байтаҡ булып сыҡты ҡаланың: Шверин замогы, Кафедраль Собор, музейҙар, театр, көмбәҙенә алтын ялатылған иҫ китмәле матур сиркәүҙәр, осло ҡыйыҡлы, семәрле, төрлө фигуралы тәҙрәле, хәтәр матур бейек йорттар, бөйөк кешеләренә ҡуйылған һәйкәлдәр, Ратуша... Бына улар матур баҫҡыстарҙан өҫкә күтәрелде. Ике яҡтан ике йәтеш колонна, уларҙы тимерҙән эшләнгән семәрле арка тоташтырған. Арҡаға ҙур хәрефтәр менән "Совет Армияһына дан!" тигән һүҙҙәр уйылған. Берәй собор кеүек ер, ахырыһы, тип уйлағайны бындағы йәшеллеккә, сәскәләргә һоҡланып Мир. Алдында торған һәйкәлгә күҙ һалғас, тәне сембергәп китте. Башын аҫҡа эйгән оло йәштәге һалдат - уң ҡулында аҫҡа төшөрөлгән автоматы, һул ҡулы менән баш кейемен сисеп, ҡыҡрәгенә ҡыҫҡан. Ниңә ул башын эйгән һәм аҫҡа ҡараған, ни өсөн йөҙө шул ҡәҙәр борсоулы һәм ҡайғылы? Етмәһә, "Совет һалдатына һәйкәл" тигән яҙыуы ла бар. "Юҡ! Совет һалдаты ҡоралын һәлендереп, башын эйеп тормаҫ! Ни өсөн күрәләтә мыҫҡыллап эшләнгән был һәйкәл?" Ҡыҫҡырып уйлаған икән быларҙы, Иоланта уны еңенән тартып туҡтатты, күҙҙәренә ҡараны.

- Тыныслан! Был бит туғандар ҡәберлеге. Был бит фашизм ҡорбандары зыяраты... Меңдәрсә шәһит киткәндәр ерләнгән... - Шунда ғына өлкән сержант Зиннәтуллин тирә-яғына күҙ һалды һәм ҡәберҙәрҙән күплегенә хайран ҡалды. Мендәрсә, әллә миллиондарса ҡәберлек теҙелгәйне. Немец пунктуаллеге, теүәллеге менән ифрат тигеҙ рәттәр булып, матур сәскәләргә күмелгән зыярат, имеш... Мир үҙ ауылының зыяратынан башҡа урын күрмәгән кеше булараҡ, һушы китте! Ауылындағы ҡәберлек бары кескәй убанан һәм баш осондағы таҡтаташтан ғына ғибәрәт. Һуғыш йылдарында аслыҡтан һәр ғаиләлә икешәр-өсәр бала ҡырылғанда кем нисек булдыра, шулай ерләгәндәр. Өҫтә генә яткан ҡәберлектәр ҙә бар. Сөнки туң ерҙе ҡаҙырға ас халыҡтың көсө лә, кәре лә булмаған...

Мир ҡабаланып зыяраттан сыҡты. Уның бында артабан ҡалырлыҡ хәле лә, теләге лә булманы. Каруселдәре әйләнеп торған парктар, асыҡ һауалағы сәхнәлә барған концерттар һәм башҡалар егеттең күңелендә аңлашылмаған тойғолар уятты. Бер яҡтан, был хәтле матурлыҡтан, булдырып һоҡланды. Икенсе яҡтан, бындағы ҡәнәғәт ҡиәфәттә йөрөгән туҡ немецтарҙың тыныс йөҙҙәре, гелән байрам төҫөндәге ҡаланың балҡыуы, унда ла, бында ла яңғыраған музыка - уның һарыуын ҡайнатты. "Еңелгән ил! Бөтөн Европаны ҡырып һалған фашистар ояһы! Ниңә улар еңелгәндән һуң да шулай бәхетле йәшәргә тейеш! Улар бит беҙҙең алда теҙ сүкте!

Беҙҙә булырға тейеш ошо хөрриәт, ошо байлыҡ! Ниңә беҙҙә һаман аслы-туҡлы тормош, аҡсаһыҙлыҡ, ҡул көсө менән башҡарылған ауыр хеҙмәт? Киреһенсә булырға тейеш түгелме ни?" Мир Зиннәтуллин күпме генә уйланмаһын, быны аңларлыҡ аҡылы етмәне.

- Ниңә һин бойоҡ? - тип тәтелдәне Иоланта-Миләүшә. - Оҡшаманымы ни? Һеҙҙә бынан матурыраҡтыр инде, шулаймы? Их, күрергә ине Советтар Союҙын, ундағы бәхетле совет халҡын! - Егеттең өндәшмәүен күреп, һорашыуын дауам итте. - Һеҙҙең ҡалала, йәки баш ҡалала, Мәскәүҙә, ниндәй күркәм урындар бар? Һөйлә әле, миңә бик ҡыҙыҡ. ...

Нимә генә һөйләһен инде ауылдан яңы сыҡҡан йәш егет, ул әле үҙе лә Өфөнө, Мәскәүҙе күргәне юҡ. Ниндәй матур урындар бар икәнен дә белмәй. Армияға китеп барышлай Өфөнө лә, Мәскәүҙе лә үтте үтеүен. Әммә унда призывниктар менән тынҡыслап тултырылған автобуста ни күрәһең? Мәскәүҙә хәтәр ҙур Кремлдең, бөйөк Ленин ятҡан мавзолей барлығын ишетеп белә лә, үҙ күҙҙәрең менән күрмәгәс, ни һөйләһен? Уфтанып ҡуя Мир: ҡайтҡас, иң беренсе эше итеп Мәскәүҙе, унан Өфөнө ҡарап сығасаҡ. Уларҙа ла ошондай хозур, маҡтап һөйләрлек урындар барҙыр бит инде...

Икенсе тапҡыр Шверинда паркта ойошторолған асыҡ һауалағы киске уйынға һалдаттар взводтары менән барҙы. Бөтә тирә-йүн ҡолаҡты ярып барған немец көйҙәренән яңғырап тора. "Молодая гвардия", "Сын полка", "Повесть о настоящем человеке", "Во имя Родины" кеүек совет фильмдарын ҡарап, фашистарға нәфрәт менән тәрбиәләнгән Мирға был немец көйҙәренә бейеү - уның намыҫынан көлөүгә тиң булды. Ул ырғып тороп бейеү майҙанынан сығып китте, артынан ҡысҡырып ҡалған иптәштәренә әйләнеп тә ҡараманы...

- Беҙҙең фамилия молдаванса Гожану ине, мин дә, ата-бабам да Гожану булған, - тип һөйләй Юрген ҡарт һаҫыҡ трубкаһын һура-һура. - Әммә бында килеп, ҡасып йәшәй башлағас, атайым фамилияһын, исемен үҙгәртеп, яңы ҡағыҙҙар юлланы. Ә мин өйләнгәс, бисәнең фамилияһына күстем, шулай итеп Коссманға әйләндем.

Мир Юрген ҡарттың ябыҡ ҡына, осло танаулы, сырыш сикәле, төпкә батҡан күҙле ҡатынына баға. Уға был фрау тәү күреүҙән оҡшаманы. Нисектер төҫһеҙ, буш кеүек күренде уға немец әбейе. Уның йөҙөнә ҡарап ҡына нимә уйлағанын, нимә кисергәнен әйтеп булмай, ҡурсаҡ кеүек гел бер төрлө ҡиәфәттә генә йөрөй. Уның йылмайғанын күргәне, көлгәнен ишеткәне юҡ. Һүҙгә лә һаран, сәй эскәндә, ашағанда Юрген ҡарт менән Мир күберәк һөйләшә, ҡайны ваҡыт Иоланта ла ҡушылып китә. Ниндәйҙер мәрәкә хәбәр һөйләшһәләр, өсәүләп хахылдашҡан ваҡытта ла әбейҙең йөҙө үҙгәрешһеҙ ҡала. Бер яҡ ирен сите генә ҡыбырҙап, салышайып киткәндәй була. Үҙе һаран түгел былай: ҡайтырға ваҡыт етһә, Мирға ҡутарғанса күстәнәсен һала, күп кәрәкмәй, тип баш тартһа, үҙең ашамаһаң, башҡа һалдаттарға бирерһең, тип кире ҡаҡмаҫлыҡ итеп төйнәндереп ебәрә. Иоланта-Миләүшә тышҡы ҡиәфәте менән әсәһенә оҡшаңҡыраһа ла: һары сәстәр, зәңгәр-шәмәхә күҙ, ябыҡлау ғына кәүҙә, холҡо менән иһә атаһына тартҡан. Һөйләшергә лә, көлөргә лә ярата. Берәй эш менән булышып йөрөгәндә ҡыҙҙың сылтырап көлгән тауышы уларҙы дәртләндереп ебәрә, күңелде күтәрә. Быйыл инде Иоланта мәктәпте тамамланы, көҙгә Магдебург ҡалаһына колледжға уҡырға инергә ниәтләй.

Магдебург уларҙың йәшәгән еренән йыраҡ түгел. Хуторҙан Шверинға сығаһың да, поезд менән ике сәғәттә барып та етәһен. Әлбиттә, машина йә автобус менән барһаң, бер сәғәткә лә етмәҫ ине лә. Тик юлда әллә күпме быуа, эреле-ваҡлы күлдәрҙе үтергә кәрәк. Улар аша иһә күпер юҡ. Тик поезд өсөн генә һалынған күперҙәр бар, улары бик бейек итеп эшләнгән. Күлдәр, быуалар, һаҙлыҡ күп булғас, һауа һәр ваҡыт дымҡыл. Тәүге йыл ошо дымдан йыш ауырыны һалдаттар. Мир ҙа тымаулап ныҡ йҙаланы, елдән йыш һыуыҡ тейҙереп этләнде. Унан аяҡтары сиҡанлап, боҙолоп йҙаланы. Йылға яҡын шулай йонсоған организмдары күнекте шикелле дымлы климатҡа, ярайлашып, нығынып киттеләр. Тик яҙҙан көҙгәсә серәкәй-себене ҡаҡшата инде йәнгә тейеп. Ә ҡыштар бында беҙҙәге кеүек оҙон түгел, декабрҙән февралгәсә тиһәң дә була. Ҡар ҙа әҙ, ныҡ һыуыҡтар ҙа булмай. Иң һыуыҡ тип бер 10-12 градусты әйтәләр, ахырыһы. Беҙҙәге ише саҫҡау һыуыҡтарҙағы 40 градус булһа, билләһи, бахыр немецтар туңып үлерҙәр ине, шәйт.

Йәй ҙә үтте. Көҙгә һыуыҡтар башланһа, Мирҙың хеҙмәте тула. Оҙон-оҙаҡ өс йыл ваҡыт үтеп тә китте. Тәүҙә Әлкәлә "учебка"ла ятҡанда көндәрҙе үткәрә алмай, сәғәт-минутын һанап бер булһалар, ҡайтыр көн яҡынайған һайын йәнә шундай һағыныу тойғолары нығыраҡ үҙегенә үтте һалдаттарҙың. Ҡулына гармунын йышыраҡ ала, һағынышлы моңло башҡорт йырҙарын йышыраҡ һуҙа башланы Мир. Араларында ныҡ матур тауышлы һалдаттар ҙа бар, улар йырлап ҡушыла. Бигерәк тә рус егете Михаил йырларға ярата, тауышы ла көслө. Ул да гармун тартып маташа, Мирҙан бушаһа, алып тыҙҡылдатырға тотона. Байтаҡ таҡмаҡ һәм еңел йырҙарҙы һуҙырға өйрәнеп тә алды. Әммә гармун әлегә уның ҡулында Мирҙыҡы ише һайрап тормай.

- Һин ҡайтып китһән, беҙгә ныҡ күңелһеҙ буласаҡ! - ти егеттәр. - Гармун да булмаһа, ҡалайтырбыҙ?

- Ә мин һеҙгә гармунды ҡалдырам! - тип көтмәгәндә әйтеп һала Мир. - Һатам! Әйҙәгеҙ, кем һатып ала?

Шаяртып ҡына әйтһә лә, һалдаттарға шул етә ҡала. Михаилды гармунды һатып алырға өгөтләй башлайҙар. Был гармунды Мир үҙе Шверин ҡалаһына увольнениеға сыҡҡанда бер немец ҡартынан һатып алғайны. Матур яңғырашлы, яңы булмаһа ла, ваҡытлыса ярар, тип алып китте. Хәҙер әллә ҡайҙағы тыуған яғына ул иҫке гармун һөйрәп ҡайтып бармаҫ инде. Һатҡан аҡсаға әсәһенә, ағаһы-еңгәсәйенә, уларҙың ике улына бүләктәр, ят күстәнәстәр алып ҡайтырға мөмкин. Етмәһә, әйҙә көтөү көтөп, унан ҡалһа муйыл йыйып, йомран-алйырҙан тотоп заготконторағa тапшырып, шул аҡсаға өр-яңы, көмөш телле хромка алып ҡалдырып китте. Өй башында иң ҡәҙерле урында йәшеренеп кенә Мирҙың ҡайтыуын һағынып көтөп ултыра бит ул. Бына ҡайтыр ҙа көмөш телдәрен зыңғырлатып, ҡыҙҙарҙың йөрәген елкендереп, ауыл урамын бер урар тальяны менән...

**(Дауамы. Башы 45-47-се һандарҙа).**

ЯҘЫУСЫҒА ӨС҆ ҺОРАУ

# ФРОНТОВИК ҠЫҘЫ УЛ

**Шағирә Миңлегөл ХИСАМОВА мәктәп йылдарында уҡ ижад итә башлай. Шиғриәте ихлас, улар күңелдә тыуа, шунда йәшәй, кәрәк саҡта ҡағыҙға төшә. Бына шулай ижад итә Миңлегөл Сәлимйән ҡыҙы. Уның хистәр менән тулышҡан лирик шиғриәтен үҙ итеүселәр бихисап. Ысынлап та, Миңлегөл Сәлимйән ҡыҙының шиғырҙарын уҡып, күңел дауаһы ла, йыуанысы ла табырға була. Был юлы өс һорауыбыҙҙы уға төбәнек.**



**➔ Миңлегөл апай, һеҙ бер шиғырығыҙҙа:**
**Ижадымда мин бурыслы мәңге**
**Әсәм менән тыуған яғыма, -**
**тип яҙаһығыҙ. Һеҙҙең ижадығыҙҙың ҙур өлөшөн, ысынлап та, тыуған яҡ тематикаһы биләй. Ә бөгөн тыуған яҡ менән бәйләнеш бармы, әллә ул хәҙер хәтирәләр ебе генәме?**

- Тыуған ерем Көйөргәҙе районы Ялсыҡай ауылына ғүмерем буйы һөйөү һаҡлайым. Тыуған яғыбыҙ - бала сағыбыҙҙың сәнгелдәге бит ул, шуға ла ул һәр кемгә ҡәҙерле. Беҙ йәш саҡта иптәшем Ғәлим менән дә бер аҙ Күмертау ҡалаһында йәшәп алдыҡ. Ауылға яҡын булғас, гел ҡайтҡы килеп кенә тора ине. Ул саҡта оло йәштә булһа ла олатайым, уның ҡыҙы Мәрғизә апайым иҫәндәр ине әле. Күмертауҙан Өфөгә күсеп киткәс, йәнәт кенә ҡайтып йөрөп булманы, әйтергә лә түгел, һағындыра ине. Шулай ҙа ауылдан туғандар, таныштар килеп торҙо. Хәҙер ҙә ҡайтып торабыҙ, тик мөмкинлеккә ҡарап, тиһәм дөрөҫ булыр. Вирус таралған саҡта ике йыл буйы юлға сыға алманыҡ, шул мәлдә, ысынлап та, ҡыйын булды. Ә былай тыуған ергә булған һөйөүем, һағыныуым йырҙарымда сағыла килә. Уларҙы яратып йырлаған-дар бар, шуны белеү үҙе лә ҙур ҡыуаныс.

**➔ Һеҙ йәшерәк саҡта яугир әҙиптәр ҙә иҫән булған, үҙегеҙ ҙә фронтовик ҡыҙы. Ул быуын вәкилдәре менән осрашыуҙар ҙа булғандыр бит? Берәйһен иҫкә алайыҡ.**

- Мин эшләгән 28-се махсус интернат-мәктәптә әҙәбиәтебеҙҙең аҡһаҡалы, халыҡ шағиры, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Мостай Кәрим менән осрашыу мәңге онотолмаҫ тәьҫорат ҡалдырҙы. Хеҙмәттәшем Нурия Мәүлетҡол ҡыҙы Сәхәпова М. Кәрим ижады тураһында кисә үткәрергә ниәтләне. 1999 йылдың март айҙары ине. Мостай ағайҙың 80 йәшлек юбилейы алдынан мәктәптәр уны саҡырыуға сират алғандар. Оло әҙипте мәктәбебеҙгә килтереүҙе үҙ өҫтөмә алдым. Шылтыратҡан саҡта ағайҙың гел мәктәптә сағы тура килә. Ҡыҙы Әлфиә ханым минең һорауҙы еткергән икән. Икенсеме-өсөнсөмө тапҡыр шылтыратҡанда шағирҙы өйҙә тура килтереп, кисәгә саҡырҙым. Мостай ағай теләп риза булды. Кисә шул тиклем матур үтте. Балалар шағирҙың әҫәрҙәрен яттан һөйләнеләр, ағайҙың ижады һәм тормошо тураһында һорауҙар бирҙеләр. Мостай ағай балаларҙың тынлай белеүҙәренә һоҡланды, уларҙың әҙәби әҫәрҙәрҙе күп уҡыуҙарын белеп ҡыуанды һәм кисәнең аҙағында: "Күңел күҙегеҙ күреүгә шатмын", - тине. Кисәнән һуң сәй өҫтәле артында Мостай ағайға беҙ, педагогтар, үҙебеҙҙең һорауҙарҙы бирҙек, автографтар алдыҡ. Бөтәбеҙ ҙә был кисәнән оло ҡәнәғәтлек алдыҡ.

**➔ Бер китабығыҙ "Тынлыҡтарҙа ҡалам" тип атала? Ни өсөн шағирә тынлыкта ҡалыуҙы хуп күрә?**

- "Тынлыҡтарҙа ҡалам" тигән китабым 50 йәшем уңайы менән нәшер ителде. Кешегә, ғөмүмән, ниндәйҙер ваҡыт арауығында яңғыҙ ҡалып уйланыу кәрәктер, яҙышҡан кешегә бигерәк тә... Әлбиттә, был хәл оҙаҡ айҙарға, йылдарға һуҙылырға тейеш түгел. Сөнки кеше донъяла бер үҙе генә йәшәй алмай. Уға кеше менән аралашыу, үҙенең янында кемдеңдер булыуын тойоу кәрәк, ә икенсе төрлө булғанда, кеше сәбәпһеҙҙән ауырып китеүе лә мөмкин. Был минең генә фекерем түгел, психологтар ҙа шулай тип яҙа бит. Ләкин ваҡыты-ваҡыты менән тынлыҡта ҡалыу, тынлыҡты тыңлау ижадсы өсөн файҙалы.

Фәрзәнә ФӘТИХОВА
һорауҙар бирҙе.

ҺАБАҠТАР

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУ...

## бәхеткә юл аса



**Тормошта ҡыуанған да, илаған ваҡыттар ҙа була. Кемдер уңышҡа тиҙ өлгәшә, бәхет күгендә кинәнә, ә икенселәргә төрлө һынау-картәләрҙе үткәрергә тура килә. Кемгәләр бөтә нәмә еңел бирелә, ә кемдер ҡаршылыҡтарға абына. Ни өсөн шулай килеп сыға? Тик һеҙ генә үҙ яҙмышығыҙ хужаһы, уны нисек теләйһегеҙ, шулай үҙгәртә һәм тик матур хәтирәләр менән йәшәй алаһығыҙ. Иң беренсенән, эштәрегеҙ уң булһын өсөн уй-фекерҙе тәртипкә килтерергә кәрәк. Ғүмеремдең төрлө сағы булды, ҡоланым, яҙмыш төрлө кәртә ҡорҙо, әммә һынып ҡалманым, тороп баҫтым. Күпте күрҙем, ишеттем, ошо тәжрибәмде һеҙгә лә тәҡдим итәм.**

Бәхетле булыу өсөн һәр ваҡыт ыңғай уйҙа булырға кәрәк. Ә уйҙарҙың ниндәйе генә юҡ, мәҫәлән: "Минең ҡулымдан килә" "Мин үҙемә ышанам", "Барыһы ла яҡшы буласаҡ", "Байлыҡ - минең ҡулда", "Минең ғүмерем тик шатлыҡтан һәм мөхәббәттән тора". Ошо һүҙҙәрҙе юлдаш итһәң, яңы һулыш асылыр.

Кем нимә һөйләмәҫ, һәр кемдең һүҙен күңелегеҙгә яҡын алмағыҙ, ниндәй сифаттар һеҙҙә барын үҙегеҙ беләһегеҙ. Кеше һүҙен тыңлап, төшөнкөлөккә бирелгәнендә һәм паника һөжүме ауына эләгеүҙе һиҙмәй ҙә ҡалаһың ул. Был осраҡта бер ниндәй табип та, яҡындар ҙа, иптәштәрең дә һине аңламаясаҡ. Минең дә шундай хәлдә ҡалғаным булды. Шул саҡта күберәк психология буйынса китаптар уҡыным, ундағы аффирмацияны башҡа һеңдереп барҙым. Бына шунда минә йән тыныслығы килде һәм янынан тыуған кеүек булдым. Үҙемде ыңғай уйҙар уйларға мәжбүр иттем. Оҡшаған эш табасағыма ышандым. Әлбиттә, юлымда яратҡан һәм аңлаған кешемде осраттым, ул - әлеге ваҡытта минең ҙур таянысым. Шуныһы мөһим, һинә ышанған кеше янында булһа, тағы ла дәрт-көс өҫтәлә. Йәйап депрессиянан ҡотола башланым, үҙемде ҡулға алдым, үҙемә ышандым. Күп тә үтмәй, күңелемә ятҡан эш тә табылды.

Беҙҙе уратып алған бәләләр һәм уңышһыҙлыҡтар өсөн үҙебеҙ генә ғәйепле, башҡаларҙан ғәйеп эҙләргә кәрәк түгел. Өйҙә ятып ҡына бәхет һауанан төшмәй, етешһеҙлектәрҙән ҡотолоу өсөн эшләргә кәрәк. Кемдер, бәлки, минең менән килешмәҫ, ә үҙенә ышанмаһаң, нисек бәхеткә өлгәшәһең?

Ыңғай уй менән һәм яҡшы теләктәр теләп йөрөргә кәрәк, сөнки улар йыһан менән бәйле һәм киләсәккә программа бирә, матдилаша. Был донъяла мин иң бәхетле кеше тип әйтеп торһағыҙ, һеҙҙең эргәлә йылы мөхит барлыҡҡа килә, барыһы ла ыңғай була һәм ихлас күңелле кешеләр генә уратып алыр. Яҡты уйҙар киреһенә ҡарағанда мең тапҡырға көслөрәк. Гел һөйләнеп, финанс проблемалары менән борсолоп, көндәлек мәшәҡәткә бирләнеп, көйөнөп, булғанына ҡәнәғәт булмай йөрөгәндәргә йыһан шул уҡ мәшәҡәтте тағы ла өҫтәп бирер. Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр, моғайын: оптимист, тормошонан ҡәнәғәт кешеләрҙе тап үҙе ишеләр урата. Һәр ваҡыт мыжып, сирләп, зарланып, аҡса етмәй тип борсолғандарға ҡарап күңел дә төшә.

Хис-тойғоно контролгә алып, уларҙы дөрөҫ йүнәлештә торорға була, уны иртән торғас та башларға мөмкин. Әгәр йоҡо туймай, йөҙөгөҙ һытыҡ, асыуланып йөрөһәгеҙ, бөтә көнөгөҙ шулай үтәсәк. Яҡшы кәйеф уңышҡа илткән юл. Аллаһы Тәғәләне ҙурлап, рәхмәт әйтегеҙ, Хоҙайҙан иртәгәһе көндө тағы ла уңышлыраҡ биреүен һорағыҙ.

Уй-ниәт ҡабул булһын өсөн нимә теләгәнеңде аныҡ белергә һәм йыһан мөмкинлектәренә ышанырға кәрәк. Иң мөһиме, үҙеңде хөрмәт итергә, юғары баһа бирергә. Башҡаларҙан кәм күргән һайын, йәмғиәттә ихтирам яулауы ауыр. Телдә ятҡан тиҫкәре һүҙҙәрҙе алып ташлап, матур һүҙбәйләнештәр менән алмаштырығыҙ, мәҫәлән: "Эт кеүек арыным" тимәгеҙ, "Фәрештә кеүек эшләнем" тиеү дөрөҫөрәк була.

Матур йөкмәткеле йырҙар тыңлағыҙ, төрлө күңелле саралар ҙа ҡатнашып йөрөгөҙ. Тирә-яҡҡа күҙ һалығыҙ һәм гүзәллегенә иғтибар итегеҙ. Ҡоштар һайрауы ла ҡайһы ваҡытта йәнгә дауа. Күберәк саф һауала йөрөгөҙ. Ҡыуанырға, хыялланырға ҡурҡмағыҙ, уларҙың бойомға ашыу һәләте бар. Нисә йәштә булыуығыҙға ҡарамаҫтан, мөғжизәгә ышанығыҙ.

Динара МӘҠСҮТОВА.

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# КЕМ УЛ "ҺӘСӘКӘЙ"?

**Элегерәк, үҙем бала саҡта, беҙҙең Баймаҡ яҡтарында ҡыҙ балаларҙы матур итеп кейендереп, уларҙы ҡыландырып, шаяртып, яратып (ҡайһы саҡта хатта осондороп та ебәргеләп), уларға "һәсәкәй" тиҙәр ине.**

Баймаҡтан сығып китеүемә бик оҙаҡ йылдар үтеп киткәс һәм унда йәшәмәгәс, хәҙер был һүҙҙе яҡташтарым ҡулланамы, юҡмы икәнен әйтә алмайым. Мин ололарҙан "Нимә була ул "һәсәкәй"?" тип һораштырғылап ҡарағаным булды, әммә анык ҡына, теүәл яуап алғаным булманы. Был һүҙҙә бөтәһе лә белә, кем тураһында һүҙ барғанын аңлайҙар, билдәле бер холоҡло ҡыҙ балаларға ҡарата бик тә урынлы ҡулланалар ине. "Һәсәкәй" тигән һүҙҙе ишетеү менән шундуҡ шаярырға, ҡыланып, иркәләнергә яратҡан, шул арҡала еңелсәрәк, шаталағыраҡ холоҡло күренгән ҡыҙ бала күҙ алдына килә ине...

"Һәсәкәй" һүҙенең тарихын, төп мәғәнәһен аңларға тырышып, күп кенә эҙләнеүҙәр үткәрергә, һорашырға тура килде, әммә бөрәү ҙә уның нимә икәнен аңлата алманы. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был һүҙҙең килеп сығышын, мәғәнәһен иҫкә төшкән һайын йәки фольклор, этнографик экспедицияларҙа йөрөгәндә гел һораштырғыланым. Баймаҡ яҡтарынан башҡа ерҙәрҙә был һүҙҙе белмәйҙәр. Соҡсона торғас, баяғы һүҙҙең осо уғыҙ телдәренән килеп сыҡты. Баҡтиһәң, был бик борондо һүҙ булып, уғыҙ телдәрендә "хасекий" формаһында яңғырай икән. Мәғәнәһе, урыҫ теле аша аңлатҡанда, "милая сердцу" була икән.

Билдәле булыуынса, төрөк халҡының теле төрки тел ғаиләһенең уғыҙ төркөмөнә ҡарай. Үҙ тыуған (уғыҙҙар) телендәге был борондо һүҙҙе төрөк солтаны Сөләймән үҙенең яратҡан ҡатыны Хөррәмгә ҡарата яратып әйтер булған һәм уны 1521 йылда ҡатынының титулы итеп дәүләт кимәлендә ҡанунлаштырып ҡуя. Шунан был "һәсәкәй" тигән һүҙ титулға әйләнә.

Төрки телдәре буйынса белгестәр беҙҙең башҡорт теле боронғораҡ уғыҙ теленә яҡынлыраҡ булған тигән ҡараشта торалар. Һуңғараҡ, татар-монголдарҙың Европа яғына ҡарай хәрәкәте арҡаһында ҡыпсаҡтар үҙ далаларында ҡыйратылып, туҙҙырылып, төрлө яҡҡа, шул иҫәптән Урал яғына ла таралышалар. Ҡыпсаҡтарҙың Урал яғына күсенеүе бер нисә быуатҡа һуҙыла. Ошо күсенеүҙәр арҡаһында ҡыпсаҡтар башҡорттар менән ныҡлап аралашып ултыралар һәм телебеҙҙең уғыҙҙарға тартымыраҡ сифаты юғала барып, яйлап ҡына ҡыпсаҡлашыуға килтерә. Әммә боронғо һүҙҙәр, боронғо мәғәнәһен онотҡан көндә лә, унда-бында барыбер ҡулланыла. Тимәк, йәшәй бирәләр.

Әйҙә, телебеҙгә һаҡсыл булып, әле йәшәп килгән боронғо матур һүҙҙәребеҙҙе йышыраҡ ҡулланайыҡ. Һүҙ ҡулланыла икән, тимәк, телебеҙ ҙә матурыраҡ яңғырар һәм байыраҡ булыр, тигән өмөт менән бөтөрәм был бәләкәй генә мәҡәләмде.

Зәкирйән ӘМИНЕВ,
этнограф.

*✓ Ҡара йөндән бик килешле итеп баҫып, сит-ситенә ап-аҡ ҡынанан милли биҙәген дә һалып эшләгән был оҙон камзул әлегә районда ғына түгел, республикала ла тәүге тәжрибә тип баһаланды.*



ИНТЕРНЕТТАН



# АВТОБУС АРТЫНАН...

## йүгер

■ Физик күнекмәләр - сәләмәтлек нигеҙе тиҙәр, ә һеҙҙең уға ваҡытығыҙ юҡмы? Сидней университеты ғалимдары билдәләүенсә, көнөнә бер нисә минут ҡына ла актив эшмәкәрлек ғүмерҙе оҙайта. Тикшеренеүҙәрҙә 40 йәштән 69 йәшкә тиклемге 70 мең кеше ҡатнашҡан. Бер аҙна буйына улар әүҙемлек трекеры тағып йөрөй, ғалимдар ошо ваҡыт эсендә уларҙың әүҙемлек кимәлен өйрәнә. 7 йыл дауамында бара был эш. Хатта аҙнаһына 15 минут ҡына әүҙемлек тә иртә үлем хәүефен - 18, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын - 15 һәм яман шеште 17 процентҡа кәметкән. Шуға ла даими махсус күнекмәләргә ваҡытығыҙ юҡ икән, күберәк йәйәү йөрөгөҙ, был да иҫәпләнә. Автобусты ҡыуып тоторға тырышып йүгерәһегеҙме, әллә спортзалда йүгерәһегеҙме - организм өсөн айырма юҡ, ике осраҡ та даими ҡабатланып тороу шарты менән сәләмәтлекте һаҡлау һәм йәшлекте оҙайтыуға йүнәлтелә ала.

■ Икенсе икмәк тип йөрөтөлгән, барыһы ла яратып ашаған картуфҡа ваҡыты-ваҡыты менән ғәйеп ташлап ҡына торалар. Мәҫәлән, картуф ашау артыҡ ауырлыҡ йыйыуға, 2-се типтағы диабет үҫешенә булышлыҡ итә тигән фекер бар ине. Эдит Коуэн университеты ғалимдары тикшеренеүҙәре быға мөһим бер деталь өҫтәгән. Эш картуфта ла түгел, ә уны нисек бешереүҙә. Тикшеренеүҙәрҙә 54 мең кеше ҡатнаша. Ҡыҙҙырылған, фри йәки пюре итеп ашалған картуф ысынлап та, диабетҡа килтереүе ихтимал икән. Ә бына һыуҙа бешкән картуфҡа бер ниндәй ҙә дәғүә юҡ. Киреһенсә, был йәшелсә туҡлыҡлы матдәләргә бай һәм дөрөҫ әҙерләгәндә сәләмәтлеккә лә, фигураға ла бер зыяны теймәй.

■ Психологтар эстән күңелегеҙҙе ҡорт кимерһә лә, тыштан гел йылмайып торорға кәңәш итә. Йәнәһе, ауыҙ көсләп булһа ла йылмая икән, унын эске торошҡа ла яҡшы тәьҫир итеүе бар. Кеше билдәле бер эмоция кисереү менән бәйле мимик мускулына көсөргәнеш төшөрә икән, ысынлап та ошо хисте кисерә башлай, тигән теория, ысынлап та, бар. Шуға хатта механик рәүештә йылмайыу кәйефте яҡшырта ала. Әммә быны да нескәлектәре бар. Стэнфорд университеты ғалимдары ошо проблемаға арналған 138 эште тикшереп, ҡайһы бер кешеләргә ыңғай тәьҫир өсөн ошононң да етеүен билдәләгән. Тәжрибәлә 19 илдән 4 мең кеше ҡатнашҡан. Улар йылмайырға тейеш булған, тик кемдәргәлер быға өлгәшеү өсөн экранда төрлө сюжеттар күрһәткәндәр, тормоштарынан матур ваҡиғаларҙы иҫләргә кәңәш иткәндәр, кемдәрҙер ручканы ауыҙына ҡабып торған. Һуңғы вариант яһалма йылмайыу тыуҙырыу өсөн кәрәкле мускулдарҙы хәрәкәткә килтергәне өсөн иң ышаныслы вариант, әммә ҡалған ысулдарға ҡарағанда ул иң насар тәьҫир күрһәткән. Тимәк, йылмайыу кәйефте күтәрһен өсөн йылмайып ҡарау ғына ярҙам итмәй, быны өсөн дөрөҫ эмоциональ фон да кәрәк.

■ Чикаго университеты 7 йыл буйына 60 йәштән 100 йәшкәсә кешенең рационын күҙәтеп, флавонолдарға бай ризыҡ ашаусыларҙың фекерләү ҡеүәһе лә, хәтере лә яҡшы булыуын асыҡлаған. Хәтерҙе һаҡлау йәһәтенән иң файҙалыһы булып кемпферол торған, ул кәбеҫтә, ҡуҙаҡлылар, сәй, шпинат, брокколиҙа күп. Аҡыл сәләмәтлеген һаҡлау өсөн күберәк йәшелсә, еләк-емеш ашағыҙ, сәй эсегеҙ, ти ғалимдар.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

**Беҙҙең Учалы районы ағинәйҙәре үҙҙәренең дәрте, энтузиазмы, ойошторған саралары менән аптыратыуҙан, һоҡландырыуҙан туҡтамай. "Көҙгө ҡатыҡ" байрамы ойоштороп, һыйыр ағынан әллә күпме ризыҡ әҙерләп була икәнен, башҡорттоң борон-борондан бынамын тигән туҡланыу рәүеше барлығын раҫлаусылар - улар. Онотола башлаған ер-һыу атамалары тураһындағы хәтерҙе сүпләп йыйып, хәҙер инде бер китаплыҡ итеп туплаусылар - улар. Аяҡ аҫтыбыҙҙа үҫкән дарыу үләндәре белгестәрен, халыҡ дауалары менән шөғөлләнеүселәрҙе йыйып, ата-бабаларҙың халыҡ медицинаһы серҙәрен иҫкә төшөрөүселәр - улар. Башҡорт ҡатын-ҡыҙының ҡорама ҡорау тигән кәсебен тергеҙеүселәр ҙә - улар. Учалы районында йәшәүсе табын ырыуы башҡорттарының милли кейемдәрен, милли биҙәүестәрен тергеҙеү менән дә иң әүҙем шөғөлләнеүселәр - улар. Һанай китһәң, ағинәйҙәр эшләмәгән, улар ҡатнашмаған берәй сара бармы икән беҙҙең төбәктә?**

# ҺАРЫҠ ЙӨНӨ...

## дауа ла, йылы кейем, йылы ҡаралды ла



Бына әле күптән түгел үткәргән сарабыҙ "Һарыҡ йөнө - файҙалы тәбиғи сеймал, йылы кейем" тип аталды. Йыл башында уҡ был фестиваль-конкурсты илебеҙҙә иғлан ителгән Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ йылына арнарға һөйләшкәйнек. Һарыҡ малы бит халыҡты туҡландыра ла, кейендерә лә, хатта дауалай ҙа. Шулай уҡ тирмәләр, түшәк-юрғандар эшләргә лә һарыҡ йөнө - төп сеймал. Ә йөндөң сайыры иһә иң шәп дауалау сараһы икәнен дә белмәгән кеше юҡтыр. Шуға ла һарыҡ малы менән бәйле шөғөлдәр, мәҫәлән, һарыҡ йөнөн эшкәртеүҙе, кейеҙ-кейем баҫыуҙы үҙ эсенә алған кәсептәр иң тәүге сиратта тергеҙелергә тейеш. Юҡһа, ҡасандыр халҡыбыҙ көнитмешендә ҙур урын алып торған һарыҡ йөнө лә кәрәкмәгән бер нәмәгә әйләнеп китте бит: ҡырҡып алған йөн сүплеккә ырғытыла, бынамын тигән тун сеймалы булырҙай тире лә ергә күмеп ҡуйыла хәҙер.

Шулай итеп, Илсе ауылы клубы ул көндө халыҡтың ошо шөғөлөн, кәсебен тергеҙеү, көнкүрешкә индереү өсөн ең һыҙғанып эшкә тотонған кейеҙ баҫыусыларҙы, балаҫ һуғыусыларҙы, һарыҡ йөнөнән юрған күбеүселәрҙе, йылы әйберҙәр бәйләүселәрҙе бер майҙанға йыйҙы. Бына Иҫке Байрамғол (Әүеш) ағинәйҙәре янына киләбеҙ. Оло ғына йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, һарыҡ йөнө кейеҙенән эшләнгән оҙон камзулдарын кейеп (үҙҙәре уны елән тип атаған), йылмайып ҡаршыланы улар баһалама ағзаларын һәм ҡунаҡтарҙы. Ҡара йөндән бик килешле итеп баҫып, сит-ситенә ап-аҡ ҡынанан милли биҙәген дә һалып эшләгән был оҙон камзул әлегә районда ғына түгел, республикала ла тәүге тәжрибә тип баһаланды.

Шул уҡ Иҫке Байрамғол ауылынан Венера Насырова үҙе эшләгән әйберҙәр менән таныштырғанда һарыҡ йөнөн әрәм-шәрәм итмәүҙәре менән ғорурланып та алды. Ул үҙе һарыҡ йөнөнән түшәген, юрғанын, хатта мендәрҙәрен дә эшләй икән. Машинала барғанда һөйәнер арҡалығы ла, сәйнүгән ҡаплағысы ла ошо һарыҡ йөнөнән эшләнгән. "Кемдәрҙеңдер ҡаҙ мамығына аллергия булһа, һарыҡ йөнөнән эшләнгәненә ундай сир янамай. Себер яҡтарында йәшәгән саҡта уҡ ятыр-торорҙо һарыҡ йөнөнән әҙерләп өйрәндем. Тыуған яҡҡа ҡайтҡас та был кәсебемде ташламайым, шундай файҙалы сеймалды ни эшләп сүплеккә ташлап ҡуйырға, ти", - тип һөйләне ул әйберҙәрен күрһәтә-күрһәтә. Тағы бер әйбер менән аптыратты ул. Һарыҡ йөнөнән "йорон" тип аталған кейеҙ рәүешендә эшләнгән был әйбер шартаяҡ (хоккей) һуғыусы ир-егеттәргә енси ағзаларын һаҡлау өсөн ҡаплама итеп тәғәйенләнгән икән. Улы Фәрит Насыров уны әсәһенән Салауат Юлаев исемендәге хоккей командаһы егеттәре заказы буйынса эшләткән. Бына әле хоккей уйнаусы ҡатын-ҡыҙҙар ҙа түштәренә ҡуйыу өсөн ошондай уҡ һарыҡ йөнөнән ҡаплама эшләргә заказ биргән...

Ураҙ ауылы ағинәйҙәре күргәҙмәһенә киләбеҙ. Улар ҡалыныраҡ итеп аҡ йөндән баҫҡан көртөйҙәрен (камзул) кейеп, тыпырлап, бейеп тә китә. Өҫтәлдәрендә шулай уҡ йөндән зауыҡлы итеп баҫылған бейәләй, түбәтәйҙәр күҙ яуын ала. Элек өләсәйҙәребеҙ генә кейә торған оҙон ҡуңыслы ап-аҡ ойоҡбаштары ла күренә.

Шулай уҡ ап-аҡ йөндә камзул итеп баҫып, сит-ситенә башҡорт биҙәге, ырыу тамғаһы ла һалған Ҡунаҡбай ағинәйҙәре лә үҙ эштәренән ҡәнәғәт күренә. "Әле был камзулдарҙы дүрт ағинәйгә генә баҫып кейҙек, артабан барыбыҙға ла эшләйәсәкбеҙ. Беҙ бик










күмәкбеҙ. Ошо эшкә тотонғас, йөндө артыҡ ҡабаланмай, дөрөҫ кенә итеп һалыу, баҫыу өсөн ете ҡат тирең сығырлыҡ көс кәрәклеген дә татыныҡ", - тип һөйләй-һөйләй уҙҙаренең эшләү алымын да күрһәтеп өлгөрҙәләр. Һарыҡ йөнөнән әүәләп баҫылған, бәйләнгән берең-нән-берәһе аҫыл әйберҙәр, уйынсыҡтар эргәһенән ары атлайбыҙ.

Фестивалдә ҡатнашыусы ағинәйҙәр һарыҡ малынан алынған ризыҡ, йөн һәм тире сеймалы тураһында шул тиклем кәрәкле, фәһемле мәғлүмәттәр ишеттерҙе. Бына Илсе ауылы ағинәйҙәре (етәксеһе Зилә Кәлимуллина) һарыҡ йөнө ҡырҡыу буйынса йола күрһәтә. Кемдер йөндө тетә, икенсеһе иләй, өсөнсөһө сирата, дүртенсеһе бәйләй. Әҙер продукция алыу өсөн бына күпме ҡул аша үтә йөн тигәне. Эш араһында һәр кем үҙе белгән аҡылды еткерә: һарыҡ йөнөн сайырланғас ҡына ҡырҡырға кәрәк; беләккә сайырлы йөндән эшләнгән еп бәйләү - ҡулдарға, сайырлы йөндө шул килеш тубыҡҡа бәйләп ҡуйыу - аяҡтарға дауа; яҙғы йөн - бейәләй, ойоҡбаштар бәйләргә, көҙгөһө бейма баҫыуға китә; һарыҡ итендә холестерин аҙ. "Элек һәр йортта 10-15 баш һарыҡ булды бит, - ти кемелер.- Күмәкләп тау буйына йыйылып, һарыҡ ҡырҡалар ине. Шул тиклем күңелле бер өмә күренеше ине ул саҡта. Һарыҡ тиҙәген кирбес һымаҡ итеп һуғып ҡуялар ҙа, Силәбе яҡтарынан килеүселәргә биреп ебәрәләр ине, улар уны яғыулыҡ итеп файҙаланғандар икән..."

Артабанғы аллы-гөллө төстәр уйнатҡан рәттәрҙә һарыҡ йөнө һалып күбелгән йомшаҡ юрғандар урын алған. Иренмәгәндәр, юрғандарының тыштарын да төрлө төстән ҡорағандар! Науруҙ ауылы ағинәйе Миннур Байғарина бына шундай мәғлүмәт еткерҙе: "Беҙ юрған күбергә тотонор алдынан оло ғына әбейҙән элегерәк был эште нисегерәк атҡарғандары тураһында төбәшеп һорашып алдыҡ. Ул өйрәткәнсә, башта күп итеп көлдән һелте ҡайнатып алдыҡ. Тондоролған шул һыуҙа һарыҡ йөнөн йыуҙыҡ. Көл һыуы йөндө йомшарта. Шунан уны шапылтатҡыс менән теттек. Элек йөн тетеү өсөн муйыл ағасынан ян эшләйҙәр ине, хәҙер уны эшләүсе юҡ инде. Шунан йөндө юрған өсөн әҙерләнгән тышлыҡтың һул яғына теҙеп сығып, уратып, уң яғын анһат ҡына әйләндерәбеҙ ҙә ҡуябыҙ. Бына юрғаныбыҙ епенел, йөнө лә анан-бынан сығып сәнселәп тормай".

Балбыҡ ауылы ағинәйҙәре иһә һарыҡ йөнөнән юрғанды балалар өсөн эшләй икән. Бала һалҡын тейеп ауырыһа, уны ошондай юрған менән урап һалалар ҙа ҡуялар. Ағинәй Зәйнә Ибраһимованың һөйләгәне лә иғтибарға лайыҡ: "Халыҡ бит һарыҡ йөнөнөң шифалы икәнен һәр саҡ белде. Минең 90 йәшлек инәйем быуындары һыҙлап китһә, сайырлы ғына йөндө аяҡтарына урап бәйләп ҡуйыр ине. Ысынлап та, бер ни тиклем ваҡыттан һыҙлауы баҫыла тегенең. Бөгөнгө сара бик күп нәмәне иҫкә төшөрҙө, белмәгәнде белеп ҡалдыҡ..."

Күргәзмәләр менән танышыу дауам итә. Килмәк ағинәйҙәре станоктарын да алып килгән икән, улар шунда уҡ тула һуғып күрһәтте. Үҙҙәре эшкәрткән, буяған һарыҡ йөнөнән келәм дә (беҙҙә аҫалы балаҫты шулай тиҙәр) һуғалар булып сыҡты. Арыраҡ күҙгә ташланып торған оло кейеҙгә "Ғәлиәхмәр" тигән яҙыу баҫылған. Кемдеке икәне әллә ҡайҙан күренеп тора: уны Ғәлиәхмәр ауылы ағинәйҙәре мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре менән берләп махсус рәүештә ошо сараға әҙерләп алып килгән. Тәүге тәжрибә булһа ла, бынамын тигән килеп сыҡҡан кейеҙҙәре. Арыраҡ ағас ҡолғаларында йөн иләп ултырған Рысай ауылы ағинәйҙәре янында туҡтайбыҙ. Йөн эше - күмәк ҡул талап итә шул. Бында ла кемдер иләй, кемдер иләнгәнен сирата, йомғаҡлаусылары ла бар. Эргәләрендә бер өйөм бәйләнгән йөн ойоҡбаштары ла ята. Тоҡтоҡ йөндө эшкәртеп, яу ҡырында йөрөгән ир-егеттәребеҙгә әҙерләүҙәре икән. Ғөмүмән, Учалы районының һәр ауылында ағинәйҙәр ҙә, башҡа ҡатын-ҡыҙҙар ҙа йәй башынан алып көҙ буйына ошо эш - яуға киткән ир-егеттәргә һарыҡ йөнөнән ойоҡбаштар, бейәләйҙәр бәйләү менән мәшғүл. Был хаҡта һөйләгәндә һәр кем күҙҙәренә йәш алды, һүҙҙәрен "Иҫән-имен генә әйләнеп ҡайтһын инде улдарыбыҙ", тигән теләктәре менән йомлап ҡуйҙы...

Күргәзмә ваҡытында оҫталыҡ дәрестәре лә ҡараныҡ. Иҫке Байрамғол ағинәйе Римма апай баҫып кейгән кейемдәренә биҙәкте махсус энә ярҙамында төшөрөп булыуын билдәләһә, Елена Ҡорамшина иләнмәгән йөндән ырғаҡ менән ойоҡбаш, бейәләй бәйләү оҫталығын күрһәтте. Бындай әйберҙәр бик йылы килеп сыға икән. Бөйҙә ағинәйе ӘлфиәТимерғәлинаның оҫталыҡ дәресе лә күптәргә оҡшаны. Оҫтабикә еңел генә итеп йөндән өйҙә кейә торған аяҡ кейеме баҫырға өйрәтте. Биҙәп тә ебәрһәң, бына тигән була икән!

Этнограф Азат Ғарипов сарыҡ эшләү буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрҙе. Үҙе эшләгән сарыҡтарын күрһәтеп, эшләү алымдары менән уртаҡлашты. Биҙәктәрҙең мәғәнәһе, ир-егеттәр өсөн әҙерләнгән сарыҡтағы биҙәктәрҙең төрө, ҡатын-ҡыҙҙар сарығындағы биҙәктәрҙең һалыныу алымдарын да бик ентекле итеп аңлатты. Әйткәндәй, ул быға тиклем дә район ағинәйҙәре менән табын ырыуы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейемдәре, биҙәүестәре, шулай уҡ сарыҡ, ҡата кеүек аяҡ кейемдәре буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрә килде. Шуға ла бөгөн Учалы ағинәйҙәренең һәр береһе тиерлек ырыуға хас милли кейемдәре, ягалары менән маҡтана ала, улар белгестәрҙә лә һорау тыуҙырмай. Сарыҡты ла иң тәүҙә Учалы ағинәйҙәре башлап эшләне. Был юлы ла Азат Салауат улы сарыҡ тураһында бик күп мәғлүмәт бирҙе: "Тула менән кейеҙҙең айырмаһы шунда: кейеҙ сарыҡ эшләүгә яраҡһыҙ. Еүешләнһә, ҡата ла ҡуя. Ә тула һыу үткәрмәй", - тигәне лә һорау биреүсегә урынлы яуап булды.

Ошондай файҙалы ла, күңелгә ятышлы ла, халыҡты ла берләштергән сараны Учалы районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы мәҙәниәт бүлеге менән берлектә ойошторҙо. Илсе ауылы мәҙәниәт йорто хеҙмәткәрҙәре, ниәтебеҙҙе ишеткәс, сараның уҙҙәрендә үтәсәген ихлас ҡабул итте, иркен, яҡты фойела һәр ҡатнашыусыға тәғәйен урын әҙерләп ҡуйҙы. Майҙанға сыҡҡан оҫтабикәләрҙе район хакимиәте башлығы Азат Вәлитов ҡайнар сәләмләп, сараның уҙҙәрендә үтеүенә шатлығын да белдерҙе. Учалы районы хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Гүзәлиә Шағәлина ла сикһеҙ һоҡланыуын белдереп, райондың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһына оло рәхмәтен еткерҙе, бындай фестивалдең дауамы булырға тейешлегенә ишара яһаны. Район башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Мозафар Ҡадиров "Ағинәй" ойошмаһының бик әүҙем, кәрәкле эштәр башҡарыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, улар менән берлектә эшләнгән эштәргә йомғаҡ яһап ҡуйҙы. Бер төркөм иң әүҙемдәргә Рәхмәт хаттарын тапшырҙы. Шулай уҡ "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева ла беҙҙең байрам кәйефен арттырып, йылы һүҙҙәре менән дәртләндереп, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының һәм республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының Рәхмәт хаттарын тапшырып шатландырҙы.

Бына шулай, илебеҙ имен булып, күңелдәребеҙгә им, шифа ғына булып ятҡан ошондай саралар үтеп торһон, халҡыбыҙ мирасы шул рәүешле быуындан-быуынға тапшырыла барһын, тигән теләктә тамамланды был күркәм сара.

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА,**
**Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**









УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Энергия аң артынан эйәрә

Эйе, аң ҡайҙа йүнәлтелә, көслө энергия ла шунда бара. Энергия - ижади башланғыс. Ул нимәгә йүнәлтелгән, шуны булдыра. Аңды программалаусы компьютер - ул аң, ә мәғлүмәт - уйҙағы картиналар.

Бынан күп йылдар элек Монте-Карлола ғалимдар аңдың һәләттәре һәм араүыҡта ижад итеү һәләттәрен тикшереү һөҙөмтәләре менән бүлешергә йыйыла. Улар фәндең был йүнәлешен "психотроника" тип атарға ҡарар итә. Психотрон энергия тормош энергияһы менән тығыҙ бәйле. Һеҙ психотрон энергияны ябай күнекмә ярҙамында тоя алаһығыҙ.

#### Нисек психотрон энергияны тойорға?

• Һул ҡулығыҙҙы усығыҙ уң яҡҡа ҡарап торорлоҡ итеп ҡуйығыҙ.

• Уң ҡулығыҙҙың бармаҡтарын һул ҡулығыҙҙың усына йүнәлтегеҙ, уларҙың араһы 10-12 сантиметр булырға тейеш.

• Уң ҡулығыҙҙы яй ғына, ел барлыҡҡа килмәслек итеп аҫҡа-өҫкә йөрөтөгөҙ.

• Һул усығыҙҙа көсеп йөрөгән сәнсеү тойорһоғоҙ. Ул психотрон энергия ярҙамында барлыҡҡа килә лә инде.

Энергияғыҙҙы ижади маҡсаттарға ла йүнәлтергә мөмкин. Әммә бының өсөн өмөт һәм ышаныс булыуы мотлаҡ. Ә хәҙер бер нисә миҫал менән танышайыҡ.

• Лифтҡа ингәс, алыҫ стена буйына ишеккә ҡарап тороғоҙ. Икенсе кеше инеп, һеҙгә арты менән баҫһа, уның елкәһенә теклəп ҡарағыҙ. Уйығыҙҙа ғына нимә барғанын ҡуҙалларға онотмағыҙ. Бер нисә секундтан ул кеше йә елкәһен тырнар, йә боролоп ҡарар.

• Әгәр ресторанда официанттың тиҙ арала эргәгеҙгә килеүен теләһәгеҙ, уға шулай уҡ арттан текләгеҙ һәм уның янығыҙға килеүен күҙаллағыҙ.

• Бер нисә йыл элек бер Америка гәзите уҡыусыларына Биг-Бен сәғәттәренең эшендә тотҡарлыҡ булыуын күҙалларға тәҡдим итә. Ысынлап та, тап билдәләнгән ваҡытта сәғәт эшендә тотҡарлыҡ күҙәтелә. Психотрон энергия рухи нигеҙгә эйә һәм шуға күрә лә ул изге. Уны рухи һәм изге эштәрегеҙҙә ҡулланығыҙ.

#### "Теге яҡ" менән бәйләнеште нығытыу

"Теге яҡ"тың ыңғай энергияһы армияһы һәм Ижадсы менән бәйләнеште һеҙгә мин бирмәнем. Һеҙ һәр саҡ был бәйләнешкә эйә инегеҙ. Һеҙ уның менән бергә тыуҙығыҙ, был донъянан киткәндә лә уның менән бергә ҡаласаҡһығыҙ.

Шулай ҙа Ерҙә бер нәмә лә был бәйләнештең булыуына һәм уны файҙаланыу ҡағиҙәләренә бер генә ишара ла яһамай. Быға мәктәптәрҙә һәм университеттарҙа ла уҡытмайҙар, сиркәү-мәсеттәрҙә лә һөйләмәйҙәр. Бары тик бик асыҡ булмаған тойғолар ғына бар.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 12 ДЕКАБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.10 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.50 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25 Х/ф "Аниматор". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.45, 14.15, 18.05, 23.40, 3.05 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова в России". [16+]
22.40 "Большая игра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Тайны следствия-22". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00, 3.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.48 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 6.00 "Это моя профессия". [12+]**
**12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**17.00 Тәмле. Мы вместе. [12+]**
**17.45 Территория женского счастья. [12+]**
**18.00 Автограф. [12+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**1.45 "Моя семья". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

## 13 ДЕКАБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 23.45, 3.05 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова в России". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Тайны следствия-22". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00, 3.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.48 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Ете егет. [12+]**
**10.45 Специальный репортаж. [12+]**
**11.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**17.00 "Дорога к храму". [0+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 "Елкән". [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 "Это моя профессия". [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**23.30 История одного села. [12+]**
**23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**1.45 Спектакль "Озеро моей души". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**

## 14 ДЕКАБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 23.45, 3.05 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова в России". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Тайны следствия-22". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00, 3.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.48 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Тәмле. Мы вместе. [12+]**
**10.30 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [0+]**
**10.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Башҡорттар. [6+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 17.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**17.00 Д/ф "Легенды об Акмулле". [12+]**
**18.00 "Минең Рәми". Финал межрегионального поэтического конкурса. Прямая трансляция. В перерыве: "Сәңгелдәк". [0+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Спектакль "Ульмасбай". [12+]**
**0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.00 Спектакль "Любишь - не любишь?.". [12+]**
**3.45 Счастливый час. [12+]**
**4.30, 5.30 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 15 ДЕКАБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 23.45, 3.05 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Казанова в России". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Тайны следствия-22". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00, 3.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.48 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45 История одного села. [12+]**
**11.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 "Сулпылар". [0+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 "Легенды Урала". [12+]**
**2.30 Спектакль "Одолжи мне жеребца". [12+]**
**4.30, 5.30 Вечерний телецентр. [12+]**

## 16 ДЕКАБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 1.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". 10-й юбилейный сезон. [0+]
23.20 Д/ф Премьера. "Щедрин-сюита". К 90-летию Родиона Щедрина. [18+]
0.50 Д/ф "Гражданин Китано". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.30 Дуэты. [12+]
23.45 Улыбка на ночь. [16+]
0.50 Х/ф "Самая счастливая". [16+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.49 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**10.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 17.45, 22.00, 6.00 Интервью. [12+]**
**12.00 История одного села. [12+]**
**12.15 Патриот РФ. [12+]**
**12.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.15, 19.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**15.00 "Городок АЮЯ". [6+]**
**15.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Т/с "Бирешмә". [6+]**
**17.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**19.00 "Честно говоря". [12+]**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Башҡорт йыры-2022. [0+]**
**23.00, 4.15 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Колесо времени. [12+]**
**1.15 "Башҡорт йыры". [12+]**
**1.45 Спектакль "Дальше тишина..". [12+]**

## 17 ДЕКАБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота". [0+]
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "ПроУют". [0+]
11.10 Премьера. "Поехали!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.15 Х/ф "Сто дней после детства". [12+]
14.55 Д/ф "Сергей Соловьев. "АССА - пароль для своих". [12+]
15.35 Д/ф "Юстас - Алексу". Тот самый Алекс". [16+]
16.30 Кубок Первого канала по хоккею-2022. Сборная России - сборная Казахстана. [0+]
19.05, 21.35 Премьера. "Снова вместе. Ледниковый период". [0+]
21.00 "Время".
22.20 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
0.45 Х/ф Премьера. "Девятый калибр". [18+]
2.30 "Моя родословная". [12+]
3.20 "Наедине со всеми". [16+]
4.50 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.35 Т/с "Склифосовский". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Закон бумеранга". [16+]
0.40 Х/ф "Ненавижу и люблю". [12+]
4.05 Х/ф "Женская дружба". [16+]
5.46 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 "Это моя профессия". [12+]**
**9.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 "КультУра". [6+]**
**11.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Башкирские народные песни. [12+]**
**19.00, 4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Специальный репортаж. [6+]**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 0.00 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.45 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**1.30 Спектакль "Салават". [12+]**
**3.30 Финликбез. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 "Звени, мой, кубыз!" [0+]**

## 18 ДЕКАБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.15 Х/ф "Мы из джаза". К 65-летию Игоря Скляра. [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Мы из джаза". [12+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Видели видео?" [0+]
14.20 Премьера. "Между прошлым и будущим". Концерт к 90-летию Леонида Дербенева в Кремле. [12+]
16.30 Кубок Первого канала по хоккею-2022. Сборная России - сборная Белоруссии. Прямой эфир. [0+]
19.10 Премьера. "Поем на кухне всей страной". [12+]
21.00 "Время".
22.35 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]
23.45 Д/с "Романовы". [12+]
0.45 "Камера. Мотор. Страна". [16+]
2.20 "Моя родословная". [12+]
3.10 "Наедине со всеми". [16+]
3.50 Д/с "Россия от края до края". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.05 Х/ф "Малахольная". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Н. Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 16.00 Вести.
11.50 Х/ф "Катерина". [12+]
16.30, 19.00 Песни от всей души. [12+]
17.30 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица". Финал.
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.45 Д/ф "Зерно". [12+]
23.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.35 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.35 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [0+]**
**8.15, 2.45 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз).**
**9.30 "Бай". [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет.**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**15.45 "Дорога к храму". [0+]**
**16.15, 3.15 Историческая среда.**
**16.45, 4.15 "Честно говоря". [12+]**
**17.30 Гала-концерт, посвященный 110-летию со дня рождения Ф.Гаскарова. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**20.30 Патриот РФ. [12+]**
**20.45 Дознание. [16+]**
**21.00, 22.30, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Млечный путь". [12+]**
**0.00 Спектакль "Касатка". [12+]**
**2.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**5.00 Финликбез. [12+]**
**5.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 14 ДЕКАБРЬ - БАШҠОРТ ТЕЛЕ КӨНӨ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**48-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡолой. Боролош. Төтөн. Ҡарат. Ҡараҡ. Әжәл. Ра. Робот. Нурия. Әй. Өкө. Акр. Дау. Кинйә. Рота. Каса. Юлдар. Лилиә. Ҡат. Йөгаяҡ. Алтын. Румыния. Әхлаҡлы.

**Вертикаль буйынса:** Ғәйзулла. Ҡараһаҡал. Бөйрәкәй. Бала. Өйөрмә. Тәтәй. Ҡорот. Диана. Яҡтыға. Төлкөсура. Оби. Йәшен. Яңы. Ҡан. Каюта. Угги. Инәй. Ҡая. Әкрен.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**16 декабрь Премьера! "Ҡыҙыл паша"** (Н. Асанбаев). 12+

**17 декабрь "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14-15 декабрь Премьера! "Аҡмулла"** (З. Бураҡаева), ғилем хаҡында ҡисса. 6+

**16 декабрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 10.00, 12.00 6+

**17 декабрь "Волшебник Изумрудного города"** (А. Волков), әкиәт. 12.00 0+

**18 декабрь "Золушка"** (Д. Корнелиссон), тамаша. 11.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 декабрь "Органные шедевры. Пассакалия".** 6+

**14 декабрь "Этническая программа Шамбала".** 6+

**17 декабрь "Аленький цветочек"** ғаилә өсөн мюзикл. 15.00 0+

**"От Баха до рока"** концерт. 18.00 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**14 декабрь "Мустай Карим. Близкий горизонт"** (В. Аношкин). 16.00 0+

**15 декабрь "О чем поет орнамент?"** (В. Аношкин). 14.00 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**14 декабрь Премьера! "Ҡорос. Яугир ат яҙмышы"** (М. Ҡунафин), драма. 6+

**15 декабрь Премьера! "Йөрәк моңдары"** концерт. 6+

**16 декабрь "Ҡарауыл! Атай өйләнә?!"** (Б. Рацер, В. Константинов), комедия. 12+

**17 декабрь "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия. 18.00 12+

**18 декабрь "У камелька"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+

**"Эй, күгәрсенкәйҙәрем..."** (Ф. Бүләков), комедия. 18.00 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**12-14 "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим). 6+

## А. Мөбәрәков ис. Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**17 декабрь "Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драмаһы менән Ҡыҙыл ауылында. 10.00 16+

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Декабрь (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 12 (18) дүшәмбе | 8:02 | 9:32 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:16 |
| 13 (19) шишәмбе | 8:03 | 9:33 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:16 |
| 14 (20) шаршамбы | 8:04 | 9:34 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:16 |
| 15 (21) кесе йома | 8:05 | 9:35 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:16 |
| 16 (22) йома | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:16 |
| 17 (23) шәмбе | 8:07 | 9:37 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:16 |
| 18 (24) йәкшәмбе | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:02 | 16:46 | 18:16 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ИҪКӘРТЕҮ

# БИТЛЕК КЕЙЕРГӘМЕ, КЕЙМӘҪКӘМЕ?



**Роспотребнадзорҙың республика буйынса идаралығы етәксеһе Анна Казак киҙеү һәм киҫкен респиратор вируслы инфекцияның таралыуына бәйле хәл көсөргәнешле тип атаны.**

Бер аҙна эсендә сирлеләр һаны 47 процентҡа артҡан. Гриптың 14 осрағы теркәлгән, уларҙың барыһы ла раҫланған. Өфөлә биш осраҡ, ҡалғандары - республиканың башҡа төбәктәрендә. Күҙәтеү органы етәксеһе әйтеүенсә, сирҙән һаҡланыуҙың иң һөҙөмтәле ысулы - вакцинация. Ғинуар аҙағына - февралгә фаразланған ауырыуҙың иң таралған ваҡытына тиклем иммунитет булдырыу өсөн ай аҙағына тиклем прививка яһатырға кәрәк. "Бөгөн республикала мотлаҡ битлек режимын индереү кәрәкмәй. Коронавирус йоҡтороу осраҡтары ла, ОРВИ һәм грипп буйынса ла мониторинг бара. Хәл насарайһа, индереләсәк", - тине Анна Казак. Предприятиеларға һәм ойошмаларға бөтә бүлек һәм подразделение ауырый башлаған осраҡта битлек режимы индерергә тәҡдим ителә. Медицина ойошмаларында мотлаҡ битлек кейеү талап ителә.

ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

# КЕМ УЛ АҠМУЛЛА?

## Тамашала шул һорауға яуап бар!

**14 декабрҙә, Башҡорт теле көнөндә, М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында бөйөк башҡорт шағиры һәм мәғрифәтсеһе Мифтахетдин Аҡмулла тураһындағы спектаклдең премьераһы көтөлә. Уның режиссеры Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Ш. Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты Рөстәм Хәкимов. Ә билдәле драматург, сценарист, Башҡортостан Кинематографистары берлеге рәйесе, яҙыусы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Зөһрә Буранҡаева - пьеса авторы. Әңгәмәбеҙ - уның менән.**

**➔ Зөһрә Диҡҡәт ҡыҙы, һеҙ әле Милли йәштәр театры коллективы менән бөйөк мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмуллаға бағышланған спектакль буйынса эшләйһегеҙ. Ул байопик буласаҡмы, әллә башҡа төрлө жанрҙы һайланығыҙмы?**

- Пьесаның идеяһын театр үҙе тәҡдим итте. Мифтахетдин Аҡмулланың шәхесе Ислам, суфыйсылыҡҡа һәм шул осорҙоң аҙ өйрәнелгән ысынбарлығына тығыҙ бәйләнгән мәҙәниәтебеҙҙең һәм әҙәбиәтебеҙҙең ҙур бер ҡатламы. Ул осор башҡорттары бик белемле булған - был турала күп яҙыла, шул иҫәптән Брокгауз һәм Эфрондың 1891 йылғы Энциклопедияһындағы "Башҡорттар" мәҡәләһендә лә бар был турала мәғлүмәт. Беҙ ҙә ҡарт өләсәйҙәребеҙ һәм ҡарт олатайҙарыбыҙҙың иҫке төрки телен белеүенә, фарсы һәм ғәрәп телдәрендә уҡыуына шаһит. Әммә был белемгә иҫ киткес бай Көнсығыш, суфыйсылыҡ әҙәбиәте ҡатламы, иҫке төрки телендәге яҙмалар ҡыҫҡа ғына арауыҡ эсендә беҙҙең быуын өсөн һиндәйҙер алыҫ, айырым ғалимдар өйрәнгән өлкәгә әүерелгән. Ә бит былар бер быуат ярым элек кенә булған. Аҡмулла XIX быуат аҙағында тиерлек кенә донъя ҡуйған. Ләкин уның күп шиғырҙарын һәм замандаштарының хеҙмәттәрен аңлатмалар менән уҡырға кәрәк...

Тап ошо сәбәптән был пьесаға тотонорға ҡыймайыраҡ торҙом, сөнки уғата ҙур яуаплылыҡ талап ителә бит. Әйткәндәй, режиссер Зиннур Сөләймәнов һәм драматург Шәүрә Шәкүроваға М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында "Әсмә"не сәхнәләштереүҙәренә рәхмәтлемен. Пьесала ваҡиғалар башҡортса бара, әммә режиссер һәм драматург автор хикәйәләүен, Ризаитдин Фәхретдиновтың үҙ тексын замана башҡорт теленә үҙгәртеп тормаған, ә хикәйәсе-актерҙар иһә күптән түгел генә булған мәҙәниәтебеҙҙең гүзәл телен иғтибар менән тыңларға, тәү ҡарамаҡҡа таныш та тойолған, әммә инде аңлашылмаған фарсы, ғәрәп, иҫке төрки телдәрендәге һүҙҙәр йылғаһына сумырға һәм аңлай башларға мәжбүр булған.

Шулай итеп, театрҙан тағы бер тапҡыр тәҡдим алғас, ваҡыт тығыҙ булыуға ҡарамаҫтан, был оло хеҙмәтте индәремә йөкмәргә тура килде...

Спектаклдәге бөтә персонаждар ҙа Аҡмулла тормошонда ысынлап булыуға ҡарамаҫтан, был байопик түгел, ә заман кешеһе - Хикәйәләүсе күҙлегенән сығып аңлатылған кеүек. Һәм "ҡисса" Аҡмулланың серле биографияһына тап килеп кенә тора, сөнки уның туралағы бик күп факттар - ул халыҡ хәтерендә һаҡланып ҡалған риүәйәттәр.



**➔ Образда Аҡмулланың һиндәй төп һыҙаттарын сағылдырҙығыҙ?**

- Ул йәш, ярһыу, һайлаған эшенә - мәғрифәтселеккә тоғро. Кисергән трагедиянан һуң ысын мосафир суфый тормошон алып барған мулла, сөнки суфыйсылыҡ Ислам ҡанундарын философик күҙлектән аңлау һәм дәрүишлек булараҡ барлыҡҡа килгән.

**➔ Аҡмулланың тормошо совет осоронан алып яҡшы өйрәнелә, бөгөн дә уның шәхесенә иғтибар һис кәмемәй. Уның тормошон һәм эшмәкәрлеген һиндәй сығанаҡтарға таянып өйрәндегеҙ?**

- Әлбиттә, мин М. Аҡмулла тормошон һәм ижадын өйрәнеүсе төп ғалимдар - Әхәт Вилданов, Рәшит Шәкүр, Ғиниәт Ҡунафиндарҙың китаптарын уҡыным. Ғүмерен бөйөк шағир һәм мәғрифәтсенең тормошон өйрәнеүгә бағышлаған яҙыусы Фәнис Янышев бик күп ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр һөйләне. Интернетта күҙгә эләккән мәҡәләләр, Рәшит Шәкүр һәм Ғәзим Шафиҡов мәҡәләләренән ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе алдым. Һәм, әлбиттә, Аҡмулланың шиғырҙары күпте бирә бит. Шулай уҡ спектаклдә ысынбарлыҡта йәшәгән кешеләрҙең исемдәре яңғыраясаҡ, улар бер-ике генә һүҙ әйткән хәлдә лә биографияларын етди өйрәнеү талап ителде.

**➔ Эш барышында һиндәй ҡыҙыҡлы асыштар яһанығыҙ?**

- Заман тамашасыһы өсөн Аҡмулла тормошо, бигерәк тә уның йәшлек осоро - үҙе үк асыш. Шуға күрә билдәһеҙ мәғлүмәттәрҙе асыуға баҫым яһаманыҡ, был рус йәки донъя әҙәбиәте классиктарының тормош юлын бала саҡтан һиндәйҙер кимәлдә белеп үҫеүебеҙгә бәйле генә ҡыҙыҡлы тойола торғайны. Шәхсән минең өсөн был уның биографияһына уғата һаҡлыҡ, нескәлек менән ҡағылыу булды, ә шиғриәтенә килгәндә инде былы ваҡыт үҙе һайланы. Быға тиклем дә әйткәнем бар - Аҡмулланың бик күп шиғырҙарында тик айырым белгестәр генә төшөнөрлөк һүҙҙәр байтаҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, һәр шиғыры әҙәбиәт ынйылары булыуын һәм уларҙы тәржемәләү, бигерәк тә төрлө телдәргә тәржемә итеү кәрәклеген иҫәпкә алып, спектаклдең шиғри өлөшө етерлек көслө килеп сыҡты.

**➔ Материал балаларға, йәштәргә тура килтереп үҙгәртелдеме, әллә йәшкә ҡарап торманығыҙмы?**

- Сәхнәләштереү барыһына ла ҡыҙыҡ буласаҡ, әммә ҡуйыусы төркөмдәң маҡсаты йәш быуынға бер асыҡ һорауға яуап биреүгә ҡайтып ҡалды: "Кем ул Аҡмулла?"

**➔ Аҡмулла тураһындағы спектаклде ҡуйғанда кемдәр ҡатнашты?**

- Бик үҙенсәлекле команда тупланды: ҡуйыусы рәссам Рөстәм Баймөхәмәтов, минә уның менән эшләүе бик оҡшай, ул төптән уйлап эш итә торған рәссам. Хореограф Сулпан Асҡарова, уның менән бик күп саралар һәм сәхнәләштереүҙәрҙе тормошҡа ашырғаныбыҙ бар, бер-беребеҙҙе ярты һүҙҙән аңлап торабыҙ. Тексымды уҡығанда уҡ ул минең нимә әйтергә теләүемде белә. Композитор - "Мин башҡорт телен өйрәнәм", башҡортса рэп-йырҙар авторы Вәсил Ғафаров. Уның менән эшләүе енел, "Нәсихәттәр" һәм "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк" йырҙары ла киң танылыу яулар, тип ышанам. Режиссер Рөстәм Хәкимов һәм уның хәләл ефете, музаһы Гүзәл тураһында әйткәндә - беҙ рухташтар. Театрҙың үҙем яратҡан, шул тиклем күңелемә яҡын башҡорт труппаһы менән репетицияларҙа бергә ултырыуы үҙе бер бәхет: яратҡан эш, яратҡан ижад кешеләре, йәмғиәтебеҙгә шул тиклем кәрәк материал...

**➔ Башҡорт халҡының бөйөк ул һәм ҡыҙҙарына бағышланған спектаклдәр буйынса быға тиклем дә эшләгәнегеҙ бар: Мостай Кәрим, Рәми Ғарипов, Миңлеғәли Шайморатов... Материал шәхесенә күрә айырым ойоштороу эштәрен талап итәме, әллә бер төрлө энциклопедик ҡараш барлыҡҡа килдеме?**

- Эйе, был шағир тураһында өсөнсө спектакль. Шайморатов тураһындағы пьеса документаль буларак, ҡараш һәм маҡсаттары йәһәтенән икенсе төрлөрәк ине. Үҙемдең алымдарымды ҡабатлау ҡурҡыныҫы бар ине, йәшермәйем. Әммә Аҡмулла осрағында мине икенсе тарих ылыҡтырҙы - беҙҙең рухи аң-белем таратыусыларыбыҙ, мәҙрәсә, бөйөк арҡаҙаштары йәшеренгән серле шаршауҙы, шул осорға ҡараған ҡатламды бер аҙ асыу. Килеп сыҡтымы был, юҡмы - тамашасылар хөкөмөндә, ләкин берәйһе Аҡмулла һәйкәле эргәһенән үтеп барышлай беҙҙең спектаклде иҫенә төшөрһә һәм шиғырынан бер нисә юлын хәтерләһә, мине һәм бөтә командабыҙҙы бәхетле итәсәк.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# МАТУР СӘСКӘЛӘР...

## татлы емеш бирмәй

Балаһыҙ кеше кеше һөйләр, балалы кеше балаһын һөйләр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Минең фәлсәфәм ябай ғына: бушағанды тултырам, тулыны бушатам, ҡыҫыған урынымды тырнайым.

**(Эллис Рузвельт).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер эшҡыуар тәбиғәт ҡосағында ял итеп йөрөгәндә йылғала бәләкәй генә кәмәлә ҡармаҡ тотоп ултырған балыҡсыны күреп ҡала. Шул мәлдә генә балыҡсының ҡармағына ҙур балыҡ эләгә. Ошо табыштан һуң балыҡсы ҡармағын һыуҙан алып, кәмәһен ярға ишеп, өйөнә ҡайтырға йыйына башлай. Барыһын да күҙәтеп торған эшҡыуар унан бындай ҙур балыҡ эләктергәнсе күпме ваҡыт үтеүен һорай. "Бер-ике сәғәт самаһы..." - тип яуаплай балыҡсы. "Улай булғас, ниңә һин оҙаҡҡараҡ ҡалып, тағы ла ошондай бер нисә балыҡ тотмайһың?"- тип аптырап һорай эшҡыуар. "Иртәгәгә тиклем минең ғаиләмә бер балыҡ та етә", - була яуап. "Ә һин, гөмүмән, көнөндә ни менән үткәрәһең һуң?" - ти эшҡыуар. "Төшкә ҡәҙәре йоҡлайым, бер-ике сәғәт балыҡ ҡармаҡлайым, шунан балаларым менән уйнайым, ҡатыным менән аралашам, уға ҡайһы бер эштәрҙә ярҙамлашам, шунан урам буйлап сығып китәм, таныштар, дуҫтар менән аралашам, гитарала уйнап, йырлап та алабыҙ. Бына шулай, тормоштоң бар ләззәттәрен татып йәшәйем мин", - ти балыҡсы. "Һин дөрөҫ йәшәмәйһең, дуҫ кеше. Әйҙә, мин һине нисек дөрөҫ эшләргә өйрәтәм. Шунан башлайыҡ: һин көнө буйы балыҡ ҡармаҡла, уны һатҡан аҡсаға үҙеңә ҙур кәмә һатып ал..." "Ә шунан нимә эшләйем?" - тип һорай балыҡсы. "Шунан һин тағы ла күберәк балыҡ тота башлаясаҡһың һәм тағы ла бер кәмә, хатта корабль һатып ала алаcаҡһың.." "Артабан нимә?" "Артабан иһә һин балығыңды аралашсы аша түгел, ә туранан-тура эшкәртеүсе заводҡа үҙең килтереп тапшыра башлаясаҡһың. Шунан инде үҙең асасаҡһың бындай заводты..." "Шунан нимә?" "Шунан инде һин үҙеңдең был төпкөл ауылыңды ҡалдырып, ҡалаға күсерһең, шунан үҙең асҡан фирманың директоры булып китерһең..." "Директор булғансы күпме ваҡыт үтәсәк инде?" "Ун биш-егерме йыл үтәсәк..." "Унан һуң нимә буласаҡ?" "Унан һуң тормошоңдоң иң күңелле мәле башланасаҡ. Һин үҙеңдең фирмаңды бер нисә миллионға һатасаҡһың һәм иң бай кешегә әүереләсәкһең". "Ә артабан?" "Һуңынан һин эшләүҙән туктайһың да, бәләкәй генә берәй ауылға күсеп, тормоштоң бар ләззәттәрен татып йәшәй башлайһың: төшкә ҡәҙәре йоҡлайһың, йылға буйында балыҡ ҡармаҡлайһың, балаларың менән уйнайһың, ҡатыныңа ваҡ-төйәк эштәрҙә ярҙамлашаһың, дуҫтарың һәм яҡындарың менән осрашып, гитарала уйнап, йырлашып ултыраһығыҙ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәррирәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 9 декабрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3540
Заказ - 1559